ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

20-26 июнь (һөтай) 2015

№25 (651)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Һәр рәссамдың - үҙ Салауаты,**

**әммә уның ысын йөҙ-ҡиәфәтен дә асыҡлау зарурҙыр**



**6-7**

**Салауат - бәйғәмбәргә доға ул,**

**йәғни Батырыбыҙ тураһында уйланыу**



**8-9**

**Батырыбыҙ эҙҙәре буйлап**



**11**

**Ураҙа мәктәбе үткәндәр...**

**һәр һынауға әҙер була**



**13**

**ТВ-программа 14**

***Милләтебеҙҙең символы - дәһшәтле һыбайлы Салауат һыны тарихыбыҙҙың боролошонда Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гербында урын алып, инде тотош бер илдең ырыҫ, ҡот билдәһенә әйләнде. Салауат исеме беҙҙең өсөн икһеҙ-сикһеҙ ғорурлыҡ, рухи күтәренкелек сығанағы, ул һәр ваҡыт беҙҙе әйҙәп тороусы көс, ул башҡорттоң ҡайнар йөрәк тибеше, мәңге һүнмәҫ һәм һүрелмәҫ азатлыҡ рухы.***

***Рәшит ШӘКҮР.***

### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Балаға матур, мәғәнәле исем ҡушыу уның киләсәк яҙмышына йоғонто яһай, тигән фекер менән килешәһегеҙме?

***Шәмсинур ШӘЙӘХМӘТОВА, мөғәллимә, хажиә:*** Исем ҡушыу, ысынлап та, кеше тормошонда мөһим әһәмиәткә эйә, сөнки исем уның менән аралашыу, уға өндәшеү өсөн генә кәрәк түгел, бәлки, ул кеше хаҡында мәғлүмәт биреп, уның асылын ҡылыҡһырлап, уға бер биҙәк-символ булып та хеҙмәт итә. Был донъяла ла, киләһендә лә кешене шул бер үк исеме менән әйтеп йөрөтәсәктәр. Мосолман донъяһында сабыйға исем ҡуштырыу оло бер изге йола. Был ғәмәлде башҡарыу өсөн өйгә мотлаҡ дин әһеле - мулла йә хәҙрәт саҡырыла. Ата-әсә һайлаған исем ҡолаҡҡа ятышлы, мәғәнәле һәм яғымлы булырға тейеш, юғиһә, бала үҫеп етә килә исемен оҡшатмаясаҡ икән, ул ғүмере буйы яфа сигеп йәшәргә мәжбүр буласаҡ һәм, әлбиттә, ата-әсәһенә быны өсөн күңелендә үпкә һаҡлауы ла ихтимал. Ә был бик тә ярамаған нәмә, өҫтәүенә, кеше кәмһенеп йә әлеге исеменән оялып, тормош юлында юғалып йә аҙашып йөрөүе лә бар. Әлбиттә, ундай уҡ сиккә барып етергә ярамай, ҙурайып, балиғ булғас, мулланан үҙенә оҡшаған икенсе исемде ҡысҡыртып алыусылар ҙа бар, тик бына был килешәме, юҡмы - әйтеүе ҡыйын, сөнки ата-әсә үҙҙәре ҡушҡан исем менән бергә сабыйҙарына теләк-фатихаларын, алғыштарын да ҡушып еткерә бит...

Ислам динендә ҡушырға ярамай тип иҫәпләнгән һәм яҡшы исемдәр теҙмәһе барлығын беләм. Тәүге төркөмгә Аллаһы Тәғәләнән башҡа кемгәлер буйһоноуҙы, хеҙмәт итеүҙе (Әбдерәсүл, Әбделнәби, Әбделәмир һ.б.), йә булмаһа күрәләтә динһеҙлекте аңлатҡан йә хайуандарға ҡарата әйтелгән, шулай уҡ Аллаһ исеменә ниндәйҙер һүҙ ҡушыу юлы менән яһалған (Абдулланан башҡа, мәҫәлән, Хасбулла, Рәхмәтулла) исемдәр инә. Икенсе, яҡшы исемдәр төркөмөнә иң беренселәрҙән, әйткәнемсә, Абдулла менән Абдрахманды (Аллаһы Тәғәлә яратҡан исемдәр), Аллаға табыныуҙы, Уға хеҙмәт итеүҙе аңлатҡан Әбделғәзиз, Әбделмалик кеүек, шулай уҡ көслө рухлы Аллаһ илселәре Ибраһим, Муса кеүек һәм халыҡ араһында киң таралған башҡа бөтөн яғымлы, мәғәнәле исемдәрҙе индерергә була. Әйткәндәй, сабыйға исем һайлау хоҡуғы нигеҙҙә ата кешегә бирелә, сөнки бала уның нәҫеленә ҡарай, уның фамилияһын йөрөтәсәк. Ә шулай ҙа әсәйҙәр теләген дә иҫәпкә алмай булмайҙыр, моғайын.

**(Дауамы 3-сө биттә).**

### "КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ!

# ХАЛЫҠ ГӘЗИТЕ УЛ

**"Киске Өфө" - халыҡ гәзите. Унда күберәк халыҡ фекере яҙыла. Ниндәйҙер бер йомғаҡҡа төрөлөп, шуның эсенән сыға алмай, буталанып ятҡан фекерле баҫма түгел ул. Ул үҙенең булмышы, баҫылған мәҡәләләре менән халыҡҡа яҡын тора. Ул - үҙ фекерле гәзит. Ул һорауҙы асыҡ итеп, халыҡҡа яҡыныраҡ итеп ҡуя. Гәзитте сығарыусылар халыҡтың булмышына тап килгән хеҙмәт менән була. Шуның өсөн ярата уны уҡыусылар.**

Тағы ла шуны әйтергә кәрәк: һәр бер матбуғат баҫмаһының бурысы - кешегә аң-белем, зиһен өҫтәү, яңы мәғлүмәт биреү. Был йәһәттән дә "Киске Өфө"лә эшләгән һәм уға яҙышҡан авторҙар юғары баҫҡыста тора, тигән фекерҙәмен. Әлбиттә, гәзиттең дә ҡайһы саҡ һағайып ҡалған ваҡыттары була. Күрәһең, был заман ҡуйған һорауға асыҡ ҡына яуап бирә алмай китеүҙәндер. Ул һорауҙар алдында кемдәр генә баҙап ҡалмай хәҙер! Ошонда ла үҙ уҡыусыһын оптимизм менән һуғара "Киске Өфө", ваҡытлыса ауырлыҡтар алдында юғалып ҡалмаҫҡа саҡыра. Сөнки ысынлап та хәҙерге заман ҡатмарлыҡтарын элекке ваҡыттағы - Граждандар һуғышы, колхозлашыу осорондағы, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы менән сағыштырып булмай. Хәҙерге кешелек донъяһы, ижтимағи ҡоролош бер-береһенең тәжрибәһен өйрәнеп, һабаҡтар ала, осло мөйөштәрҙе урап үтә торған юлдар эҙләй. Шуның өсөн, һуҡыр тәкә һымаҡ ҡапыл килеп ҡоймаға төртөлөү осраҡтары булһа ла, бер төртөлөүҙән һуң йәһәт кенә артҡа китеп, ҡаршылыҡты урап үтеү йәки һикереп сығыу юлдарын эҙләй башлай йәмғиәт. Был - ижтимағи тормошобоҙҙоң бөгөнгө хәле. "Киске Өфө"гә теләгем: бына ошондай дәүләт сәйәсәтенә, донъя илдәре сәйәсәтенә ҡағылышлы мәсьәләләргә арналған сығыштарға ла урын бирелһен ине гәзит биттәрендә. Һәр өлкәлә лә геройҙар бар. Ошо әлегә беҙгә сит булған дөйөм сәйәсәт өлкәһендә лә табып булыр ине үҙебеҙҙең шәхестәрҙе, тип уйлайым. Донъя бит үҙҙәрен күрһәтеп өлгөргән кешеләр тарафынан ғына төҙөлмәгән. Донъя - үҙҙәрен күрһәтмәгән йәки күрһәтеп өлгөрмәгән кешеләр тарафынан төҙөлгән. Сөнки улар меңәр тапҡырға күберәк.

**Спартак ИЛЬЯСОВ,**
**яҙыусы,**
**БР Яҙыусылар берлеге рәйесе урынбаҫары.**



12+

✓ *Үҙебеҙгә алмашҡа килер йәш белгестәргә көс һәм дәрт бирер, ҡанатландырып, юл асырға ла өйрәнергә кәрәк беҙгә. Сөнки тик үҙенең улының батырлығын, ҡыҙының уңғанлығын күрә белгән халыҡ ҡына йәшәйәсәк.*



ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Республика ҡалалары һәм райондарының бөтөн почта бүлексәләрендә лә "Киске Өфө" гәзитенә йыл әйләнәһенә яҙылып була. Июндең 25-нә тиклем икенсе ярты йыллыҡҡа "Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһына - 539 һум 76 тингә, 50673 индекслыһына (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) 569 һум 76 тингә яҙыла алаһығыҙ.**

● Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы **kiskeufa.ru** сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу" һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға 420 һумға яҙылырға була.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға - 252 һум.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - 252 һум.



● **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Июндең 20-ләренә тиклем гәзитебеҙҙе яҙҙырып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ араһынан кемдәрҙер **Мәрйәм Бураҡаеваның "Арғымаҡ", Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры", Шәүрә Шәкүрованың "Өфө вокзалы", "400 башҡорт халыҡ йыры", "Антология поэзии Башкортостана", Ә. Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башкортостана", башҡортса "Дини календарь", Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып ҡыуаныуы ихтимал. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгә еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

# ҮҘ УЛЫҢДЫҢ БАТЫРЛЫҒЫН...

## үҙ ҡыҙыңдың уңғанлығын күр!

**Миңлегәли НӘҘЕРҒОЛОВ, филология фәндәре докторы:** Кеше вазифаһына һәм байлығына ҡарамаҫтан, үҙенә йөкмәтелгән эште яҡшы башҡарырға бурыслы. Әлбиттә, уның эше халҡына файҙа килтерергә тейеш. Милләтебеҙҙең аҫыл шәхестәре, зыялылар тип һаналырға хаҡлы кешеләр үҙ халҡына хеҙмәт итеүе менән алдырһын, уларҙың эше дөйөм мәнфәғәтте ҡайғыртһын ине. Халҡың менән етәкселек итергә ынтылыуҙан бигерәк, уға хеҙмәтсе булырға тырышыу мөһим. Беҙгә тиклем йәшәгән быуын зыялыларының эштәрен, заманса мөмкинлектәрҙе файҙаланып, яңы кимәлгә күтәреү - беҙҙең бурысыбыҙ. Мәҫәлән, әҙәбиәт гилеме өлкәһендә эшләгән ғалимдарҙың һәм үҙемдең дә бурысымды башҡорт әҙәбиәте тарихын яҙып ҡалдырған мәшһүр ғалимдарҙың эшен дауам итеүҙә, совет осоронан һуңғы, хәҙерге башҡорт әҙәбиәте тарихын яҙыуҙа күрәм. Һәм был эште мотлаҡ атҡарырға кәрәк, сөнки хәҙерге башҡорт әҙәбиәте тарихы тураһында әле булһа беҙҙең йүнле фәнни хеҙмәтебеҙ юҡ. Башҡорт әҙәбиәт ғилеменең балалар әҙәбиәте, драматургия өлкәләрен төплө өйрәнерлек белгестәргә ҡытлыҡ кисерәбеҙ. Әшкә күберәк йәштәрҙе йәлеп итеп, өйрәнелгән бүлектәрҙе лә киренән өйрәнеп, яңынан-яңы ҡыҙыҡлы тарихи, рухи мәҙәниәт өлгөләре эҙләүҙе дауам итеү зарур бөгөн.

Халҡыбыҙҙың тарихына, мәҙәниәтенә һәм әҙәбиәтенә ҡағылышлы ғилми китаптар халыҡта бик популяр, баҫылып сыҡҡан бере тиҙ арала һатылып тора. Ләкин һуңғы ваҡыт беҙ ниндәйҙер һәлкәүлеккә һалышып алдыҡ. Әйтәйек, ғилми китаптар баҫылып сыҡһа ла, әҙәби йыйынтыҡтар донъя күрһә лә, матбуғатта улар тураһында бер ниндәй мәғлүмәт бирелмәй. Китап баҫтырған кешеләр үҙҙәре үк хеҙмәттәре тураһында һөйләй алмай бит. Нимә эшләптер бер-беребеҙҙең хеҙмәттәрен күреп, баһалап, шуларға рецензия яҙып, хатта тәнҡитләп, һүҙ ҡуҙғатып, халыҡҡа еткерә белмәйбеҙ. Уртаға һалып һөйләшелһә, күп кенә мәсьәләләрҙе хәл итергә, китап уҡыусыларҙы ылыҡтырырға булыр ине. Бына 50-се йылдарҙың икенсе яртыһындағы, 60-70-се йылдарҙағы баҫмаларға күҙ һалһаң, унда һәр сыҡҡан яңы китап тураһында әллә нисәшәр сығыш баҫылған. Заманында тура һүҙле, ҡаты тәнҡитселәр булған өсөн дә әҫәрҙәрҙең кимәле юғары булғандыр, ижадсылар ҙа дөрөҫ һүҙгә ҡаршы сыҡмаған. Хәҙерге яҙыусыларҙың әҫәрен ҙур күләмле итеп тиҙерәк яҙып, күберәк гонорар алырға ынтылыуы күңелдә ҡыра. Урынлы тәнҡит һүҙен тыңлап өйрәнеүҙән тыш, үҙебеҙгә алмашҡа килер йәш белгестәргә көс һәм дәрт бирер, ҡанатландырып, юл асырға ла өйрәнергә кәрәк беҙгә. Сөнки, халыҡ әйтмешләй, тик үҙенең улының батырлығын, ҡыҙының уңғанлығын күрә белгән халыҡ ҡына йәшәйәсәк.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ТУҠТА, МӘЛ!



*Их, малайҙар, малайҙар,*
*Арҡалары ҡалайҙар,*
*Кем йылмайып, кем һынап,*
*Кеме аҫтан ҡарайҙар.*

*Бер нигә лә бирешмәй*
*Балҡып үсһәгеҙ ине,*
*Бабай булғас, йыйылып,*
*Фото төшһәгеҙ ине.*

**Гүзәл Ситдиҡова.**

*Зиннур БОҪҠОНОВ фотоһы.*

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Урал тау-металлургия компанияһы" холдингының генераль директоры Андрей Козицин менән осрашты. Осрашыу барышында Урал тау-металлургия компанияһы предприятиеларында республика ойошмаларының юғары технологиялы, шул иҫәптән импортты алмаштырыусы продукцияларын файҙаланыуҙы киңәйтеү буйынса "юл картаһына" ҡул ҡуйылды. Документ Башҡортостан ойошмаларының холдинг предприятиелары өсөн продукция һәм хеҙмәттәр һатып алыу тәртибендә ҡатнашыуҙың һөҙөмтәлелеген һәм асыҡлығын арттырыуҙа күҙ уңында тота.

✓БРИКС илдәренең хеҙмәт һәм мәшғүллек министрҙары осрашыуы 2016 йылдың 25-26 ғинуарында Өфөлә уҙасаҡ. Был хаҡта журналистар менән аралашҡанда Рәсәйҙең хеҙмәт һәм социаль яҡлау министрының беренсе урынбаҫары Сергей Вельмяйкин хәбәр итте. Ул Женевала Халыҡ-ара хеҙмәт ойошмаһы Генераль конференцияһының 104-се сессияһында ҡатнашты. Был хаҡта БРИКС саммитының рәсми порталы хәбәр итә.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Өфөләге "ART-UFA - 2015" художество форумы сиктәрендә барған республиканың һынлы сәнғәт күргәҙмәһен ҡараны. Күргәҙмәлә республика һәм Рәсәй ҡалаларынан 300-ҙән ашыу рәссам һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре ҡатнаша. Рөстәм Хәмитов киләсәктә республиканың заманса һынлы сәнғәт музейын ойоштороу мәсьәләһе ҡарала, тип белдерҙе. Художество форумы 1 августа тиклем дауам итәсәк.

✓Ағымдағы йылдың ғинуар-майында Өфөлә бөтә финанслау сығанаҡтары иҫәбенә 190 мең квадрат метрҙан ашыу торлаҡ файҙаланыуға тапшырылған, был 2014 йылдың биш айына ҡарағанда 20,5 процентҡа күберәк. Белгестәр әйтеүенсә, бөгөнгө көндә торлаҡҡа һорау ҙур түгел. Ләкин ШОС һәм БРИКС саммиттарының һатыу баҙарына булышлыҡ итеүҙә ыңғай роль уйнауы ихтимал. Башҡортостан федераль кимәлдә билдәләнәсәк, был, бәлки, башҡа төбәктәрҙән һатып алыусыларҙы йәлеп итер.

✓Өфөлә "ӨФӨ" ҡала брендын үҫтереү стратегияһын тикшерәсәктәр. 23 июндә баш ҡала республика брендын әҙерләүгә һәм төрөүгә арналған "Башбренд - 2015" семинары уҙғарыла. Сараға маркетинг һәм киң коммуникациялар буйынса белгес Михаил Дымшиц килә. Эксперт республиканың популяр брендтарын баһалаясаҡ һәм уларҙы яҡшыртыу буйынса кәңәштәр бирәсәк.

✓ *Ата-әсәнең сабыйына теләктәре ошо исемдә сағылыш таба. Һәм, әлбиттә, исем милләттең һәм мәҙәниәттең йөҙөн күрһәтеүсе булып хеҙмәт итергә, кешенең ҡайһы милләттән икәнен күрһәтеп торорға тейеш.*



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Балаға матур, мәғәнәле исем ҡушыу уның киләсәк яҙмышына йоғонто яһай, тигән фекер менән килешәһегеҙме?



(Башы 1-се биттә).

***Айгөл БОХАРБАЕВА, Сибай ҡала ЗАГС бүлеге мөдире:*** Кисә генә бер сабыйға тыуыу тураһында таныҡлыҡ тапшырҙыҡ, иҫән-һау, бәхетле булһын. Һеҙҙең һорауға бәйле, шундай хәл иҫкә төштө: документ тултырыусы рус милләтенән булған хеҙмәткәребеҙ әсә кешенән балаға ҡушыласаҡ исемде ике-өс тапҡыр ҡабатлап һорарға мәжбүр булды: хата ебәрергә ярамай, дөрөҫ яҙырға кәрәк бит. Документтарҙа ебәрелгән хаталар арҡаһында аҙаҡ бик күп мәшәҡәттәр килеп тыуыуы хаҡында бөтәбеҙ ҙә һәйбәт беләбеҙ. "Айым" тигән исем һайлаған икән әсә ҡыҙына. Әлбиттә, ата-әсәнең теләге беҙҙең өсөн закон, тигәндәй, ул үтәлергә тейеш - беҙ уны документҡа теркәйбеҙ. Шул уҡ ваҡытта исем һайлағанда ата-әсәләрҙең уйлабыраҡ эш итеүҙәрен дә теләр инек, сөнки бала ғүмер буйы тыуған ерендә генә йәшәмәйәсәк. Матур яңғыраш-лы, мәғәнәле булыуҙан тыш, ул башҡа телдәрҙә лә еңел әйтелешле булһа, һәр төрлө проблемалар ҙа килеп тыумаясаҡ - хәҙер бит балалар уҡырға, эшләргә сит тарафтарға ла юллана. Тыңлайҙармы, юҡмы - беҙ шулай үҙ теләктәребеҙҙе лә еткерәбеҙ ата-әсәләр иғтибарына. Бүлектә кеше исемдәре буйынса махсус ҡулланмалар ҙа етерлек. Мәҫәлән, филология фәндәре докторы, профессор Ф. Хисаметдинова етәкселегендә сыҡҡан "Кеше исемдәре, атаһының исеме һәм фамилиялар буйынса башҡортса-русса белешмә-һүҙлеге"н ҡулдан төшөрмәй ҡарарға ярата беҙгә килеүселәр.

Шуныһын да әйтәйем, әллә ниндәй ҡолаҡҡа ятмаған, мәғәнәһеҙ исем ҡушыу осраҡтары беҙҙә, бәхеткә күрә, булғаны юҡ. Тик барыбер, әгәр РФ Дәүләт Думаһында ундай исемдәр ҡушыуҙы тыйыусы закон әҙерләргә йыйыналар икән, тимәк, башҡа яҡтарҙа ундай хәлдәр барҙыр инде. Ысынлап та, заманса булырға теләпмелер, "Эльвина", "Эльвира", "Эвелина", "Азалия", "Ясмин", "Карина", "Айсель" тигәнерәк бер ни аңлатмаған яһалма исемдәр ҡушыу модаға инде. Был йәһәттән модаға эйәреп, осраҡлы исемдәргә өҫтөнлөк бирергә түгел, ә сабыйға бәхет-тәүфиҡ теләп, яҙмышының исеме кеүек үк матур, мәғәнәле, далан-лы-данлы булыуын юрап, ғүмер буйы ғорурлыҡ менән йөрөтөрҙәй исемдәр һайлаһын ине ата-әсәләр.

***Резедә СӨЛӘЙМӘНОВА, филология фәндәре кандидаты:*** Кеше исемдәре ҡасан, нисек, тел һәм йәмғиәт үҫешенең ҡайһы баҫҡысында барлыҡҡа килгәндер - быны әйтеүе ауыр, ләкин билдәле булған кешелек йәмғиәте тарихының һәр бер дәүерендә кеше исемдәре булған. Исем иң элек кешегә мөрәжәғәт итеү, өндәшеү, уның менән аралашыу, идара итеү өсөн кәрәк булған. Ата-бабаларыбыҙ борондан исем ҡушыуға бик һаҡ ҡараған. Исемде, кешеләрҙе бер-берећенән айырып торған тамға тип кенә түгел, ә тәрән мәғәнәгә эйә, ниндәйҙер кимәлдә баланың киләсәгенә йоғонто яһаусы фактор булараҡ та ҡулланғандар.

Кеше исемдәренең семантикаһында милли һәм мәҙәни компоненттың булыуын айырып күрһәтергә кәрәк. Башҡорт исемдәрендә халыҡтың тормош-көнкүреш шарттары, менталитеты, ғөрөф-ғәҙәттәре, ырым-йолалары асыҡ сағыла. Һәр исем ниндәйҙер төшөнсәгә бәйле булып сыға. Борон тормош шарттарының ауыр булыуынан һәм медицина ярҙамы етмәгәнлектән, балалар күпләп үлә торған булған. Шуға күрә кешеләр һәр төрлө ырымдар менән балаларҙың ғүмерен һаҡлап ҡалырға тырышҡан. Хәҙерге ваҡытта йәшәп килгән исем, фамилиялар ошо ырым күренештәрен сағылдыра ла инде. Әйтәйек, Һатыбал, Түләбай, Түләк, Түләпбиргән кеүек исемдәр яңы тыуған баланы һатып алыу ырымына бәйләнгән, йәғни үлеп торған кешенең яңы тыуған бәпесен күп балалы ҡатын йәки кендек инәһе үҙенә "һатып" алыр булған.

Төрки телле халыҡтарҙа баланы үлемдән, ғазраил, ен-пәрейҙән һаҡлау өсөн уға әрһеҙ, насар исем ҡушыу йолаһы ла булған. Йәнәһе, ундай исемле балаға ен-пәрей, албаҫтылар ҡарамай, уға теймәй, һәм бала иҫән ҡала. Түбәндәге исемдәр ошондай ырымға бәйле булырға тейеш, тип ҡарала: Эталмаҫ (Италмасов булып киткән), Эттеймәҫ, Этҡол, Этбай һ.б.

Йәнлек исеме менән атау ҙа боронғо күренеш. Ул төрки халыҡтарының күбеһенә хас. Ғәҙәттә, көслө, уҫал, шулай уҡ йылғыр, етеҙ йәнлектәрҙең исеме малайҙарға бирелә: Арыҫланбәк, Айыу, Айыухан, Бүребай, Аҡбүре, Юлбарыҫ, Бурһыҡбай, Төлкөбай, Кейекбай, Януаретдин, Ҡондоҙбай, Һеләүһен һ.б.

Көслө, йыртҡыс ҡоштарҙың исемдәре - малайҙарға, бәләкәй генә, матур һәм һайрар ҡоштар исеме ҡыҙҙарға ҡушылыр булған: Һандуғас, Ҡарлуғас, Тутыя, Былбыл һ.б. Ошо миҫалдарҙан сығып ҡына ла халыҡтың боронборондан исемгә, уның мәғәнәһенә иғтибарлы булыуын күрәбеҙ.

Бөгөнгө көндә лә һәр бер ата-әсә балаһына исем ҡушыуға бик етди ҡарарға тейеш. Был бик ҙур, изге һәм яуаплы бурыс. Ата-әсәнең сабыйына теләктәре ошо исемдә сағылыш таба. Һәм, әлбиттә, исем милләттең һәм мәҙәниәттең йөҙөн күрһәтеүсе булып хеҙмәт итергә, кешенең ҡайһы милләттән икәнен күрһәтеп торорға тейеш. Башҡортостанда һуңғы йылдарҙа сабыйҙарға Батырхан, Арыҫлан, Искәндәр, Тимерхан, Нурсолтан, Таңсулпан һ.б. шундай исемдәр ҡушып, ата-әсәләр был мәсьәләгә етди ҡарауҙарын һәм милли аңлылығын, иманлыҡтарын күрһәтә. Был ҡыуаныслы күренеш.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!



# УТЫН ҺАТЫП...

## машина алдым

**Гәзиттәге ошо рубрика аҫтында сығып килгән мәҡәләләрҙә ололар менән рәттән йәштәр ҙә үҙҙәренең аҡса эшләү серҙәре менән бүлешә. Төрлө өлкәлә үҙҙәренә килем килтергән бихисап ысул табып, уңышлы эшмәкәрлек алып барыусы оҫталарыбыҙҙың күп булыуы шатландыра. Ә бөгөнгө мәҡәлә геройы - үҙенең сослоғо, таһыллығы һәм уңғанлығы менән айырылып тороусы, алдына ҡуйған маҡсаттарына өлгәшеүсе егет әле мәктәп уҡыусыһы ғына. Белем тауына үрмәләү менән бер рәттән, үҙенә аҡса эшләү яйы тапҡан был егет Әбйәлил районы Ҡаҙмаш ауылында йәшәй. Һүҙҙе Салауат САФИУЛЛИНдың үҙенә бирәбеҙ.**

- Һәр егет машина тураһында хыяллана. Мин дә үҙемдең тимер атым булыуын теләнем. Ләкин хыялланып ултырыуҙан ғына ниәттәр тормошҡа ашмай икәнлеген һәр кем белә. Шуға күрә, ниндәйҙер әмәлен табып һәм матди база туплап, үҙемдең ниәт иткән машинамды алырға, тигән аныҡ маҡсат ҡуйҙым. Ҡала ерендә, минеңсә, мәктәп уҡыусыларына теләктәре булһа, аҡса эшләү әллә ни ауырлыҡ тыуҙырмай. Гәзиттәге, интернеттағы төрлө иғландар араһынан үҙеңә оҡшаған һәм хәлеңдән килерҙәй эште табып була. Ә ауылда ниндәй ҙә булһа аҡсалы эш табыуы ауырғараҡ төшә. Хатта ололар өсөн эш урыны табыу ҡайһы берҙә хәл ителмәҫтәй мәсьәлә, ә мәктәп уҡыусыһына бигерәк тә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, мин үҙемә яраҡлы шөғөл таптым һәм машина һатып алырлыҡ аҡса тупланым. Күпселек ауылдарҙа хәҙер өйҙәрҙе зәңгәр яғыулыҡ менән йылыталар, хатта мунсаларын да газға тоташтырыусылар күп. Ләкин утын да ҙур һорау менән файҙалана. Нәҡ ауылдаштарымдың һәм күрше Магнитогорск ҡалаһы кешеләренең утынға булған ихтыяжын үҙемә аҡса килтерерлек ысул итеп алдым да инде.

Машина алырлыҡ аҡса йыйыу өсөн ярты йыл ваҡыт етте. Утынды ҡырҡып, ярып һәм машинаға тейәп оҙатыу, әлбиттә, еңел түгел, ләкин маҡсатыма табан бәләкәй генә булһа ла аҙымдар менән барыуым ҡулыма көс өҫтәне, йөрәгемә дәрт бирҙе. Тәү сиратта, әҙер утынды һатып алыусыны табыу мәсьәләһен хәл иттем. Уның өсөн таныштар, дуҫтар аша шундай хеҙмәт күрһәтеүем тураһында ауылдаштар араһында хәбәр ебәрҙем, интернет селтәрендә Магнитогорск ҡалаһы халҡына тәғәйен иғлан яҙҙым. Тәүге клиенттар оҙаҡ көттөрмәне - бер газель утынға заказ алдым. Эшмәкәрлегемде уҡыуыма зыян килтермәҫлек итеп ойошторғанмын, йәғни буш ваҡыттарымда ғына утын менән булышам. Шулай уҡ йорт-ҡура тирәһендә атай-әсәйгә лә ярҙам итергә кәрәклеге тураһында онотмайым. Яйлап заказдар күбәйҙе, эш артты, килем дә үҙен көттөрмәне. Эштең хаҡына килгәндә, ул артыҡ ҡыйбат түгел - бер газель утынды 2 мең һумға һатам. Утынлыҡ ағас менән ошо өлкәлә үҙенең эшҡыуарлыҡ эшен алып барыусы ағайҙарым ярҙам ҡулы һуҙа, уларға рәхмәтлемен.

Бына ошондай шөғөл табып, аҡса туплап, үҙемә еңел машина һатып алдым. Әйткәндәй, хәҙер инде машинамды икенсегә алмаштырып та ҡуйҙым...

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостанда математиканан профилле Берҙәм дәүләт имтиханында 17027 кеше ҡатнашты. Бер кем дә йөҙ балға яҙмаған, өс уҡыусы 98 балл йыйған - икәүһе Өфөнән һәм берәүһе Белорет районынан. 294 ҡатнашыусы 80 һәм унан юғарыраҡ балл (1,7 процент) туплаған. Республикала профилле кимәлдәге математика буйынса уртаса балл - 42,8. 4266 кеше һынауҙы бирә алманы. Әгәр ҙә рус теленән БДИ һөҙөмтәләре 24 балдан күберәк булһа, улар 23 июндә имтиханды ҡабаттан тапшыра аласаҡ.

✓ Июндә Башҡортостанда ҡыҫҡа ваҡытлы ямғырҙар яуыуы, йәшен йәшнәүе һәм көслө ел иҫеүе көтөлә. "Башгидромет" хәбәр итеүенсә, хәҙерге ваҡытта тупраҡтағы дым запасы нормаға ярашлы. Хәйбулла, Шишмә һәм Баймаҡ райондарында ғына яуым-төшөм аҙыраҡ булған. 25 июнгә тиклем һауа температураһы төндә - 17-22, көндөҙ 29-34 градус йылы буласаҡ. 25 июндән һуң ямғырҙар көтөлмәй, төндә - 13-18, көндөҙ 24-29 градус эҫе. Июлдә һауа температураһының нормаға ярашлы, сентябрь айының йылы һәм ҡоро булыуы күҙаллана.

✓ Башҡортостанда "Берҙәм Рәсәй"ҙең "Реаль эштәр" проектын ғәмәлгә ашырыу дауам итә. Граждандар йыйылышында проектты тормошҡа ашырыу шарттарына ярашлы билдәләнгән башланғыстар тикшерелә. Әлеге ваҡытта республиканың Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайға тәҡдим итеү өсөн документтар пакеты әҙерләнә, сөнки программа сиктәрендә республика бюджетынан муниципаль райондарға һәм ҡала округтарына субсидиялар бүлеү ҡаралған. Ошо көндәрҙә программаға Учалы һәм Кушнаренко райондары ҡушылды.

✓ Бөгөн Башҡортостанда ҡала ситендәге 90 лагерҙа 11 700 бала ял итә. 180 бала - Евпаториялағы "Салют" лагерында, 40 бала "Артек" халыҡ-ара балалар үҙәгендә ял итә. Шулай уҡ бөтә ерҙә лә көндөҙгө лагерҙар эшләй. Бынан тыш, әлеге ваҡытта 519 кеше поход шарттарында ял итә. Тағы ла бер йүнәлеш - хеҙмәт берекмәләре, унда үҫмерҙәргә һөнәри йүнәлеш йәки ваҡытлыса эшкә урынлашыу мөмкинлеге бирелә. Әлеге мәлдә 613 хеҙмәт берекмәләре эшләй, унда 17 700 кеше йәлеп ителгән.

✓ Рәсәй банкы төп ставканы 12,5-тән 11,5 процентҡа тиклем кәметеүе хаҡында иғлан итте. Һуңғы биш айҙа ставка дүртенсе тапҡыр кәметелә. Үҙәк банк мәғлүмәттәре буйынса, илдә инфляция 15,7 процент кимәлендә ҡала.

✓ **20 йылдан ашыу ваҡыт эсендә беҙ халыҡтың тәбиғи үҫеше кимәленә сыҡтыҡ, былтыр был күрһәткес 30 мең кеше тәшкил итте. Ғүмер оҙайлығы артып, 71 йәшкә етте.**



КӨНАУАЗ

# АРТАБЫҘ!



**Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведев Демография сәйәсәте концепцияһын тормошҡа ашырыу барышы буйынса видеоселектор кәңәшмәһе үткәрҙе. Уның эшендә Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов ҡатнашты.**

- 20 йылдан ашыу ваҡыт эсендә беҙ халыҡтың тәбиғи үҫеше кимәленә сыҡтыҡ, былтыр был күрһәткес 30 мең кеше тәшкил итте. Ғүмер оҙайлығы артып, 71 йәшкә етте. Уртаса статистик ғүмер оҙайлығының артыуы - илдең социаль тормошонда әһәмиәтле фактор. Һуңғы ете йыл эсендә ул өс йылға артты. Былар - әһәмиәтле үҙгәреш, - тип билдәләне Дмитрий Медведев.

Шул уҡ ваҡытта Хөкүмәт башлығы демография мәсьәләләрендә хәүефле тенденциялар күренеүен дә билдәләне.

- Былтырҙан башлап үлем күрһәткесе арта башланы, йылдың тәүге айында ғына был һан 3,7 процентҡа етте. Бында барлыҡ территориялар буйынса таралған эпидемик, социаль проблемалар ҙа үҙ ролен уйнай. Беҙгә уларҙың барыһын да хәл итергә кәрәк. Бер үк ваҡытта ҡайһы бер территорияларҙа: Алтай, Ҡарасәй-Черкес, Ингушетия, Мордовия Республикаларында, Алтай крайында, Магадан өлкәһендә һ.б. тыуым күләме кәмей, - тип белдерҙе Дмитрий Медведев.

Премьер-министрҙың һүҙҙәренә ҡарағанда, Рәсәйҙә табиптарға ихтирам ҙур һәм Хөкүмәт артабан да уларға ярҙам күрһәтеп торасаҡ. Әммә бында табиптар ҙа үҙҙәренең һөнәри-административ һәм енәйәти яуаплылығын аңларға тейеш.

Рәсәй Федерацияһының 2025 йылға тиклем Демография сәйәсәте концепцияһы 2007 йылдың 9 октябрендә РФ Президенты Указы менән раҫлана. Уны тормошҡа ашырыуҙың икенсе этабында (2011-2015 йылдар) 2016 йылға халыҡ иҫәбен - 142-143 миллион, ғүмер оҙайлығын - 70 йыл, тыуымдың дөйөм коэффициентын репродуктив йәштәге бер ҡатын-ҡыҙға 1,7 бала кимәлендә тотороҡландырыу ҡаралған. Өсөнсө этапта (2016-2025 йылдар) тормошҡа ашырылған проекттар һәм программалар нигеҙендә илдәге демографик хәл-тороштоң насарайыуы ихтималлығын кәҙаллап иҫкәртеү буйынса саралар үткәреү планлаштырыла.

2015 йылдың 1 ғинуарында Башҡортостанда халыҡ иҫәбе 4 миллион 72 мең кеше, йәғни былтырғы йыл башына ҡарата 2289 кешегә күберәк (0,05 процент) иҫәпләнә. 2014 йылда республикала 60 239 кеше тыуған, был 2013 йыл менән сағыштырғанда 1,65 процентҡа күберәк. Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында Башҡортостан тыуымдың дөйөм коэффициенты кимәле буйынса (1000 кешегә 14,8 процент) беренсе урында тора.

Былтыр республикала 53 509 кеше вафат булһа, был 2013 йыл менән сағыштырғанда 0,3 процентҡа күберәк. Дөйөм үлем коэффициенты кимәле буйынса (1000 кешегә 13,1) Волга буйы федераль округында төбәгебеҙ өсөнсө урында тора. Төп үлем сәбәптәре булып ҡан әйләнеше системаһы ауырыуҙары (41,8 процент), яман һән ябай шешләр (11,7 процент), йәрәхәттәр, ағыуланыуҙар һәм башҡа тышҡы йоғонто сәбәбе әҙемтәләре (11,2 процент) тора.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҺАҠЛАНЫУ КӘРӘК

**Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы ағзалары булған дәүләт башлыҡтары Советы ултырышын үткәрер алдынан Өфөлә террорға ҡаршы комиссиялар һәм оператив штабтарға айырыуса ҙур яуаплылыҡ йөкмәтелә. Был хаҡта Милли террорға ҡаршы көрәш комитеты рәйесе, Рәсәй Федераль хәүефһеҙлек хеҙмәте директоры Александр Бортников белдерҙе.**

Комитеттың Федераль оператив штаб менән берлектәге ултырышында Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич, Рәсәй Президентының башҡа федераль округтарҙағы тулы хоҡуҡлы вәкилдәре, Башҡортостан, Татарстан һәм Сыуашстан башлыҡтары, шулай уҡ федераль башҡарма власть органдарының яуаплы хеҙмәткәрҙәре, хоҡуҡ һаҡлау органдары һәм махсус хеҙмәттәрҙең вәкилдәре ҡатнашты. Йыйылыусылар мөһим халыҡ-ара саралар уҙғарыласаҡ объекттарҙа һәм халыҡ күп йөрөгән урындарҙа хәүефһеҙлекте тәьмин итеү өлкәһендә Волга буйы федераль округы субъекттарында террорға ҡаршы комиссия һәм оператив штабтарҙың эшмәкәрлеген ойоштороу мәсьәләләрен ҡараны.

Милли террорға ҡаршы көрәш комитеты рәйесе үҙ сығышында терроризмға һәм экстремизмға ҡаршы тороу округта власть органдары эшмәкәрлегенең өҫтөнлөклө йүнәлештәренең береһе булыуына иғтибар йүнәлтте. Билдәләнеүенсә, 2014 йылдан алып бөгөнгө көнгә тиклем әүҙем иҫкәртеү эштәре алып барыу һөҙөмтәһендә төбәктә бер генә терракт та булманы һәм террор йүнәлешендәге биш енәйәткә юл ҡуйылманы.

Быйыл февралдә Өфөлә һәм Башҡортостандың башҡа тораҡ пункттарында "Хизб ут-Тахрир әл-Ислами" ойошмаһының 23 ағзаһы ҡулға алынды. Былтыр октябрҙә "Ислам дәүләте" халыҡ-ара террор ойошмаһында торған ике кеше енәйәт яуаплылығына тарттырылды һәм 11 һәм 12 йылға иректәренән мәхрүм итełде. Улар Киров өлкәһендәге химик ҡорал һаҡлау һәм юҡ итеү объектында теракт эшләргә йыйынған. 2014 йылда хоҡуҡ һаҡлау органдары округта ҡорал, боеприпастар һаҡланған ете урынды асыҡлаған. Бынан тыш, ултырышта ҡоралдарҙың, боеприпастарҙың һәм шартлатҡыс матдәләрҙең законһыҙ әйләнешенә ҡаршы тороу, шулай уҡ мөһим һәм хәүефле объекттарҙың террорға ҡаршы хәүефһеҙлеген тәьмин итеү буйынса саралар тураһында Комитет ҡабул иткән ҡарарҙарҙы ғәмәлгә ашырыу мәсьәләләре ҡаралды.

# ЙӘМӘҒӘТ ПАЛАТАҺЫНДА КЕМДӘР?

**Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Башҡортостандың дүртенсе саҡырылыш Йәмәғәт палатаһы ағзаларын раҫланы.**

Палатаның яңы ағзалары араһында республиканың 15 күренекле йәмәғәт эшмәкәре бар. Улар "Башҡортостан" телерадиокомпанияһының "Юлдаш" йыр-моң һәм мәғлүмәт каналы продюсеры Марсель Байдәүләтов, Башҡортостан Республикаһының социаль-сәйәси һәм хоҡуҡи тикшеренеүҙәр институты директоры Рим Вәлиәхмәтов, Башҡортостан Республикаһының йәштәргә патриотик тәрбиә биреү һәм уларҙы хеҙмәткә әҙерләү үҙәгенең бүлек етәксеһе Владимир Волков, Башҡорт дәүләт медицина университетының Онкология ғилми-тикшеренеү институты директоры Шамил Ганцев, "Аҡбуҙат" ипподромының генераль директоры Руслан Ғиззәтуллин, "Домком" идара итеүсе компанияһы" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең генераль директор урынбаҫары Илья Дубинин, Өфө дәүләт авиация техник университеты доценты Алексей Елизарьев, "Башҡортостан Республикаһының муниципаль берәмектәр советы" ассоциацияһының башҡарма директоры Рөстәм Исхаҡов, "Берләштерелгән үтә енел авиация федерацияһы" төбәк йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Сергей Миңлеголов, Башҡортостандың Бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа ярҙам итеү һәм уны үҫтереү фондының генераль директоры Денис Мусин, Башҡортостан Республикаһы Президенты ҡарамағындағы Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы доценты Ғәлиә Мөхәмәтйәнова, Ҡаланы үҫтереү йәмәғәт фондының башҡарма директоры Ольга Панчихина, Өфө дәүләт иҡтисад һәм сервис университеты ректоры Наталья Солодилова, "Төньяҡ амурҙары" хәрби-тарихи клубы" республика йәмәғәт берекмәһе идараһы рәйесе Илдар Юлбарисов, "Факел" дөйөм Рәсәй инвалидтар йәмәғәт ойошмаһының Башҡортостандағы төбәк бүлексәһе рәйесе Марат Йосопов. Ошо уҡ указ менән Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Йәмәғәт палатаһының раҫланған ағзаларына палатаның тулы составын булдырырға тәҡдим итте.

# БИШ ЙОНДОҘЛОҺО ӘҘЕР



**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Өфөлә файҙаланыуға тапшырылған Sheraton отелен тикшерҙе. Республикала Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы ағзалары булған дәүләт башлыҡтары Советының ултырышы һәм БРИКС дәүләттәре һәм хөкүмәттәре башлыҡтарының осрашыуы үткәрелгән ваҡытта отель ҡунаҡтарҙы һәм рәсми делегацияларҙы ҡабул итәсәк.**

Туғыҙ ҡатлы ҡунаҡхана Цюрупа һәм Зәки Вәлиди урамдары киҫелешендә урынлашҡан. Был - республикалағы тәүге халыҡ-ара кимәлдәге биш йондоҙло отель. Унда бөтәһе 161 номер бар.

Объектта төҙөлөш эштәре ике йыл элек башланғайны. Яңы отелдә төҙөү барышында дворян Россинскийҙарҙың XIX быуаттың 50-се йылдарында һалынған йорто реставрацияланды. Хәҙер яңыртылған бинала ҡунаҡхананың ресторанын эшләй.

- Был, ысынлап та, яҡшы һөҙөмтә. Ғәҙәти шарттарҙа дүрт-биш йыл буйы төҙөләсәк объектты ике йыл эсендә сафҡа индерҙек. Шуға ҡарамаҫтан, эштәр сифатлы башҡарылған, - тип билдәләне Рөстәм Хәмитов.

Республика Башлығы ҡунаҡхана бүлмәләрен, ресторандарҙы һәм конференция залдарын ҡараны.

- Барыһы ла яҡшы, - тине төбәк етәксеһе. - Өфө алға ҙур аҙым яһаны. Хәҙер беҙ иң юғары кимәлдәге форумдар, конференциялар һәм башҡа саралар үткәрә аласаҡбыҙ.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Яҙыусылар союзында Автограф көнө уҙғарылды. Акцияны Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте ойоштороҙо. Сарала Рауил Шаммастың "Һайланма әҫәрҙәре"нең беренсе томының исем туйы үтте. Унда Башҡортостандың танылған яҙыусылары һәм шағирҙары саҡырылғайны.

✓Башҡортостанда "Тоҡомсолоҡ эшен һәм һалма аталандырыуҙы үҫтереү" программаһы әҙерләнгән. Программа сиктәрендә 300 меңгә тиклем грант биреп, һалма аталандырыу буйынса ойошмалар булдырыу планлаштырыла. Тоҡомсолоҡ эше белгестәренә, осеменаторҙарға 60 мең һум өҫтәмә һәм ай һайын хеҙмәт хаҡына өҫтәп биш мең һум аҡса түләнәсәк.

✓Өфөлә "Изге ҡулдарҙан китап" хәйриә акцияһы башланды. Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте акцияны ойоштороусы булып сығыш яһаны. Эстафетаны Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәйесе Наил Ғәйетбаев асты. Яҙыусы һәм драматург "Китап" нәшриәтендә донъя күргән китаптарҙы һатып алып, Баймаҡ районында йәшәүсе күп балалы ғаиләгә бирҙе. Наил Ғәйетбаев "Изге ҡулдарҙан китап" эстафетаһын Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы, Өфө сәнғәт академияһы профессоры Таңсулпан Бабичеваға тапшырҙы.

✓Өфөлә "Симфония төнө" акцияһы үтте. Башҡортостандың баш ҡалаһында өсөнсө тапҡыр уҙғарылған проекттың төп маҡсаты - академик музыка сәнғәтен халыҡ араһында пропагандалау. Быйыл асыҡ һауалағы концерт ике майҙансыҡта ойошторолдо. Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, "Симфония төнө"нә 10 мең кеше килгән: Аксаков исемендәге баҡсаға - дүрт мең, "Башҡортостан" дәүләт концерт залы алдына алты мең тамашасы йыйылған.

✓Башҡортостан юлдаш телеканалы "Халыҡ комментаторы" конкурсы иғлан итә. Унда 18 йәштән өлкән һәр кеше ҡатнаша ала. Бәйге шарттары буйынса, телеканалдың рәсми сайтында анкета тултырырға, хоккей уйындарына аңлатма бирергә һәм ошо яҙманы ҡалдырырға кәрәк. Ғаризалар ҡабул итеү 15 июлдә тамамлана.

✓ *Һыра етештереүсе компанияларҙың етештерелгән пластик һауыттарҙың зыянһыҙ булыуы тураһында сертификаттары булһа ла, уларҙың кеше организмына ағыулы дибутилфталат матдәһе бүлеп сығарыуын асыҡлаған.*



*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ЭНЕРГЕТИК ЭСЕМЛЕКТӘР ҺӘМ...



**Башҡортостан парламентарийҙары алкоголь күләме әҙ булған тонусты күтәреүсе эсемлектәрҙе ваҡлап һатыуҙы тулыһынса тыймаҡсы. Ғәмәлдәге төбәк законына үҙгәрештәр индереү проекты ҡабул ителһә, граждандарҙың сәләмәтлегенә насар йоғонто яһаусы бындай эсемлектәр менән сауҙа итеү туктаясаҡ.**

Алкоголь ҡушылған энергетик эсемлектәрҙе ҡулланыу кеше организмына токсик йоғонтоно көсәйтеүе менән хәүефле. Һөҙөмтәлә ул йәштәрҙә алкоголь бәйлелеге барлыҡҡа килтерә. Рәсми статистика һөҙөмтәләре буйынса, был эсемлекте йәштәр, атап әйткәндә, 18 йәшкә тиклемгеләр үҫмерҙәр ҡуллана. 13-17 йәшлектәр араһында алкоголь күләме әҙ булған коктейлдәрҙе 80,8 процент ҡуллана, уларҙың күпселеге - ҡыҙҙар. Үҫмерҙәрҙең 30 проценты коктейлдәрҙе даими эсә. "Республикала алкоголь продукцияһын ваҡлап һатыу 1971 сауҙа ойошмаһы тарафынан башҡарыла. Былтыр улар 31,8 декалитр алкоголь күләме әҙ булған эсемлектәр һатҡан. Республикала 2014 йылда бындай эсемлектәрҙе һатыу дөйөм алкоголь продукцияһы һатыуҙың 1 процентын кәмерәк өлөшөн алып тора", - ти республиканың сауҙа буйынса дәүләт комитеты етәксеһе урынбаҫары Гүзәл Аҫылова. Шуға күрә, джин-тониктарҙы ваҡлап һатыуҙы тыйыу эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүсе субъекттар өсөн артыҡ зыян килтермәйәсәк.

Новелла инициаторҙары -"Берҙәм Рәсәй" партияһының "Йәш Гвардия" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары. Ойошма етәксеһе Владимир Яковлев әйтеүенсә, улар был проблемаға иғтибар йәлеп итер өсөн пикеттар, митингылар уҙғарған. Хәҙер закон проектын ҡарауҙа ла ҡатнашалар.

Энергетик эсемлектәрҙе ҡулланыуҙың хәүефен күҙ уңында тотоп, Рәсәй Федерацияһының 18 субъектында, шул иҫәптән Мәскәү, Киров, Калуга, Волгоград, Төмән, Брянск, Ростов, Нижегородка, Тула, Ҡурған өлкәләрендә, Краснодар крайында, Чечня Республикаһында алкоголь күләме әҙ булған энергетик эсемлектәрҙе ваҡлап һатыу тулыһынса тыйылған.

# ...ПЛАСТИК ШЕШӘЛӘР ТЫЙЫЛА!



**Ә РФ Дәүләт Думаһында "Этил спирты, алкоголле һәм спиртлы продукция етештереү, һатыу һәм алкоголле продукцияны ҡулланыуҙы (эсеүҙе) сиклəү өлкәһендәге эшмәкәрлекте көйләү тураһында"ғы Федераль законға үҙгәрештәр индереү тураһында" Закон проектын ҡарарға йыйыналар.**

Законға ҡеүәте 4 проценттан артҡан алкоголле эсемлектәрҙе 0,5 литрҙан ҙур пластик шешәләргә ҡойоп һатыуҙы туҡтатыу тураһында төҙәтмә индереләсәк. Дәүләт Думаһында 2014 йылдың 10 июнендә үткән тәүге тыңлауҙар ваҡытында был закон проекты хупланған, уға ярашлы, киләһе йылдың 1 ғинуарынан тәү сиратта ике литрлыҡ һыра һауыттары ҡулланылыштан сығарыла башлаясаҡ. Рәсәйҙәге бөтә һыра етештереүсе компанияларҙың үҙҙәрендә етештерелгән пластик һауыттарҙың зыянһыҙ булыуы тураһында сертификаттары булһа ла, тикшеренеү һөҙөмтәләре уларҙың кеше организмына ағыулы дибутилфталат матдәһе бүлеп сығарыуын асыҡлаған. Бөгөнгө көндә Рәсәйҙә аҙыҡ-түлекте пластик һауыттарға һалып һатыуға сығарыу тулыһынса рөхсәт ителгән, Өфөлә етештерелгән Efes Rus маркалы һыраның да яртыһы сауҙа нөктәләренә пластик шешәләргә ҡойоп сығарыла. Әммә һыра етештереүсе предприятиелар етәкселәре, яңы закон ҡабул ителеп, пластик шешәләрҙе ҡулланыуҙы тулыһынса тыйыу һыра менән сауҙа итеүҙе кәметәсәк, был ойошмаларҙа эшләгән күп кешеләр эшһеҙ ҡаласаҡ, дәүләт ҡаҙнаһына ингән килем ҡырҡа кәмейәсәк, тип билдәләй. Дәүләт кимәлендә алкоголле һәм спиртлы эсемлектәрҙе ҡулланыуҙы кәметеүгә йүнәлтелгән ниндәй генә сара күрелмәһен, етештереүселәрҙең хаҡтар күтәрелеүе менән ҡурҡытырға әҙер тороуы бер бөгөн түгел.

*КӨН ҠАҘАҒЫ*



# АГРЕССОР КЕМ?

**Ағымдағы йылдың 13-сө июнендә Американың билдәле һәм абруйлы гәзиттәренең береһе "The New York Times" Пентагондың Көнсығыш Европа һәм Прибалтика илдәренә ауыр хәрби техника ебәреү ниәте хаҡында яҙып сыҡты. Бында, башлыса, атап үтелгән илдәрҙә танк, пехотаның хәрби машиналары һәм башҡа ауыр һуғыш техникаһын урынлаштырыу мөмкинлеге тураһында һүҙ бара. Күптән түгел Польша хөкүмәтенең Пентагон менән үҙ территорияһында ауыр хәрби ҡорал урынлаштырыу тураһында һөйләшеүҙәр алып барыуы тураһында белдереүе гәзит битендә донъя күргән хәбәргә ышанырға урын ҡалдыра. Пентагондың был аҙымын шулай уҡ Эстония һәм Литваның да хуплап ҡаршы алыуы билдәле.**

Рәсәй тарафынан яуап оҙаҡ көттөрмәне. Ил президенты Владимир Путин "Армия - 2015" Халыҡ-ара хәрби-техник форумда: "Быйылғы йылда илдең йәҙрә көстәре 40-тан ашыу яңы континенталь-ара баллистик ракеталар менән тулыланасаҡ. Улар хатта ракетаға ҡаршы оборонаның техник йәһәттән камил системаларын да үтеү һәләтенә эйә буласаҡ", - тип сығыш яһаһа, илдең Оборона министрлығы вәкиле: "Америка танктарының Рәсәй сиге янында тупланыуы көҙәтелгән осраҡта, Мәскәү Вашингтонға һәм НАТО-ға үҙенең адекват яуабын бирәсәк. Рәсәйҙең тиҙ арала үҙенең көнбайыш сиктәре янында хәрби көсөн арттырыуы һәм Калининградҡа "Искәндәр"ҙәр урынлаштырыуы ихтимал", - тип белдерҙе. Ошо уҡ ведомствоның генераль инспекторҙар идаралығы координаторы, Рәсәй армияһы генералы Юрий Якубов иһә, әгәр ҙә Пентагон һәм НАТО үҙ ниәтен тормошҡа ашыра ҡалһа, был һалҡын һуғыш ваҡытынан алып уларҙың иң агрессив аҙымы буласаҡ, тигән фекерҙә. Ул шулай уҡ Рәсәйҙең Европалағы хәрби көстәр тураһындағы килешеүҙән (ДОВСЕ) бөтөнләй сығыуы уға ниндәй ҙә булһа агрессияға ҡаршы яуап сараларында танк, самолет һәм артиллерия системаларын үҙе теләгән һанда ҡуллана алыу мөмкинлеге тураһында ла белдерҙе.

Владимир Путиндың форумдағы сығышынан һуң НАТО-ның генераль секретаре Йенс Столтенберг: "Рәсәй үҙенең хәрби көстәрен һәм йәҙрә мөмкинлектәрен инвестициялауҙы арттыра бара. Ул шулай уҡ күпләп хәрби күнегеүҙәр уҙғара. Быны ни өсөн беҙ үҙебеҙҙең хәрби көстәрҙең әҙерлеген арттырабыҙ", - тип комментарий бирҙе. Ул шулай уҡ Рәсәй Президентының һүҙҙәрен "нигеҙһеҙ, тотороҡлоҡто ҡаҡшатыусы һәм хәүефле", тип һанауы хаҡында ла билдәләп үтте. Йәғни, унынса, Рәсәй агрессор ролендә килеп сыға була. "The New York Times" биттәрендә сыҡҡан мәғлүмәткә ҡарағанда ла, Пентагондың был аҙымы "Рәсәйҙең Европаға ҡарата агрессия ҡулланыу мөмкинлеген" туҡтатыу ниәтенән сығып эшләнә.

Барлыҡ был ҡапма-ҡаршы әйтешеүҙәр йырып сыға алмаҫлыҡ түңәрәккә эләккәндәй хис тыуҙыра күңелдә. Нисек кенә булмаһын, хәлдәр артабан ҡырҡыулашмаҫ, көсөргәнешлек артмаҫ, тип ышанғы килә.

**Гөлназ САФУАНОВА әҙерләне.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*



# ТАНЫТМАНДЫ ӨЙҘӘ ОНОТҺАҢ...

**"Рәсәй Федерацияһының административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында Кодексына һәм "Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге тураһында" Федераль закондың 21-се статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" Федераль законға ярашлы, хәҙер танытманы өйҙә онотоп ҡалдырыу водителдең транспортын алып ҡалыу өсөн нигеҙ була алмай. ЮХХДИ хеҙмәткәре теләһә ҡайны ваҡытта һәм урында компьютерҙан водителгә таныта бирелгәнме, юҡмы икәнлеген асыҡлай ала. Әммә был яңылыҡ 500 һум штрафтан азат итмәй.**

Бынан тыш, әгәр водитель машинаһын парковкалау рөхсәт ителмәгән билдә аҫтында ҡалдырып та, билдәлә "Эвакуатор эшләй" тигән мәғлүмәтле табличка булмаһа, уның машинаһын штраф туҡталкаһына алып китеү тыйыла. Башҡа үҙгәрештәрҙән айырмалы, был норма ике айҙан һуң - августа ғына көсөнә инәсәк.

Законда яҙылғанса, әгәр эвакуатор урынынан ҡуҙғалғанға тиклем водитель килеп өлгөрһә, машина хужаһына ҡайтарыла. Артыҡ низағ тыумаһын өсөн транспорт сараһын алып китеүгә документ тултырған яуаплы кеше эвакуатор урынынан ҡуҙғалып киткәнсе ваҡиға урынында булырға тейеш. Быға тиклем, эвакуатор ҡуҙғалып киткәнсе машинаһы эргәһенә килеп еткән водителдәр, яуаплы кеше был урында булмау сәбәпле, уны ала алмай ине.

Тағы бер яңылыҡ - инвалидтарҙың машинаһы урынына парковкаланған автомобилдәрҙе эвакуациялау. Бындай урындарҙа инвалидтарҙы йөрөтөүсе машиналар ғына туҡтай ала һәм уларҙа махсус билдә булырға тейеш. Автомобиль хужалары махсус билдәне законһыҙ рәүештә ҡуйып ала икән, ундайҙарға 5 мең һум штраф түләргә тура киләсәк.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Алма

❖ Алма емешенең углеводҡа, күп төрлө витаминдарға бай икәнен беләбеҙ. Уның составындағы калий организмдағы һыуҙы нормала тоторға булыша. Бигерәк тә йөрәк, ҡан баҫымы сире һәм һимеҙлектән яфаланыусыларға алма ашарға кәрәк, магний, Р һәм С витаминдары ҡан тамырҙарын таҙарта.

❖ Алма һуты бөйөргә ултырған ҡом, таш һәм токсик матдәләрҙе йыуып сығара.

❖ Тимер һәм фолий кислотаһы күп булғанға күрә, алманан яһалған пюре һәм алма һуты аҙ ҡанлылыҡтан ҡотҡара. Шуға ла йөрәк һәм ҡаны сирле кешеләрҙең көнөнә 3-4 алма ашау фәҙәтенә инһен.

❖ Тән бешкәндә йәки өшөгәндә шул урынға йоҡа ғына алма телеме ябаһың.

❖ Бала имеҙеүсе ҡатын-ҡыҙҙың имсәк башы ярылғанда ҡырғыстан үткәрелгән алма менән аҡ майҙы ҡушып ябыу ҙа яҡшы.

❖ Алмағастың япрағын ҡышҡылыҡҡа киптереп алығыҙ. Һалҡын тейгәндә сәй итеп эсерһегеҙ.

❖ Алмағас тамырын сәй итеп эсеү ҡандағы шәкәрҙе кәметә, шәкәр диабеты менән ыҙаланыусыларға бик кәрәкле сәй ул.

## Тын алыу ауырлашһа...

❖ 1 балғалаҡ тоҙ менән 2 бүлем һарымһаҡты төйөп, ваҡлағыҙ ҙа, шуны 15 минут буйы еҫкәгеҙ. Был үпкәне зарарлы бактерияларҙан һаҡлай һәм тын алыуы яҡшырып ҡала.

❖ Эвкалипт япраҡтарын ваҡлап, 5 минут бешереп, боҫон ҡағыҙ көпшә аша һуларға.

## Дауа - баҡсаңда

❖ Миокард инфаркты булмаһын тиһән, аҙнаһына биш мәртәбә кишер йәки шпинат аша. Ундағы А витамины ҡан тамырына ултыра торған холестеринды булдырмауға ярҙам итә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Салауатыбыҙ тарихын өйрәнеүсе ғалимә И. Гвоздикова әйтеүенсә, Эстониянан беҙҙең бер диңгеҙ офицеры Рогервикта мосолманса ерләнгән ике кешенең һөлдәһе табылыуы тураһында 90-сы йылдар башында уға хәбәр иткән.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# САМРАУ - ҠОЯШ КУЛЬТЫ

**Сәмреғоштоң үҙен йәки уның ҡошсоҡтарын аждаһанан ҡотҡарған өсөн Сәмреғош батырҙарҙы икенсе донъяларға алып төшә - был ҡош тураһында иң киң таралған сюжеттарҙың береһе. Сәмреғоштоң ояһы бейек ағас (тирәк, имән) башында була.**

"Болансы Мәргән" әкиәтендә ауыр хәлгә ҡалған герой Сәмреғоштоң өс ҡауырһынын яндырыуы була, ул шунда уҡ осоп килә һәм батырҙы бейек диңгеҙҙәге бейек тирәк үҫкән утрауға алып килә. Тирәктең башында дейеүҙең йәнә һаҡланған йомортҡа була. Сәмреғош батырға дейеү менән көрәшергә ярҙам итә. "Айыуғолаҡ", "Олтан Солтан" әкиәттәрендә Сәмреғош батырҙарҙың яраларын төкөрөгө менән дауалай. "Ҡатым батыр һәм убырлы ҡарсыҡ" әкиәтендә батырҙарҙың яраһы Сәмреғоштоң бер ҡанат һирпеүенән үк бөтәшә.

Сәмреғош менән бәйле тағы бер сюжет ҡыҙыҡлы: әкиәттәрҙә Сәмреғоштоң арҡаһына ултырып осҡан мәлдә үҙҙәре менән алған ит бөтһә, батырҙар үҙҙәренең боттарынан ҡырҡып алынған итте Сәмреғошҡа ашата. Ер өҫтөнә сығып етеп, быны белгәс, Сәмреғош был ит киҫәктәрен ҡоҫоп, геройҙарҙың яраларына һала.

Самреғош - төрки телле һәм һинд-иран халыҡтарының ауыҙ-тел ижадында нығынған мифологик образ, ул төрлөсә аталып йөрөтөлә: Самруҡ, Самыр, Самырау, Симрух, Самург, Симург, Семар, Суиуранка, Сэнмурв, Супарна, Замурак, Замыр, Зюмрюд, һ.б. Шулай уҡ фарсы һәм сығатай телдәрендәге урта быуат әҙәбиәтендә лә Сәмреғош йыш осрай. Самрау/Сәмреғош образы башҡорт халыҡ ижадына иран фольклоры һәм урта быуат иран әҙәбиәте, йәиһә һинд-арий мифологияһы, йәки һинд-герман мәҙәни йолалары йоғонтоһонда килеп ингән тигән фекер ҙә бар ғилми әҙәбиәттә.

Башҡорт ауыҙ-тел ижадында Самрау/ Сәмреғош образын өйрәнеп, башҡорт ғалимдары уның ҡояш менән бәйле булыуын асыҡлаған. Әйткәндәй, һиндтарҙың ведалар осоронда йәшәүселәренең Супарна аллаһы һәм яваларҙың Семары ла соляр культ менән бәйле. Белгестәр билдәләүенсә, уларҙың һәм әйтелеше буйынса оҡшаш башҡа теонимдарҙың уртаҡ - "шам" - яҡтылыҡ һәм "шамс" - ҡояш (ғәрәп. "шәм" - яҡтылыҡ, нур, "шәмс" - ҡояш) тамырлы булыуы бар. Йәғни, мифик ҡоштоң культ булараҡ сығанаҡтары боронғо төрки һәм иран халыҡтары мәҙәниәте менән бәйле.

"Урал батыр" эпосында Самрау Ҡояш һәм Ай менән никахта торған, тип әйткәйнек инде. Самрау менән Ҡояштың ҡыҙы Һомай - ҡояш алиһәһе. Шул уҡ ваҡытта, башҡорттарҙа Һомай алиһәһе культы аҡҡошҡа табыныу менән бәйле, шуға ла уларҙы бергә өйрәнергә кәрәк. Һомайҙың ҡояш илиһәһе булыуы башҡорттарҙың бер нисә ҡояш бар, тип фекер йөрөтөүе тураһында һөйләй. Быны "Ай һәм Урал тауҙары нисек барлыҡҡа килгән" тигән легенда ла раҫлай. Ҡасандыр күк йөҙөндә ике ҡояш булған. Улар сиратлап ерҙе ҡыҙҙырған, эҫенән кешеләр ныҡ арыған. Урал батыр уғы менән ҡояштың береһен урталай ярған. Уның бер өлөшө күктә тороп ҡалған һәм айға әйләнеп, ерҙе төнөн яҡтырта башлаған, ә икенсе өлөшө ергә ҡолап төшкән һәм ҙур тауға әүерелгән.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# ҺӘР РӘССАМДЫҢ - ҮҘ САЛАУАТЫ,

## әммә уның ысын йөҙ-ҡиәфәтен дә асыҡлау зарурҙыр

**Гәзитебеҙҙең был һанында башҡорт халҡының бөйөк батыры Салауат Юлаев шәхесе тураһындағы ҡайһы бер һорауҙарға яуап эҙләргә маташтыҡ (8-се биттәге материалды ла ҡарағыҙ). Билдәле тарихсы-антрополог Ринат ЙОСОПОВты, мәсәлән, батырҙың антропологик тибы, йөҙ һыҙаттары ҡыҙыҡһындыра торғайны һәм тере сағында ул был туралағы мәҡәләһен беҙҙең гәзиткә тәҡдим иткәйне. Гәзитебеҙҙә 2005 йылда баҫылған ошо мәҡәләне гәзит уҡыусыларға яңынан уҡып сығырға кәңәш итәбеҙ.**

"Башҡорт халҡының ғәҙәттән тыш ижади, интеллектуаль һәм ойоштороу һәләттәренә эйә легендар улы Салауат Юлаев образы XIX быуаттан алып беҙҙең көндәргә тиклем Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың яҙыусылары, хронистары, музыканттары, композиторҙары, рәссамдары, скульпторҙары һәм башҡа ижади интеллигенция вәкилдәренең иғтибарын биләне һәм биләүен дауам итә.

Рәссамдарға килгәндә, А. П. Лежнев, А. Д. Гончаров, П. М. Марков, М. Н. Арыҫланов, Ғ. Ш. Имашева, Г. С. Мостафин һәм башҡаларҙың танылған картиналарында һәм полотноларында милли геройыбыҙҙың образы төрлө композицияла бирелә. Ул һүрәттәрҙә Салауат Юлаев бер төрлө түгел, һәр береһендә батыр һыны үҙенсәлеклегә һәм эске энергияһының сағылышы менән айырылып тора. Совет скульпторы И. Г. Фрих-Харҙың 1925 йылда уҡ яһаған тәүге скульптура портреты - Салауаттың ағас бюсы бөгөнгө көндә Өфөлә М. В. Нестеров исемендәге Башҡортостан дәүләт художество музейында һаҡлана. Т. П. Нечаева 1946 йылда Салауат Юлаевтың скульптура портретын яһай, ул бронзанан ҡойолоп, 1952 йылда - Өфөлә, 1955 йылда Салауат ҡалаһында һәм Салауаттың тыуған яғы Малаяҙҙа ҡуйыла. 1989 йылда Салауат Юлаевтың бюсы герой һуңғы 25 йыл ғүмерен үткәргән Палдиски ҡалаһында ҡуйыла.

Салауат Юлаевтың С. Д. Тавасиев эшләгән һәм 1967 йылда Ағиҙелдең уң яҡ ярына ҡуйылған атҡа атланған скульптураһы иң мөһим һәм иң ҙур ижад емеше булып тора. Был ат скульптураһы Рәсәйҙә иң ҙурҙарҙан һанала. Постамент менән бергә уның дөйөм бейеклеге 20 метрға яҡын, ә ауырлығы - 40 тонна. С. Д. Тавасиев Салауат образын көс һәм энергияһы ташып торған, азатлыҡ һөйөүсе ярһыу яугир һәм батыр итеп һүрәтләй алған. С. Тавасиев батырыбыҙҙы туран тибындағы башҡорттар араһында киң таралған һыҙаттар менән һынландырған. Был тип, билдәле булыуынса, көньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһында йышыраҡ осрай. Сығышы менән Төньяҡ Осетиянан булған С. Д. Тавасиев нисек башҡорттарҙың төньяҡ-көнсығыш төркөмгә хас антропологик һыҙаттарын шулай күләмле һәм аныҡ итеп Салауат Юлаев ҡиәфәтенә күсерә алған һуң? Ғөмүмән, өс скульпторҙың, йәғни И. Г. Фрих-Хар, Т. П. Нечаева һәм С. Д. Тавасиевтың бер антропологик типҡа ҡараған герой образын нисек тыуҙырыуы шулай уҡ сер булып ҡала. Ихтимал, улар Салауаттың тыуған яғына барып, уның яҡташтары менән осрашҡандыр.

Ысынында иһә, ниндәй булған һуң беҙҙең батыр Салауатыбыҙ? Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әлегә беҙ был турала бер нәмә лә белә алмайбыҙ, сөнки М. М. Герасимовтың ысулын файҙаланып, баш һөйәктәренә ҡарап, йөҙөн тоҫмаллар инен дә, әммә беҙҙең ҡулда һөлдәһе юҡ (ә шулай ҙа беҙ, бер аҙ тырышлыҡ һалғанда, батырыбыҙҙың һөлдәһен таба алыр инек һымаҡ. Салауатыбыҙ тарихын өйрәнеүсе ғалимә И. Гвоздикова әйтеүенсә, Эстониянан беҙҙең бер диңгеҙ офицеры Рогервикта мосолманса ерләнгән ике кешенең һөлдәһе табылыуы тураһында 90-сы йылдар башында уға хәбәр иткән. Ләкин ул саҡта Балтик буйы илдәрендә СССР-ҙан айырылып сығыу менән бәйле сәйәси ваҡиғалар ҡуйырған ваҡыт була, шунлыҡтан был хәбәр иғтибарһыҙ ҡала). Емельян Пугачевтың образын тере сағында XVIII быуатта төшөрөлгән бер нисә картинаға ҡарап, күҙ алдына килтерә алабыҙ. Өфө провинция канцелярияһында каторжниктарҙы Балтик буйына, Рогервик портына, оҙатыр алдынан төҙөлгән "Именной опись"та Салауат тураһында бер нисә генә юл яҙылған булған: "Буйы ике аршин да дүрт аҙ ярым, сәсе ҡара, күҙҙәре ҡара. Һул яҡ яңағында яра эҙе, сыбыртҡы менән туҡмалған, танау тишектәре өҙөлөнгән, маңлайында һәм яңаҡтарында указ тамғалары һалынған". Уның тышҡы йөҙө бына шулай ғына һүрәтләнә.



С. Тавасиев үҙ Салауаты эргәһендә.



Я. Протазановтың Салауаты - А. Мөбәрәков йөҙөндә.

Уҙған быуатта төрлө антропологтар, шул иҫәптән ошо юлдар авторы тарафынан төньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһында үткәрелгән антропологик тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләрен файҙаланып, Салауат Юлаевтың тышҡы йөҙөн яҡынса күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ. Салауат Юлаевтың һәм уның ата-әсәһенең тыуған һәм йәшәгән урыны хәҙер бер кемдә лә шик тыуҙырмай. Салауат 1754 йылда Өфө провинцияһы Себер юлы Шайтан-Көҙәй улысының Тәкәй ауылында тыуған. Хәҙерге ваҡытта был Башҡортостандың Салауат районы территорияһы. Уның атаһы Юлай Аҙналин ошо Шайтан-Көҙәй улысының старшинаһы һәм үҙ ырыуының данлыҡлы бейе, рус армияһы составында хәрби походтарҙа, шул иҫәптән 1772 йылда поляк конфедераттарын баҫтырыуҙа ҡатнашыусы булараҡ билдәле булған.

Тәүге тапҡыр был төбәк башҡорттары танылған рус ғалимы, этнограф һәм антрополог С. И. Руденко тарафынан 1907, 1912-1913 йылдарҙа уларҙың физик йәки антропологик тибын һүрәтләү яғынан ентекле

***✓ Салауат Юлаевтың Тәкәй ауылында тыуыуын иҫәпкә алһаҡ, төньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһында туран ғына түгел, ә һомғол европеоид Каспий аръяғы расаһы тибындағы вәкилдәр ҙә булыуы һис тә ғәжәп түгел.***

тикшерелә. Тикшереү барышында буй, бит, баш ҙурлығы, тән, сәс, күҙҙәр төҫөнөң төп параметрҙары билдәләнә. Ярҙамсылары Б. Г. Крыжановский һәм С. М. Петров менән бергә С. И. Руденко 1847 аҫаба башҡортто тикшергән, шуларҙың 1512-һенең йөҙ һыҙаттарын С.И. Руденко үҙе шәхсән үлсәгән. Төньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһынан 249 ир кеше тикшерелә. Иң ҡыҙығы шунда: Салауаттың тыуған яғы Шайтан-Көҙәй улысының Иҙрис һәм Йонос ауылдарында 22 кеше үлсәнә. Ә уның тыуған ауылы Тәкәй, билдәле булыуынса, бөтөнләй юҡ ителә. Шайтан-Көҙәй һәм күрше Урман-Көҙәй улыстарында бөтәһе 64 ир кеше тикшерелә. Һөҙөмтәлә, Шайтан-Көҙәй улысында өйрәнелгән башҡорттарҙың йөҙ үлсәмдәренән сығып, Салауат Юлаевтың яҡынса тышҡы ҡиәфәтен ижад иткәндәр ҙә инде. XIX быуаттың танылған башҡорт мәғрифәтсеһе Мифтахетдин Аҡмулланың график һәм скульптура портретын төҙөгәндә лә ошо ысул ҡулланылған.

С. И. Руденконың профессиональ һәм бик юғары кимәлдә төшөргән фотографиялары ла Салауат Юлаевтың образын яҡынса күҙ алдына килтерергә булышлыҡ иткән. Башҡорттарҙың физик тибына арналған тәүге монографияһында С. И. Руденко төрлө ырыу башҡорттарының 200 фотографияһынан 34-ен баҫтыра. Фотографияларҙың күбеһе, хәҙерге Салауат районы халҡын да индереп, төньяҡ-көнсығыш башҡорттарының антропологик тибын сағылдыра. Фотографиялар буйынса фекер йөрөткәндә, төньяҡ-көнсығыш башҡорттары өс антропологик типҡа ҡарай: туран (Көньяҡ Себер), Каспий аръяғы һәм урындағы Урал типтары. Был райондарҙа иң таралғаны, моғайын, туран тибылыр, ул ҡаҙаҡтар, ҡарағалпаҡтар, Алтай-Саян таулығы халыҡтары араһында йыш осрай.

С. И. Руденконың мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Әй-Йүрүҙән бассейны башҡорттарына тән, сәс, күҙҙәр пигментацияһының интенсив, уртасанан тәпәшерәк буйлы, түңәрәк башлы булыу хас. Был төбәк башҡорттары башлыса ялпаҡ битле, оҙонса йөҙлө, киң танаулы, өҫкө ҡабаҡтары һалыныбыраҡ торған ҙур күҙле. Тәндәре артыҡ йөнтәҫ түгел. Уртаса буйлыларҙың мыҡты кәүҙәле, сағыштырмаса ҡыҫҡа аяҡлы булыуҙары бигерәк тә күҙгә ташлана. Бөтә был билдәләр буйынса әйлеләр менән көҙәйҙәр үҙ-ара оҡшаш. Был С. И. Руденкоға уларҙы антропологик яҡтан бер дөйөм районға индерергә ярҙам иткән.

1963-1965, 1967 йылдарҙа башҡорттарҙың антропологик тибын өйрәнеү менән М. В. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетының Антропология институты хеҙмәткәре М. С. Акимова шөғөлләнгән. Ул, төньяҡ-көнсығыш башҡорттарын да индереп, дүрт этнографик төркөмдән 1250 башҡорт ир-егетен тикшергән. Әйлеләр, табындар һәм ҡатайҙарҙы ул Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында түгел, ә Силәбе өлкәһе территорияһында өйрәнгән. М. С. Акимова башҡорттар араһында дүрт антропологик типты айырып күрһәткән: урал, асыҡ төҫтәге европеоид, туран, понтий типтары. Иң таралғаны урал һәм туран антропологик типтары. Туран тибы бөтә башҡорттар араһында ла бар, шулай ҙа йышыраҡ төньяҡ-көнсығыш төркөмөндә осрай. Әйтергә кәрәк, уның фекеренсә, башҡорттар араһындағы туран тибы ҡаҙаҡтарҙағынан күҙгә бәрелеп торған европеоид ҡушылмаһы менән айырылып тора, уның сығанаҡтары беҙҙең эра сигендәге көньяҡ сығышлы ҡуңыр пигментациялы (понтий) савромат, сарматтар тибының боронғо ҡатламдарына барып тоташа.

Шулай итеп, М. С. Акимованың тикшеренеүҙәре, дөйөм алғанда, С. И. Руденконың башҡорттарҙың антропологик составының ҡатмарлы булыуы тураһындағы һығымталарын раҫлай.

1977-1989 йылдарҙа беҙ үткәргән краниологик тикшеренеүҙәр ҙә 14 краниологик өҙөмтәнән төньяҡ-көнсығыш (айырым алғанда, Ахундан) башҡорттарының баш һөйәктәре серияһына европеоид һыҙаттары хас булыуын күрһәтте. Был билдәләр буйынса улар Алтай-Саян таулығы халыҡтарына һәм ҡаҙаҡтарға, ҡарағалпаҡтарға яҡынлаша.

Быға өҫтәп шуны әйтергә мөмкин: этнография, визуаль антропология мәғлүмәттәре башҡорттар составында сығанаҡтары беҙҙең эраның I-II мең йыллығы сигенә барып тоташҡан оғуз компоненты барлығы хаҡында ышаныслы итеп әйтергә мөмкинлек бирә, ул саҡта башҡорттар менән хәҙерге төркмәндәрҙең, ҡарағалпаҡтарҙың ата-бабалары булған оғуздар үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә йәшәгән.

Башҡорттарҙың ырыу-ҡәбиләләре составында, билдәле булыуынса, "төркмән" ырыу төркөмдәре осраштырғылай. Һарт-әйлеләр араһында, мәҫәлән, Р. Кузеев "тәкәй" ырыуы төркөмөн асыҡлаған. Етмәһә, төркмәндәрҙең "тәкә" ҡәбиләһе менән башҡорттарҙың "тәкәй" ырыуы тамғалары тура килә, улар араһындағы оҡшашлыҡтар фольклор материалдарында ла осрай. Мәҫәлән, "Ҡуңыр буға" риүәйәтендә башҡорт ҡыҙы менән Каспий диңгеҙе ярҙарынан килгән оғуз егете араһындағы мөхәббәт һәм никах тураһында бәйән ителә. Ындай бәйләнештәр хаҡында антропологик мәғлүмәттәр ҙә һөйләй. Төркмәндәр араһында киң таралған Каспий аръяғы раса тибы йыш ҡына көньяҡ-көнсығыш һәм Урал аръяғы башҡорттары араһында ла осрай. Шулай уҡ улар төньяҡ-көнсығыш башҡорттары составында ла бар.

Салауат Юлаевтың Тәкәй ауылында тыуып үҫеүен, күрше Урман-Көҙәй улысында ла Тәкәй һәм Төркмән исемле ауылдар булыуын иҫәпкә алһаҡ, төньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһында туран ғына түгел, ә һомғол европеоид Каспий аръяғы расаһы тибындағы (понтий тибы варианты) вәкилдәр ҙә булыуы һис тә ғәжәп түгел. Ихтимал, был раса тибындағыларҙы, шулай уҡ ҡасандыр оғуз-төркмәндәр менән никахҡа инеп туғанлашҡан башҡорттарҙы, халыҡ, уларҙың төркмәндәрҙең "тәкә" ҡәбиләһе вәкилдәре менән ҡәрҙәшлектәрен һыҙыҡ өҫтөнә алып, "иштәктәр" тип атағандыр. Салауат Юлаевтың тыуған ауылының исеме - Шайтан-Көҙәй улысындағы Тәкәй, шулай уҡ 1907, 1912-1913 йылдарҙа Урман-Көҙәй улысында булған Тәкәй һәм Төркмән ауылдары ла ошо фекергә этәрә.

Үрҙә әйтелгәндәрҙе иҫәпкә алып, Салауат Юлаев тышҡы ҡиәфәте менән туран йәки понтий антропологик тибындағы йәки уларҙың ҡушылған вариантын кәүҙәләндереүсе булыуы ихтимал, тип күҙалларға мөмкин. Авторҙарҙың (И. Г. Фрих-Хар, Т. П. Нечаева, С. Д. Тавасиев) художество фантазияһына ҡарамаҫтан, Салауат Юлаевтың хәҙерге скульптура һындары антропологик реалийҙарға тап килә һәм башҡорт халҡының төньяҡ-көнсығыш этнографик төркөмө араһында киң таралған бер туран раса тибының төрлө варианттарын кәүҙәләндерә. Һәр хәлдә, киләсәк тикшеренеүҙәрҙә, скульптура һәм рәссам әҫәрҙәрендә төньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһында таралған боронғо Каспий аръяғы расаһы (понтий) тибын күҙ алдында тоторға кәрәк булыр".



Т. Нечаеваның Салауаты.



Мостай Кәрим әҫәрендәге Салауат - Рәсүл Ҡарабулатов йөҙөндә.

## БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Башҡорттарҙың этногенезы мәсьәләләре

Этногенезды билдәләгәндә лингвистик мәғлүмәттәр ҙур роль уйнай. Башҡорттарҙың теле төрки телдәр төркөмөнә ҡарай, ә төрки телдәр, яҙма мәғлүмәттәр буйынса, беҙҙең эраның яҡынса V - VI быуаттарға ҡарай. Әммә төрки телдәре был ваҡытҡа тиклем оҙайлы тарихҡа эйә була һәм атап үтелгән яҙмалар буйынса, оҙайлы үҫеш һөҙөмтәһе булып тора.

Шуға күрә хәҙерге башҡорт телен бик боронғо һәм унда, башҡа көнбайыш төрки телдәрендәге кеүек үк, боронғоларҙы алыштырған яңы элементтар өҫтөнлөк итә. Унда өндәр яңғырауыраҡ; һүҙ уртаһында һуҙынҡылар араһында һәм һүҙ аҙағында ҙур үҙгәрештәр барлыҡҡа килә. Көнбайыш төрки телдәре, шул иҫәптән башҡорт теле лә төрлө йоғонтоларға дусар булһа ла, үҙҙәренең характер үҙенсәлектәрен һаҡлап алып ҡала. Башҡорттар менән тығыҙ бәйләнештә йәшәгән төрки телендә һөйләшеүсе халыҡтарҙың (һундар, монгол-татарҙар, ҡаҙаҡтар) күсенеүе көнсығыш төрки телдәре элементтары файҙаһына булырға тейешле боролошто һәм йоғонтоно яһай алмай. Тимәк, был ваҡытҡа башҡорт теле үҙ аллы нығынып бөткән була. Шулай итеп, башҡорт теленең формалашыуын, башҡорттарҙың ҡәбилә булараҡ берләшеүен беҙҙең эраның I мең йыллығы башы тип билдәләргә була.

Башҡорттарҙың теле тураһындағы тәүге тарихи мәғлүмәттәрҙе XI быуат лингвисы Мәхмүд әл-Ҡашғари ҡалдыра. Ул башҡорт телен уғыҙҙар һәм ҡыпсаҡтар теленә яҡын тип иҫәпләй һәм был уны хәҙерге лингвистарҙың башҡорт телен ҡыпсаҡ төркөмөнә индереүенә ҡаршы килмәй. Әммә башҡорт теле, уның һөйләштәре, диалекттары тейешле кимәлдә ентекле өйрәнелмәгән әле. Башҡорт теленең диалектологик үҙенсәлектәрен өйрәнеү буйынса миңә Т. Г. Байышевтың берҙән-бер хеҙмәте билдәле. Уның һөҙөмтәләрен артабан тәҡдим итермен. Хеҙмәтендә автор диалекттарҙың фонетик һәм морфологик, өлөшләтә генә лексик айырмалыҡтарын яҙыу менән сикләнгән, синтаксис айырмалыҡтарына ҡағылмаған.

Башҡорт теленең башҡа төрки телдәренән унда күпселек төрки телдәрендә ҡулланылған с урынына һүҙ башында һәм агглютинацияға бирелеүсе ялғауҙарҙа (аффикстар) һ өнө ҡулланылыуын билдәләп, Т. Г. Байышев башҡорт телендә ете фонетик һәм өс морфологик айырмалыҡ бар, тигән һығымтаға килә. Шул уҡ ваҡытта ул теге йәки башҡа айырмалыҡтарҙың территориаль таралыу сигенең тура килмәүен, бер морфологик айырмалыҡтың бер нисә фонетик айырмалыҡты үҙ эсенә алыуын, шул уҡ ваҡытта башҡа морфологик айырмалыҡтар территорияһына инеп китеүенә иғтибар итә.

Т. Г. Байышев айырып күрһәткән *һ* - *ҫ* фонетик һөйләше һүҙ башында һәм аффикстар башында һәр ваҡыт *һ* өнө ҡулланылыуын билдәләй. *Һ* һәм *Ҫ* өндәре тамыр уртаһында һәм һуңында, шулай уҡ аффикстар аҙағында төрлөсә ҡулланыла. Был һөйләштә төньяҡ-көнсығыш ҡатайҙар, һарт-ҡалмаҡтар, әйлеләр, ҡара-барын-табындар, һыҙғылар, ҡыуаҡандар, табындар, көҙәйҙәр, көнсығышта мендәр, юрматылар, бөрйәндәр, тамьян-табындар, үҫәргәндәр һөйләшә.

✓ *Аллаһ юлындағылар өсөн дан, шөһрәт, тигән төшөнсә юҡ. Яуға киткәндә лә Аллаһ исемен зекер иткән Салауаттың ҡорал һалмауын уның йәшлегенә, ғорурлығына, батыр данына тап төшөргәнө килмәүгә генә ҡайтарыу дөрөҫ түгел.*



# САЛАУАТ - БӘЙҒӘМБӘРГӘ ДОҒА УЛ,

## йәғни Батырыбыҙ тураһында уйланыу

**Салауат һүҙе - Мөхәммәт бәйғәмбәргә (с.ғ.с.) доға, тигәнде аңлата. Кем тәү башлап уны исем итеп үҙ балаһына ҡушҡандыр - билдәһеҙ. Бәлки, башҡорт старшинаһы Юлай Аҙналиндыр? Һәр хәлдә, әлеге көндә был исем башҡа бер халыкта ла осрамай. Салауат - бөгөн халҡыбыҙҙың иң яратҡан исемдәренең береһе.**

Һәр бер халыҡтың уның рухын күтәрә торған, уның холҡон, булмышын сағылдырған, уны батырлыҡҡа, яҡшылыҡҡа әйҙәгән милли геройы була. Ҡайһылыр халыҡта ул хатта әкиәт геройы ла булыуы мөмкин (әкиәт, легенда нигеҙендә ысынбарлыҡ ятыуын онотмайыҡ). Беҙҙең халыҡтың геройҙары күп, ә иң ололары, быуаттар артылышында балҡып торғандары икәү - Урал батыр һәм Салауат батыр. Ни өсөн башҡорт халҡының милли геройы тап Салауат Юлаев һуң? Ни өсөн уны шул тиклем күтәрәләр, быға ул лайыҡмы икән, тигән һорау ҡуйыусылар ҙа булыр. Ысынлап та, бөгөн республикала йәмәғәтселек һәм хөкүмәт кимәлендә Салауат исемен мәңгеләштереү буйынса күп эштәр башҡарыла. Батырҙың тыуыуына 250 йыл тулыуға ҡарата быға тиклем Башҡортостанда бер шәхестең дә өлөшөнә төшмәгән онотолғоһоҙ оло тамаша ойошторолдо. Йыл һайын үткәрелә килгән Салауат көндәре, Эстония менән дуҫлыҡ күпере, Өфөләге Салауат проспекты, Салауат тураһындағы тарихи, публицистик һәм художестволы әҫәрҙәр... Тарихсылар, крайҙы өйрәнеүселәр ҙә эҙләнеүҙәрҙе туҡтатмай, һаман да тикшерә, өйрәнә, шуның һөҙөмтәһендә батыр тураһында яңынан-яңы мәғлүмәттәр табыла.... Йылдар, быуаттар үткән һайын Салауат исеме, Салауат образы күтәрелгәндән-күтәрелә һәм ул тағы ла балҡыбыраҡ киткәндәй.

Рәсәй батшалығы уны халыҡ хәтеренән бөтөнләй юйып ташларға ынтылған ынтылыуға. Әбей батша әмере менән уның исемен сабыйҙарға ҡушыу үлем янауы менән тыйылған. Батырҙың исемен эҙәрлекләү быуат ярымдан ашыу дауам иткән. Бөйөк Ватан һуғышынан һуң ғына башҡорттар үҙ балаларына батыр исемен ҡуша башлай. Һәм ул һәр ауылда мотлаҡ осраған Мөхәммәт, Нурмөхәммәт, Әхмәт, Самат кеүек мәртәбәле исемдәр менән бер көндә йәнә таралып китә. Әгәр ҙә Злобин һәм Протазановтар булмаһа, Салауат исеме архивтарҙа ғына ҡалыр, ул исемде йөрөтөүселәр ҙә булмаҫ ине, тиеүселәр ҙә табылыр. Эйе, С. Злобиндың "Салауат Юлаев" романы, артабан кинорежиссер Я. Протазановтың шул исемдәге фильмы һуғыш йылдарында совет һалдаттарын батырлыҡҡа рухландырҙы, Тыуған еребеҙҙе, Ватанды Салауаттай яратырға һәм һаҡларға әйҙәне... Салауат исеме ошо әҫәрҙәрҙән башҡа онотолор инеме икән? Юҡ, әлбиттә. Урал батырын, уның тураһындағы бөйөк эпосты нисәмә меңдәрсә йыл йөрөгәндә, хәтерендә һаҡлай алған халыҡ быуат ярым - ике быуат эсендә үҙенең Салауатын нисек онотһон? Был мөмкин түгел! Салауат унын йөрәгендә, ҡанында, рухында!

Ә шулай ҙа, ни өсөн тап Салауатты халыҡ үҙенең милли геройы итеп күтәргән? Башҡорт халҡының батырҙары ла, сәсәндәре лә аҙ булмаған. Танылған тарихсы һәм журналист Салауат Хәмиҙуллин үҙенең "Тарихи мөхит" телевизион фильмының Салауат Юлаев тураһындағы серияһында (2013 йыл, 9 декабрь) ошо уҡ һорауҙы ҡуя. Салауат Юлаев Пугачев яуында бөтөн башҡорт ғәскәрҙәренә етәкселек итмәгән, ул тиҫтәләгән ҡаһарман командирҙарҙың береһе генә. Ләкин тик Салауат ҡына халыҡ батырына әүерелә. Фильмда беҙ был һорауға ышандырырлыҡ яуап алабыҙ.

Салауаттың даны батыр һәм сәсән булараҡ ҡына түгел, үҙенең йәшенә хас булмағанса гәжәйеп аҡылы, Ҡөрьәнде яҡшы белеүе, уҡымышлы, ҙур ғилем эйәһе булыуы менән дә һуғыш яуына тиклем үк бөтөн башҡорт иленә таралған була. 19-сы быуат яҙыусыһы Ф. Нефедов (1838-1902) Салауат тураһында былай тип яҙа: "Ул - ғалим һәм шағир. Ул Ҡөрьән һәм шәриғәтте белә, үсмер егет алдында аҡһаҡалдар ихтирам менән баш эйә, унын ғилемлегенә муллалар ғына түгел, ахундар хайран ҡала..."

Тарихсы Салауат Таймасов Салауат Юлаевты суфый, тип атай. Уның дини етәксе булыуы ла ихтимал, ти. Салауаттың тариҡәт юлында булыуын шиғырҙары уҡ һөйләй, ти ғалим.

Әммә Салауат Юлаевтын әлеге көнгә килеп еткән 15-ләгән шиғырының өсөһөндә генә Аллаһы Тәғәлә иҫкә алына.

*...Сәскәләр менән һандуғас*
*Тәңрегә тәсбих әйтәләр.*
*("Уралым").*

*...Аҡландағы йылға ситендә*
*Ултырып тәсбих әйтеп Аллаға*
*Изге яуға тағы барам мин.*
*("Яу").*

*...Уралҡайым, һайрар ҡошҡайҙарың*
*Тыңлаһам да, телен белмәйем.*
*Тәсбих әйтә микән үлгәндәргә,*
*Тип эсемдән генә уйлайым.*
*("Ағиҙелкәй аға...")*

Ошо ғына юлдар аша ла беҙ Салауаттың ябай шағир түгеллеген күрәбеҙ. Ә инде тәү сығанаҡтарға күҙ һалһаҡ... Билдәле булыуынса, Салауаттың тәүге ете шиғыры беҙгә 19-сы быуатта крайҙы өйрәнеүсе Руф Игнатьев (1818-1886) һәм Филипп Нефедовтың (сәсмә хәлдә) рус матбуғатында баҫылған мәҡәләләре аша килеп етә. Р. Игнатьевтың "Башкир Салават Юлаев, Пугачевский бригадир, певец и импровизатор" тигән әҫәрендә ете шиғыр ҙа тулыһынса бирелгән. Уларҙың бишеүһендә Аллаһы Тәғәлә бер нисә урында иҫкә алына. Мәҫәлән, "Уралым" шиғыры былай башланып китә:

*О! Урал мой благодатный,*
*Про тебя пою*
*Песнь ту мою -*
*И твое величье славлю.*
*На тебя глядя,*
*Сознаю величье Бога,*
*Божие дела!*

Артабан шул уҡ шиғырҙа:

*...Из всех птичек громче славит*
*Бога соловей.*
*Его голос чудный, сладкий,*
*Будто бы азан*
*На молитву кличет*
*Верных мусульман.*

"Һандуғас" һәм "Тирмәмдә" шиғырҙарында:

*Тихой ночью в перелеске*
*Соловей поет.*
*Бога ли славит эта песня,*
*Мира ли красоту...*

(Хәҙерге варианта "Аллаһ" һүҙе "күк" һүҙе менән алмаштырылған: "Күктеме, ерҙеме данлай? Кем белә уны").

*...Хор пернатых Бога славит*
*С утра до зари,*
*Соловей же чудо-птица*
*Днем поет и в ночь,*
*Значит больше всех Аллаха*
*Славит соловей.*

Күреүебеҙсә, шиғырҙарҙың бөгөнгө варианттарында был юлдарҙың күбеһе төшөрөп ҡалдырылған (Әлбиттә, был ҡомартҡыларҙы эҙләп табып, тәржемәләп, тәртипкә килтереп, баҫтырып сығарыуға күп көс түккән ихтирамлы ғалимдарыбыҙ, яҙыусыларыбыҙҙың бында ғәйебе юҡ. Сөнки, берәүгә лә сер түгел, дәһрилек заманы - советтар осоронда Аллаһты маҡтаған был юлдар текстан алып ташланмаһа, шиғырҙарҙы матбуғатта баҫтырыу, китаптарға индереү мөмкин булмаҫ ине.) Ә бит уйлап ҡараһаң, бөтә мәғәнә лә шул юлдарға ҡайтып ҡала кеүек. Мәҫәлән, "Һандуғас" шиғырында: "Башҡа ҡоштар иртәнән кискә тиклем Аллаһты данлай, ә һандуғас көнөн дә, төнөн дә һайрай, тимәк, ул Аллаһты бөтәһенә ҡарағанда ла нығыраҡ маҡтай..." - тиелә. Тап ошо юлдар Салауатты икенсе яҡтан аса. Сөнки төндәрен тороп, Аллаһҡа тәсбих, зекер әйтеүсе Аллаһы Тәғәләне нығыраҡ маҡтай, нығыраҡ ярата түгелме? Һәм үҙе шундай хәлдә булмаған зат был хаҡта ошолай итеп яҙа аламы? Быуаттар буйы ер-һыуҙарыбыҙҙы талаған, халҡыбыҙҙы ҡол итеп, муйыныбыҙға көсләп тәрә тағырға тырышҡан, кешеләрҙе терелә́й утта яндырған, йөҙҙәрсә ауылдарҙы үртәгән, ата-бабаларыбыҙ менән баш етмәҫлек вәхшилектәр ҡылған яуыз батшалыҡҡа ҡаршы сыға Салауат. Эйе, Салауат батыр һуғышсы ғына түгел, ә үҙ артынан мендәрсә кешеләрҙе изге көрәшкә әйҙәй алырлыҡ көслө шәхес була. Ә был көс уға Аллаһы Тәғәләнән килә.

Пугачев яуы баҫтырылғас, Екатерина II исеменән генерал Потемкин Салауат Юлаевҡа шәхсән хат ебәрә. Бирелһән, ғәфү итәбеҙ, тәүбәнә кил, тиелә унда. Әммә Салауат тәүбәгә килеүҙән баш тарта. Бүтән старшиналар, командирҙарҙың барыһы ла халыҡтың һәм үҙҙәренең имenлеге хаҡына ҡоралдарын һала. Салауат баш һалмай. Ни өсөн? Ни өсөн балалары, яҡындары хаҡына булһа ла, батшабикәгә буйһонмай? "Сөнки Салауат - ғорур! Уның батыр тигән даны бар. Ә батырҙар бирелмәй, батырҙар дошманына (батша булһа ла) баш эймәй!" тип әйтәбеҙ. Ләкин шуныһы - Аллаһ юлындағылар өсөн дан, шөһрәт, тигән төшөнсә юҡ. Яуға киткәндә лә Аллаһ исемен зекер иткән Салауаттың ҡорал һалмауын уның йәшлегенә, ғорурлығына, батыр данына тап төшөргәнө килмәүгә генә ҡайтарыу дөрөҫ түгел. Ошо урында миңә ауылдашым әүлиә Уйылдан мәзиндең яҙмышы иҫкә төшә. 1936 йылда уны ҡулға алалар. Динеңдән баш тарт, ул сағында һине һәм ғаиләңде тыныслыкта ҡалдырабыҙ, тиҙәр. Береһенән-береһе бәләкәй алты балаһы, ҡатыны мөлдөрәп ҡарап торғанда ла, уларҙы ниндәй әсе яҙмыш көткәнен белһә лә, исем өсөн генә булһа ла (уның йөрәгенә берәү ҙә асып ҡарай алмай бит) баш тартмай ул диненән. Мин Аллаһ юлындамын, Аллаһ ризалығы өсөн йәшәйем, үлһәм дә, уға хыянат итәсәгем юҡ, ти ул тыныс ҡына. Бер нисә көндән әүлиәне аталар. Йыуаш ҡына кеше булған, тиҙәр уны, ә иманы ҡайһылай көслө булған! Иманын ул бер нәмәгә лә алмаштырмаған! Был донъянан Аллаһ юлында шәһит булып киткән Уйылдан мәзин. Салауат та шәһит булыуҙы артығыраҡ күргән. Аллаһ ризалығы өсөн ерен, динен, халҡы, иле азатлығын яҡлап көрәшкән бит ул. Һәм бының өсөн кемдеңдәр алдында тәүбә ҡылыу Аллаһы Тәғәләгә хыянат итеү булыр ине.

Дөрөҫөн әйткәндә, элек мин былар хаҡында уйланғаным юҡ ине. Уйланырға һәм ҡулға ҡәләм алырға былтырғы бер ҡыуаныслы ваҡиға сәбәпсе булды. Былтыр көҙ Башҡортостанға бөтә донъяға билдәле ҙур әүлиә шәйех Солтан Мәхмәт Әҙил килде. Ул изге әүлиәләр яткан урындарға зыярат ҡылды. Салауат районында батырыбыҙҙың музейында ла булды. Әүлиәнең Салауат батырыбыҙ тураһында һөйләгәндәре барыбыҙҙы ла тетрәндерҙе, күҙҙәребеҙҙе асты, хәҡиҡәткә яҡынайтты: "...Салауат - Аллаһы Тәғәләнең арыҫланы. Ул - Аллаһ юлында көрәшкән. Һәм әлеге мәлдә ул Аллаһы Тәғәлә янында юғары урында, ҙур дәрәжәлә. Шуға күрә, әгәр халҡығыҙ Аллаһҡа ғибәҙәттәр ҡылып, ҡиәмәт көнөнә тиклем иманын, мосолманлығын һаҡлап ҡала икән, Салауат та Аллаһтың рәхмәтендә булыр, дәрәжәһе үсер һәм Аллаһы Тәғәлә барыһына ла сауабын бирер. Аллаһтың яратҡан ҡолдарын яратығыҙ. Ул сағында һеҙ улар менән бергә булырһығыҙ. Иң элек беҙ Мөхәммәт бәйғәмбәребеҙҙе (с.ғ.с.) яратырға тейешбеҙ, шунан изге әүлиәләрҙе, сәхәбәләрҙе. Әгәр ҙә һеҙ Салауатты ғына ратһағыҙ ҙа, Аллаһы Тәғәлә хозурында яратҡан батырығыҙ менән йәнәш булырһығыҙ. Сөнки Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) хәҙисендә әйтелгәнсә, кеше ҡиәмәт көнөндә яратҡаны янында булыр. Аллаһы Тәғәләгә беҙ Салауат хөрмәтенә доға ҡылырға тейешбеҙ..." - тигәйне оло әүлиә. "Бәйғәмбәрлектән изге хәбәрҙәр кенә ҡалды," тигән Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с.). Изге хәбәрҙәрҙе беҙгә әүлиәләр еткерә. Әүлиәнең Салауат тураһындағы был изге хәбәре батырыбыҙҙы беҙ әле уйлап та ҡарамаған, белмәгән кимәлгә күтәрҙе, илаһи ҡөҙрәтен асты. Ни өсөн тап Салауатты халҡыбыҙ онотмай, сөнки Аллаһ шулай ҡуша, үҙенең яратҡан ҡолон онотторға бирмәй.

"Салауат" һүҙе - Мөхәммәт бәйғәмбәргә доға, тигәнде аңлата, Бәйғәмбәребеҙҙе (с.ғ.с) ололау доғаһы. Салауат әйтеү - ҙур сауап. Бер салауат өсөн Аллаһы Тәғәлә беҙгә сауапты ун тапҡыр арттырып бирә. Сөнки Мөхәммәт (с.ғ.с.) - Аллаһтың иң яратҡан ҡоло. "Әгәр миңә бер салауат әйтһәгеҙ, Аллаһ һеҙгә ун салауат әйтер", тигән Бәйғәмбәребеҙ. Мәҫәлән, иң ҡыҫҡа салауаттарҙың береһе: "Аллааһүммә салли гәләә Мүхәммәдин үә гәләә әәли Мүхәммәдин үәс сәлииим" (Раббым, Мөхәммәт гәләйһис-сәләмгә һәм уның ҡәүемено рәхмәтеңде бир). Уйлап ҡараһаң, әгәр Салауат исеме ошондай изге доғаларҙы үҙ эсенә ала икән, тимәк, был исемде әйтеү үҙе генә лә сауаплы. Һәм, Салауат исемдәре күп булып, шул исемде ҡат-ҡат әйтеп торған халыҡҡа күпме сауап, бәрәкәт яуа. Бына ни өсөн Екатерина II-не Салауаттың үҙе генә түгел, хатта исеме лә ҡурҡытҡан һәм был исемде ул ер йөҙөнән бөтөнләй юҡ итергә тырышҡан. Аллаһы Тәғәләнең рәхмәте төшөп торған, бәрәкәтле, иманлы, динле халыҡ батшаға кәрәкмәгән. Сөнки ундай халыҡты ҡол итеп булмай, ул бер Аллаһтың ғына ҡоло.

Салауат исемен ҡайны башҡорт тәү башлап үҙ балаһына ҡушҡандыр - билдәһеҙ. Бәлки, башҡорт старшинаһы Юлай Аҙналиндыр?..

**Әлфиә БАТТАЛОВА.**

***✓ Шағирлыҡ һәләте ле бик иртә асыла Салауатта. Тирә-йүндәге тәбиғәт, тыуған төйәк, башҡорт батырҙары тураһындағы хикәйәттәр уның шиғри күңеленә ныҡ тәьҫир итә. Ул үҙенең тойғоларын шиғри юлдарға һалырға ынтыла.***



# САЛАУАТТЫҢ ЙЫРЫ НИ ХАҠЫНДА?



**Салауаттың йырҙары үҙе мәрхүм булғандан һуң да ярты быуат тирәһе халыҡ теленән төшмәй. XIX быуатта Р. Игнатьев уларҙы русса яҙып ала. Беҙҙең көндәргә Салауаттың ана шул руссаға тәржемәләнгән текстары ғына килеп еткән. Уларҙы Рәшит Ниғмәти башҡорт теленә ауҙара. Салауат образын теләһә ниндәй формала күҙалларға, сәнғәт аша һынландырырға мөмкин, әммә иң дөрөҫ тасуир уның үҙ ижадында. Р. Игнатьев яҙып алған текст тик 1922 йылда ғына донъя күрә. Ул саҡта коммунистарҙың Салауатта ҡайғыһы булмай. Һуңыраҡ уларҙы өлөшләтә, тыуған ил, һөйгән йәр тураһындағыларын ғына баҫтыралар. Аллаға илтифат, милләт-ара мөнәсәбәттәр, тыныс тормош хаҡындағыларын күрһәтмәйҙәр. Салауаттың яһалма образын тыуҙырыуҙа былар ҡамасау итә, әлбиттә. Һәм йырҙарҙың ысын йөкмәткеһе юғала бара. Хәйер, үҙегеҙ сағыштырығыҙ һәм үҙегеҙ баһалағыҙ. Мин үҙем тәржемә иткән тулы текстарҙы һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәм.**

**Тамара ҒӘНИЕВА*.**

* * *

Эй, Уралым! Изге ерем!
Һинең хаҡта йырым.
Дан-тәкбирем. Ә күңелгә
Яғыла яҡты нурың.
Эй Уралым! Изге ерем!
Алла кеүек бөйөк.
Шундай бейек түбәләрең
Күктең үҙе кеүек.
Төн күгендә ай балҡыһа,
Нурын һибеп ергә,
Көмөшләнә үркәстәрең
Һәм үҙе нур һибә.
Көн күгенә ҡояш ҡалҡһа,
Нурҙар ағыла ергә, -
Алтынлана ҡаяларың,
Уттай яна түбә.
Эй, Уралым! Итәк тулы
Урман һәм тауҙарың.
Аҫыл балаҫ кеүек йәйрәй
Болон, баҫыуҙарың.
Сәскәләре шул балаҫтың
Йомарт иркә наҙға.
Таңды маҡтай ожмах ҡошо
Дан-йыр - Аллабыҙға.
Иң моңлоһо - былбыл йыры
Оҡшаш нәҡ аҙанға.
Иртә таңдан мосолманды
Саҡыра намаҙға.
Эй, Уралым! Изге төйәк!
Ғәзиз ил-ватаным.
Тел асҡысы бирә миңә
Һәр бер яҡты таңың.
Эй, Уралым! Һине данлап,
Һис арымаҫ телем.
Һиңә тигән йырҙарым да
Күп әле, күп минең.

* * *

Моңлана былбыл, моңлана
Төндөң һилендә.
Алланымы, донъянымы
Данлай көйөндә.
Ай, йондоҙҙар, болондарға
Һоҡлана микән?
Әллә ҡояш нурын данлап,
Рухлана микән?
Белмәйем,
Йәшә йылғаның
Ярын буйлатып.
Көтөү юшай. Атым бәйле.
Тирмәлә ятып
Сыҙаманым. Асығыҙсы
Ишек ҡорғанын.
Ишетһен моңон былбылдың
Һәммә туғаным.
Керпек ҡаҡманым. Тыңланым.
Моңланды былбыл.
Раббыбыҙҙың хозурына
Дан ине ул йыр.

* * *

Йәйә кирҙем, атҡан уғым
Тейҙе тик ҡарлуғасҡа,
Бахыр ҡошсоҡ томоролоп,
Сараһыҙ ауҙы аҫҡа.
Ауҙы ул аяҡ осома
Ҡарлуғас - байғошҡона.
Нишләп уҡ тоҫҡаным күккә?
Хәҙер шуға бошонам.
Ҡул күтәрҙем икән ниңә,
Һис кенә ғәйепһеҙгә?
Уғым тейһә нимә булған
Бер кафыр сөннәтһеҙгә.
Аяҡ баҫҡан Аллаһыҙға
Беҙҙең йорт-еребеҙгә.
Килер ине азат көндәр
Иркен йәйләүебеҙгә.

* * *

Булған ул ҡаһарман ирҙәр
Бик борон-борон заман.
Булған  Ғәли, Абуталип,
Саш булған һәм Нариман.
Уларҙы ил-ер таныған,
Белгән ниәт-уйҙарын.
Еңгән улар иң-иң көслө
Шул заман батырҙарын.
Улар күтәргән ҡылыстан
Кафыр баштары ауған.
Ҡурҡмағандар аждаһанан,
Хас дошман асҡан яуҙан.
Шайтан мәкер ҡора алмаған,
Өркмәгәндәр сихырҙан.
Батырҙарҙың батырлығы
Батырлыҡҡа саҡырған.
Бына шундай ҡаһармандар
Булған борон заманда.
Улар хаҡында риүәйәт
Дәрт уйнатты ҡанымда.
Эйәрләнем дә атымды,
Атылдым яуға ҡаршы.
Алышта мин ал бирмәнем,
Тураным дошман башын.
Бер саҡ мине ҡамаланы
Өс йөҙләп яуыз сиреү.
Ҡамауҙан сыҡтым далама,
Эйәр өҫтөндә, тере.
Йылғанан ятып һыу эстем,
Аят уҡыным шунан.
Яңынан яуға атылдым,
Ҡыйғыр ыласын һымаҡ.

* * *

Ҡарағош оса бик бейек,
Ыласын китә үтеп.
Ыласындан ҡыйғырыраҡ
Ҡоштар батшаһы - бөркөт.
Һин әле йәш, яу сапһаң да
Түгелһең әле бөркөт.
Һыйын Алла хозурына,
Ҡыйыу бул, яугир егет.
Батырлыҡ - Раббы ҡөҙрәте,
Ғәййәр ташлан алышҡа.
Кафырҙың башын ҡыйырға
Ҡөрьән-Кәрим дә ҡуша.
Бер Аллаға һығынамын
Ҡулға алһам ҡылысты.
Беләм мин ҡырғыҙ мәкерен,
Унан яман урыҫты.
Илебеҙҙе, динебеҙҙе
Яҡлап баш һалһам әгәр
Күктәр үҙе тәкбир әйтер,
Рухымды йәннәт биләр.
Ожмах баҡсаһында көтә
Мәңгелек рәхәт һине.
Хур ҡыҙҙары наҙлап һөйөр
Юҡ унда бәхет сиге.
Ҡыйыу бул һин, яугир егет,
Ҡөҙрәт ал Раббыбыҙҙан.
Батырлыҡ көтә ул беҙҙең
Бөгөнгө яуыбыҙҙан.

* * *

Зөләйха, һин хур ҡыҙылай,
Аңласы йөрәгемде.
Ялҡынланам күрҙениһәм
Күк төҫлө күҙҙәреңде.
Ҡарашыңда ай балҡышы,
Сағыла унда йондоҙ.
Күңелең тәрән. Ожмах үҙе
Көнләшер һинән, нур ҡыҙ.
Зөләйха, һине яратам,
Нисек әйтәйем шуны?
Томаланған аңым, сөнки
Һөйөүҙән күңелем тулы.
Аңлатыуы ҡыйын икән
Ихлас, саф яратыуҙы.
Тел осомда тик бер һүҙем:
Зөләйха, һин хур ҡыҙы!..

*Шағирәнең был тәржемәһе "Киске Өфө" гәзитендә 2004 йылда 24-се һанда донъя күргәйне.

ХӘТЕРКИТАП

## ҠАРТТАРҘЫҢ ЮРАУЫ...

### раҫҡа сыға

**Урыҫ яҙыусыһы Филипп Нефедов Башҡортостан буйлап сәйәхәттә йөрөгән саҡта башҡорт халҡына һоҡлана, уның тарихы менән ҡыҙыҡһына. Шунан ул башҡорт халҡы тураһында байтаҡ әҫәрҙәр яҙа. Архив материалдарына таянып, "Пугачев бунты алдынан башҡорт хәрәкәте. Салауат - башҡорт батыры" тигән очерк яҙа. Шул очерктан бер өҙөк:**

"Салауат - физик яҡтан ғына көслө булмай. Ул - ғалим һәм шағир. Ул Ҡөрьәнде һәм шәриғәтте яҡшы белә. Аҡһаҡалдар ҙа хатта уның был һәләтен таный. Уның даны тирә-яҡҡа тарала, уның ғилеменә муллалар ғына түгел, хатта ахундар ҙа һоҡлана.

"Уның аҡылы ла, ғилеме лә - Хоҙай Тәғәләнән, - тигән һығымтаға килә муллалар менән ахундар. - Салауат бөйөк кеше буласаҡ! - тип фараз итә улар.

"Уның йәшендә ул хәтлем аҡыл ҡайҙан килгән икән? - тип аптырай тирә-яҡ ауылдыҡылар. - Әллә Алла ҡөҙрәте менән ебәрелгән бәйғәмбәрме икән ул?" - тип тә уйлайҙар.

Шағирлыҡ һәләте ле бик иртә асыла Салауатта. Тирә-йүндәге тәбиғәт, тыуған төйәк, башҡорт батырҙары тураһындағы хикәйәттәр уның шиғри күңеленә ныҡ тәьҫир итә, уның күңелендә төрлө хис-тойғолар уята. Ул үҙенең тойғоларын шиғри юлдарға һалырға ынтыла. Салауат тыуған Уралына дан йырлай.

Йырсы-шағирҙы ҡайһы саҡта бөтөнләй икенсе уй-тойғолар ҙа биләп ала. Уның "Уҡ" тигән шиғырын уҡыһаң, батырҙың ярһыу йөрәгенең матурлыҡ хаҡында йырлау менән сикләнергә уйламағанын, ә юғары тойғолар менән типкәнлеген аңлайһың.

Ун ете йәшендә өйләнә шағир. Күп тә үтмәй, икенсе ҡатын алып ҡайта. Бер аҙҙан ике ҡатыны ла ир бала бүләк итә уға. Салауат ҡәнәғәт һәм бәхетле. Ул ҡатындарын да, балаларын да ярата. Был хаҡта ул шиғырҙар ижад итә.

Әммә ғаилә именлеге, тәбиғәт хозурлығы һәм шиғриәт кенә уның ярһыу булмышын тынысландыра алмай. Уға атаһы ҡулынан тартып алынған ерҙәр, халыҡтың бөлгөнлөккә төшә барыуы, ерһеҙ ҡалған башҡорттоң юҡҡа сығыу ихтималлығы тынғы бирмәй. Тыуған илемде мин ҡотҡарырға тейешмен, тип тибә шағирҙың тынғыһыҙ йөрәге.

Бер саҡ атаһы менән алыҫ юлға сығып киткән саҡта Салауат:

- Атай, мин Тәңрем тауышын ишеттем. Ваҡыт етте! Бынан ары һуҙырға ярамай, - ти.

- Юҡ, улым, ваҡыт етмәне әле. Башҡорт халҡы бик нык йонсоған. Ваҡыты етер. Аҙ ғына түҙәйек. Башҡорттар аҙыраҡ көс йыйһын, - ти Юлай.

- Минең түҙемем бөттө, атай. Халҡымдың аһ-зарын ишетеү ауыр миңә! Азатлыҡ өсөн көрәшкә күтәрелер өсөн улар көс табыр, атай. Мин Башҡортостанымды азатлыҡ өсөн яуға күтәрәм!

- Сабыр бул, улым, - ти күпте күргән, тәжрибәле Юлай һәм улының күҙҙәренә тура ҡарап, былай тип өҫтәй, - халыҡты алдан күтәрһәң, бәлә генә килтерерһең. Ул саҡта инде Башҡортостан ҡайтанан аяҡҡа баҫа алмаҫ. Һәр нәмәнең үҙ мәле бар. Мәле еткәс күтәрелһәң, илеңә дан килтерерһең...

Әңгәмә бик оҙаҡ дауам итә. Юлайҙың күпте кисергән тыныс, әммә ҡыйыу ҡарашлы йөҙөн һәм Салауаттың йәшендәй ялтлап торған күҙҙәрен байып барған ҡояштың һүрән генә нурҙары яҡтырта..."

✓ ***Һис тә туҡталырға оҡшамағайны уның һәм ҡатынының өҫтөнә ғәйбәт өйөү. Һуңғы көндәрҙә хатта малайҙың атаһының Кәрим икәнлегенә шикләнеп ҡараусылар күбәйеп китте. Имеш, Зөләйха тыума тапҡан.***




Ғәлләм ағаһына оҡшаған икән. Тик баш табиптың саллана башлаған сәстәрен, маңлайындағы һырҙарын күрмәмешкә һалышҡанда, бүлмәлә Ғәлләм ултыра ине. Ул Кәрим менән урынынан тороп күреште. Шунан кире барып креслоһына ултырғас:

- Ғәлләм һиңә был справка эш урынында процентһыҙ кредит алыр өсөн генә кәрәк тине. Шулаймы?

- Эйе, тап шулай...

- Башҡа кеше һораһа, иғтибар ҙа итмәҫ инем. Ҡустым үтенгәс, баш тарта алманым. Беҙ туғандар ғына түгел, дуҫтар ҙа...

- Беҙ ҙә уның менән дуҫтар. Ҡустығыҙ ныҡ ярҙамсыл. Кеше йәнле кеше. Ундайҙар донъяла һирәк...

- Йәш саҡта минең улым бөйөр өйәнәге менән йығылғас, донор кәрәк булды. Үҙемдең дә бөйөрҙәр насар. Шул саҡта мин унан үтенгәйнем. Оҙаҡ уйлап та тормайынса, бер бөйөрөн улыма бирҙе. Улым бөгөн Мәскәүҙә медицина университетында профессор...

- Һеҙ бер-берегеҙгә оҡшағанһығыҙ...

- Әле яныма инеп йомошон әйткәс, шундуҡ ҡаршы төштөм. Ә ул малайымды иҫемә төшөрҙө. Тап шул арҡала ғына справка бирергә риза булдым. Ә һиңә нимәгә ул шул тиклем аҡса?

- Машина алырға ине, Ғәлим...

- Аңлашылды. Тик был справканы тотоп Әсәлек капиталы юлларға барып ҡуйма. Шундуҡ эләктерәсәктәр. Әгәр ҙә берәр хәл була ҡалһа, һин мине, мин һине белмәйбеҙ. Был справканы һин үҙең компьютерҙа әтмәләп алдың. Булдымы?

- Булды. Аңланым. Рәхмәт...

- Ҡыҙығыҙҙың имен-аман тыуыуын теләйем...

Баш табип уның алдына мисәтле документ сығарып һалды ла, минән бурыс төштө, тигән ҡиәфәттә телефонға йәбеште.

Ғәлләм менән ҡала буйлап елдерҙеләр. Төҙөлөш тресының офисына барып йомошон аңлатҡайны, унан шундуҡ балаһы тыуыу тураһында справка, сабыйҙың "Тыуыу тураһында танытма"һын һоранылар. Бындай хәлдең килеп тыуырын көтмәгәйне Кәрим. Әммә уға сигенергә түгел хәҙер. Загс бүлегенә барып, танытма алырға тура килде Кәримгә. Ярай әле, хеҙмәттәше Ғәлләм уны дәртләндереп торҙо. Бик күпте белә булып сыҡты хеҙмәттәше. Баҡтиһәң, бөтөнләй тыумаған да, булмаған да балалары өсөн был фани донъяла пособие, Әсәлек капиталы алып ятыусылар ҙа бар икән. Ундай хәлдәр булғанмылыр-юҡмылыр, быларҙы Ғәлләм коллегаһының күңелендәге уңайһыҙланыу тойғоһон алып ташлар өсөн һөйләне булһа кәрәк.

Танытма әҙер булғас, тағы ла офисҡа елдереп барып еттеләр. Ҡалғаны, кем берәү әйтмешләй, "техника эше". Кәримгә предприятиеның Уставына ярашлы, бер йыллыҡ эш хаҡын процентһыҙ кредит итеп бирҙеләр. Ун минуттан шығырлап торған өс йөҙ мең һум аҡса Кәримдең ҡулына күскәйне инде. Ул усына аҡсаһын йомарлап тотҡан килеш автоүҙәккә шылтыратты. Үҙәк тәүлек әйләнәһенә эшләй икән.

Иҫке машинаһын Кәрим Ғәлләмдәрҙә ҡалдырып торҙо. Ауылға ялтырап торған ап-аҡ "Крузак" менән ҡайтты. Өйҙәгеләр өсөн был көтөлмәгән байрам булды. Ҙур еңеү ине Кәримгә был көн. Ҡатыны табын әҙерләп, тиҙ арала ауылдағы туғандарын йыйып алдылар. Әйҙә, улар ҙа шатланһын, тинеләр. Әлегә тик район түрәләре, завод етәкселәре, эре-эре эшҡыуарҙар атлатып йөрөгән машинаға ауыл балаһы Кәримдең эйә булыуы күптәр өсөн шатлыҡлы ла, моңһоу ҙа күренеш булды. Кемдер Кәримгә, уның ҡатынына, ҡыҙҙарына ҡушылып, ихластан шатланды, кемдеңдер эсе көтөрләне.

Ҡунаҡтар таралышҡас, Зөләйха иренең ниҙер әйтеүен көттө. Әгәр ҙә машина алып ҡайтһам, һиңә генә һөйләрмен, тигәнде һәр саҡ иҫендә тотҡас, түҙемһеҙләнеүен көскә тыйҙы. Ҡыҙҙары йоҡлап киткәс, Кәрим түш кеҫәһенән танытманы сығарып һалды. Зөләйха документты ҡулына алып, оҙаҡ ҡына текәләп торҙо. Тәүҙә унда яҙылғандарҙың айышына төшөнә алмайынса торҙо ла, барып еткәс, документты ипләп кенә кире урынына ҡуйҙы. Бер ни ҙә өндәшмәне. Тынлыҡты Кәрим емерҙе.

- Нимә, әсәһе, документта ҡыҙыбыҙҙың исеме дөрөҫ яҙылмағанмы әллә?

- Дөрөҫ тә. Тик, атаһы, әллә нисек бит әле. Иләнмәгән-һуғылмаған, ҡайным, һиңә бер ыштан, тигән һымаҡ килеп сыҡмаймы? Ҡыҙыбыҙ тыумаған бит әле...

- Бишәүҙе тапҡасың, алтынсыһын да табырһың инде. Бик тырыш булып сыҡты Заринабыҙ. Тап ошо документ ярҙамында беҙҙең эштән процентһыҙ кредит бирҙеләр. Йыллыҡ эш хаҡы иҫәбенә. Машинаға аҡсаны шуның менән тултырҙыҡ...

- Шулай ҙа...

Был хәл-ваҡиғаға халыҡтың меңәр йылдар буйына аҡыл-тәжрибәһенән сығып ниндәй баһа бирергә мөмкин булыр ине икән? Хәйләһеҙ донъя файҙаһыҙмы? Бәлки, ысул маҡсатты аҡлайҙыр? Ә бит ҡыл да ҡыбырлатмайынса ла, арҡыры ятҡан таяҡты буйға һалмайынса ла, миллион-миллион долларҙарға эйә булыусылар менән сағыштырғанда Кәримдең был алдағы бөтөнләй күҙгә лә эленмәй кеүек. Был ваҡиғаның аҙағы ла яҡшы бөтөр ине. Әгәр ҙә Кәрим машина алып ҡайтҡандан һуң ай ярым үтеүгә Зөләйхаһы йоморо ҡара малай тапмаһа...

* * *

"Ювелир оҫталары" затында малай тыуыуы ғәҙәттән тыш хәл булып ҡабул ителде. Сәскәләр араһында үҫкән берҙән-бер дегәнәккә ҡарата ниндәй мөнәсәбәт булһа, бында ла, хәҙер инде Кәримдең үҙ исеменә оҡшатып ҡушылған Карам атлы йоморо ҡара малай ауылда һәм тирә-яҡ ауылдарҙа төп "сәйнәү объекты"на әүерелде. Бының әтнәкәһе ябай ғына: сәскәләр нисек кенә күҙҙең яуын алырлыҡ булмаһын, кеше улар араһындағы берҙән-бер булып айырылып ултырған дегәнәккә иғтибар итә. Иген баҫыуында ла иген түгел, башаҡтар араһында яңғыҙ һерәйеп ултырған көнбағыш күҙгә ташлана.

Шуға ла: "Һөйләрҙәр һөйләрҙәр ҙә, арығас, бер туҡтарҙар әле. Кем хаҡында ғына нимәләр генә һөйләнелмәй", - тип тәүҙә Кәрим барыһына ла ҡул һелтәп ҡарағайны. Тик һис тә туҡталырға оҡшамағайны уның һәм ҡатынының өҫтөнә ғәйбәт өйөү. Һуңғы көндәрҙә хатта малайҙың атаһының Кәрим икәнлегенә шикләнеп ҡараусылар күбәйеп китте. Имеш, Зөләйха тыума тапҡан. Имеш, малайҙың атаһы бөтөнләй башҡа кеше. Карамдың ысын атаһын сырамытыусылар ҙа бар икән хатта. Күбеһен Кәримдең ни рәүешле итеп башҡаларҙың төшөнә лә инмәгән ҡиммәтле машина һатып ала алыуы борсой икән. Имеш тә, улар балалар йортонан аҫрауға малай алып, Әсәлек капиталын ҡиммәтле машинаға тотонған. Был фаразды яҡлаусылар шыр ҡыҙҙар араһында йоморо ҡара малайҙың пәйҙә булыуын шул рәүешле аңлатып маташа.

Кәримде иһә, бөтөнләй башҡа мәсьәлә борсой ине. Ул да булһа, улы тыуыуға бәйле тик дүрт кеше, ағалы-ҡустылы Ғәлим һәм Ғәлләм Сынбулатовтар, ҡатыны менән үҙе генә белгән хәл. Барыһынан бигерәк ошо серҙең сиселеренән ҡурҡты Кәрим. Улы Карамға "Тыуыу тураһында таныҡлыҡ" алырға тип район үҙәгенә барғанда ул баш табиб Ғәлим Сынбулатовтың янына инеп тә сыҡты. Уны күргәс, баш табиб бүлмәһен тултырып хахылданы.

- Ҡотлайым, Кәрим әфәнде, эш тәжрибәмдә бындайын да хәлгә осрағаным юҡ ине әле. УЗИ тыуыр сабыйҙың енесен йыш ҡына яңылыш күрһәтә. Был - ғәҙәти хәл. Ә бына бер үк сабыйҙың бер ай эсендә ҡыҙ һәм малай булып тыуыуы медицина тарихында тәүге тапҡырҙыр...

- Уныһы шулай, Ғәлим ағай. Тик бына был хаҡта тик үҙегеҙ генә белһәгеҙ, бик яҡшы булыр ине, тием. Юғиһә, ауыл төрлө хәбәрҙәр менән тулды...

- Борсолма, Кәрим ҡустым. Беҙҙә һәр табиптың "үҙ зыяраты" ғына түгел, "йәшерен экциклопедияһы" ла бар. Ул серҙәр һандығында ниҙәр генә юҡ. Кешеләр беҙгә үҙенең тәнен генә түгел, йәнен дә, бер кемгә лә һөйләргә баҙнат итмәгән серҙәрен дә ышанып тапшыра. Беҙ ул зыяратты ла, энциклопедияны ла үҙебеҙ менән "теге донъяға" алып китәбеҙ. Донъяла бөтөнләй һөйләргә ярамаған серҙәр ҙә була...

Справка алырға килгәндә баш табиб үҙен бик ҡоро һәм рәсми тотһа, был юлы Кәрим менән йәйелеп китеп, иркенләп һөйләште. УЗИға бәйле бер көләмәс тә һөйләп алды. Имеш, бер ауырлы ҡатын УЗИға барып ҡайтҡас, ире:

- Әсәһе, малаймы, ҡыҙмы? - тип һораған.

- Ана, башҡа ҡатындарҙың ирҙәре УЗИға бергә баралар. Хатта тыуасаҡ балалары менән һөйләшәләр. Ә һин? Шәп булғасың, үҙең бар ҙа ҡара. Әйтмәйем, анһат һиңә, - тип яуаплаған ҡатыны иренә үпкәһен белдергән ҡиәфәттә.

Ай самаһы ваҡыттан һуң ҡатын тағы ла УЗИға барған. Буласаҡ атай ҙа уға эйәргән. УЗИ аппаратын тоташтырғандан һуң ир мониторға ҡараһа, әсәһенең ҡарынындағы бала һул ҡулы менән йән ерен ҡаплаған да, уң ҡулы менән атаһына йоҙроҡ күрһәтә, имеш...

Ғәлим Сынбулатов менән осрашып ҡайтҡандан һуң Кәрим еңелсә һулыш алып, үҙ-үҙенә икенсе күҙлектән, ситтән ҡарай башланы. Тик уның улы тыуыуға һәм машина һатып алыуға бәйле ғәйбәт һүҙҙәр быға са булмаған әрһеҙлек менән тарала башланы. Хәбәр эйәһе менән йөрөмәй. Әммә бер көн килеп махсус рәүештә ғәйбәт таратыусы үҙен фашланы.

Һуңғы тапҡыр булған класташтар осрашыуына биш йыл үткәс, Кәримдең һабаҡташтары тағы ла осрашты. Һабаҡташтар үҙҙәрен уҡытҡан башҡа уҡытыусылар, мәктәптә эшләгән хәҙерге коллектив менән рәсми рәүештә осрашып, фотоға төшкәс, класташтар осрашыуының төп өлөшөнә, Һаҡмар туғайына йүнәлде. Кәрим ҡатыны менән улы Карамды ултыртып, йылға буйына "Крузак" менән килеп төштө. Барыһының да күҙе дүрт булды. Кемдер биш йыл элекке ваҡиғаны иҫенә төшөрөп:

- Ысын ир икәнһең, Кәрим, афарин! Һүҙеңдә торғанһың бит. Менгән атын ҡарағыҙ әле, класташтар, Аҡбуҙаттың нәҡ үҙе бит, - тип әйтеп һалды.

- Былтыр ул тоҡомдарының "ювелир оҫталығы" йолаһына хыянат итте бит әле, класташтар. Малайы тыуҙы...

Был һүҙҙең авторы, әлбиттә, биш йыл элек Кәрим менән ниҙағлашҡан Сәмиғулла ине. Маҡтаған Себеренән ғаиләһен ҡалдырып ҡайтып, хәҙер ул ауыл эшһеҙҙәренең командаһын тулыландырҙы. Шул уҡ "Тойота"һында йөрөй. Ауыл егеттәре менән урманға сығып араҡы эсеп, машинаһын ҡайынға төкөтөп, уныһы йәмшәйеп, бысранып бөткәйне. Махсус тап килтерергә теләһәң дә улай килеп сыҡмаҫ: уның машинаһы менән Кәримдеке был юлы ла йәнәш тура килгән.

Барыһы ла Кәримде машинаһы һәм улы тыуыуы менән ҡотланы. Тостар әйтелде. Һабаҡташтар һәр ҡайһыһы айырып һүҙ алып, һуңғы дүрт йылда өлгәшкән уңыштары хаҡында һөйләне. Был йәһәттән дә иң күп маҡтауҙар һәм хуплауҙар Кәримдең адресына йүнәлдерелде. Барыһы ла туҡтауһыҙ Кәрим дә Кәрим дә тип ҡабатлай торғас, быға тиклем әйтер һүҙен тештәрен шығырлатып уртлап, йотоп торған Сәмиғулла байтаҡ ҡына төшөрөп ҡыйыуланып алғас, бер саҡ телгә килде:

- Ниңә, һеҙ, класташтар, барығыҙ ҙа бер туҡтауһыҙ Кәрим дә Кәрим тиһегеҙ ул? Унан башҡа беҙҙең арала кеше бөткәнме? Мәҫәлән, бына авиация университеты профессоры Тәлғәтте, Мәскәүҙә йәшәүсе класташыбыҙ Мусаны алайыҡ. Ниңә, улар Кәримдән кәмме ни? Йәиһә, Кәримдең уларҙан ҡайһы ере артыҡ?

Уның һүҙен күтәреп алыусы булманы. Көлдөләр генә. Шулай ҙа ауыл хакимиәте башлығы булып эшләүсе класташтары Мәсҡүҙә дәғүә белдереүсегә яуапһыҙ ҡала алманы.

- Бер кем дә, бер кемдән дә кәм дә, артыҡ та түгел, Сәмиғулла. Ниңә башыңа эсәһең? Теге юлы осрашыуыбыҙ ни менән бөткәнен оноттоңмо ни? Табындың йәмен ебәрмә...

- Һеҙ бит үҙегеҙ табындың йәмен ебәрәһегеҙ, Мәсҡүҙә. Бы-

* Хикәйәгә тормошта булған ике ваҡиға нигеҙ итеп алынды

на ошонда беҙҙең килгәнгә сәғәткә яҡын ваҡыт үтте, бер туҡтауһыҙ бер кешенең исемен генә ҡабатлайһығыҙ. Нимә, әллә Кәрим Алланың ҡашҡа тәкәһеме?

- Ҡашҡамы, тәкәме, эш унда түгел, Сәмиғулла. Бында беҙ һуңғы биш йылда өлгәшелгән уңыштар хаҡында һүҙ алып барабыҙ. Кәрим һуңғы биш йылда шәхси хужалығында эшҡыуарлыҡты үҫтереү буйынса бер кем дә башҡара алмағанды атҡарҙы. Ана, ҡарағыҙ ҡыҙҙарына һәм улына. Ниндәйҙәр улар! Кәрим хәҙерге заман геройы. Беҙгә унан үрнәк алырға кәрәк, ә Сәмиғулла кеүек тар эсләнеп ултырмаҫҡа...

Сәмиғулла тағы ла нимәләр әйтергә уҡталды ла, туҡталып ҡалды. Шунан буҙарҙы, Кәрим һүҙ алырға йыйынғас, бупылдап, ауыҙы эсендә бутҡа бешерҙе. Кәрим һүҙ башланы:

- Һеҙ минән герой яһап ташланығыҙ. Машина һатып алыу ҙа булдымы геройлыҡ? Беҙҙең атай-олатайҙарҙы яҡшы ат менеп йөрөгәндәре өсөн генә батыр тип атамағандар, ил өсөн ҡылған ғәмәленә ҡарап баһа биргәндәр. Был йәһәттән мин бер нәмә лә эшләмәнем әле. Хоҙай һаулыҡ бирһә, ауылда эшһеҙ йөрөгән егеттәргә эш урыны ойошторорға ине ниәт. Аҡсаны уны шулай эшләйһең инде: мин ҡулыма килеп эләккән тәүге сумма аҡсаны кеҫәгә лә, банкҡа ла һалып ҡуйманым, тулыһынса эшкә һалдым. Этәргес көскә килгәндә... - Шул саҡ Кәрим Сәмиғулла яғына боролдо. - Сәмиғулла, мин һиңә бөгөн класташтарым алдында оло рәхмәтемде еткерәм. Рәхмәт һиңә! Әгәр ҙә һин теүәл биш йыл элек минең намыҫымды ҡуҙғатмаған булһаң, быларҙың береһе лә булмаҫ ине. Иң ауыр сағымда һине миңә Хоҙай үҙе ебәргәндер...

Ошо ергә еткәс, Кәрим туҡталып ҡалды. Тәрән тынлыҡ урынлашты. Класташтары берсә Кәримгә, берсә Сәмиғуллаға ҡарап ҡатып ҡалды. Тынлыҡты буҙарыуы үтеп, ағара башлаған Сәмиғулла боҙҙо.

- Кәрим, минең шулай ҙа һиңә бер тәҡдимем бар. Һин шулай ҙа теге "Пусть говорят" тапшырыуын алып барған Андрей Малаховҡа шылтырат әле. Улар ДНК анализы яһайҙар бит. Юғиһә, "Ювелир оҫталары" йолаһына хыянат итәһең түгелме? Йәморо ҡара малай хаҡында әйтәм... - Сәмиғулла Зөләйханың ҡулындағы Карамға ишараланы.

Кәрим секундтың меңдән бер өлөшөндә башына килгән уйынан осоп китә яҙҙы. Юҡ, былдай ынтылыш ауылда ғәйбәт таратып ятыусының кем икәнен аңлауҙан түгел ине. Хәҡиҡәттең күҙенә туп-тура ҡарағандай булды ул. Шуға күрә һүҙҙәре лә асыҡ һәм ҡәтғи яңғыраны:

- Миңә малайҙы Хоҙай бирҙе, Сәмиғулла. Һиңә бик тә бик кәрәкһә, бар, Хоҙайҙан анализ ал. Уға икеләнеү белдереп, гонаһҡа батҡым килмәй минең...

Тағы ла тынлыҡ урынлашты. Ара-тирә теле асылып килгән кескәй Карамдың ауыҙ эсенән генә әсәһенә низер әйтеп маташҡаны ишетелде. Был тынлыҡ тағы ла күпмегә һуҙылыр ине икән, уны һабаҡташтарҙың күмәкләп күл сабыуы боҙҙо. Сәмиғулла телһеҙ ҡалғайны.

**(Аҙағы. Башы 23-24-се һандарҙа).**

*ИЛ-ЙӨРТ ХӘБӘРЕ*

**Йылдан-йыл "Салауат эҙҙәре буйлап" туристик маршруты популярлыҡ яулай бара. Башҡортостан Республикаһы Президентының 2010 йылдың 17 декабрендәге бойороғона ярашлы, Салауат районы хакимиәте Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Социаль-иҡтисади тикшеренеүҙәр, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институттары, Башҡортостан Республикаһының Туриндустрия союзы, республиканың Туристик-мәғлүмәт үҙәге менән берлектә туристик маршрут комплексының концепцияһын эшләне. Шунан районда "Салауат Юлаев эҙҙәре буйлап" туристик маршрутының паспорты әҙерләнде. Ошо эштәр барышында беҙ Аҙналы ауылы эргәһендә - Салауат, Иҙрис һәм Юлай (Йонос) ауылы янында Зөләйха шишмәләрен таҙартып, уларҙың тирә-яғын тәртипкә килтереү, Тәкәй ауылы урынында Таш тирмә төҙөү тәҡдиме менән сығыш яһаныҡ һәм был эштәрҙе атҡара ла башланыҡ...**

# БАТЫРЫБЫҘ ЭҘҘӘРЕ БУЙЛАП

## Салауат шишмәһе

Салауат шишмәһен төҙөкләндереү һәм Таш тирмә төҙөү Салауат Юлаев музейына нигеҙ һалыусы Тархан Заһиҙуллиндың изге хыялы ине, әммә үҙе иҫән саҡта уны тормошҡа ашырыу мөмкин булманы, шулай ҙа йылдар үткәс ул ысынбарлыҡҡа әйерелде. Эште милли батырыбыҙҙың олатаһы йәшәгән Аҙналы ауылы урыны йәнәшәһендәге Салауат шишмәһенән башланыҡ. Төҙөкләндереү эштәрен боронғоса өмә яһап атҡарҙыҡ, бында райондың мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре ҙур әүҙемлек күрһәтте. Шишмә тирәһен йылдар буйына йыйылған сүп-сарҙан, лапынан таҙарттыҡ, кәрталәп алдыҡ. "Эҙәрмән" ("Следопыт") программаһын төшөрөүсе төркөм менән шишмә эргәһенә дүрт ширшы ултырттыҡ, эскәмйә ҡуйҙыҡ. 2012 йылда ошо урында Юлай Аҙналин хөрмәтенә ҡорбан салдыҡ, "Шәжәрә байрамы" үткәрҙек, Йәштәр көнөндә флаер-шоу ойоштороҡ.


*Тәкәй ауылы урынындағы Таш тирмә.*

## Таш тирмә

Тархан Заһиҙуллин шулай уҡ Аҙналы ауылы урынында аҡ Таш тирмә ҡорорға хыялланды, беҙ уны Тәкәй ауылы урынында, Салауаттың тыуған ерендә төҙөргә булдыҡ. Төҙөлөш алдынан махсус рәүештә Шишмә районына барып, Хөсәйенбәк һәм Турахан кәшәнәләренең нисек төҙөлгәнлеге менән танышып ҡайттым. Үҙебеҙҙә уны мавзолей рәүешендә эшләнек һәм Юлай менән Салауаттың йәне аҙашып йөрөмәһен, уҙ төбәгенә ҡайтһын, тигән ниәттәбеҙ. Таш тирмә әҙер булғас, Салауат һәм уның атаһы Юлай Аҙналиндың һуңғы төйәге булған Эстонияға сәфәр ҡылып, унан ер алып ҡайтып, кәшәнәгә ҡуйырға планлаштырабыҙ.

Ошо эште башлағас, баш ҡалала ойошторолған "Салауаттар" яҡташтар ойошмаһы тәүге ярҙам күрһәтте һәм улар биргән 10 мең һумдан төҙөлөш башланды. "Салауат вариҫтары" ("Потомки Салавата") төбәк йәмғиәте ойошмаһы рәйесе, батыр тоҡомонан булған Виктор Хәкимов ҙур матди һәм рухи ярҙам күрһәтә. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, "Янгантау" шифаханаһы директоры, шулай уҡ батыр нәҫеле Энгельс Ҡолмөхәмәтов, Ҡатау-Тамаҡ приборҙар эшләү заводының генераль директоры Динар Сәғҙетдинов, Малаяҙ үҙәк дауаханаһының баш табибы Валерий Шапочкин, шәхси эшҡыуарҙар Артур Хатымов, Раян Әминев, Илнур Ғирфанов та ҙур матди ярҙам күрһәтте. Былтыр 16 июндә ШОС һәм БРИКС илдәренең фоторәссамдары - "Тәбиғәт. Кеше. Мәҙәниәт - 2014" халыҡ-ара акцияһы ҡатнашыусылары Тәкәй ауылында булып, ҡорбан салыуҙа ҡатнашып, Таш тирмәнең стенаһына берәр таш һалды.

Төҙөлөш башлар алдынан ниндәй таштың һайларға тип оҙаҡ баш ваттыҡ, ахырҙа, мәрмәрләнгән бурташта (шоколадный мрамор) туҡталдыҡ. Уны Силәбе өлкәһенең Һатҡы районы Романовка ауылы эргәһендәге карьерҙан алдыҡ. Төҙөлөштә өмә яһап атҡарҙыҡ. Был эштә мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре, ауыл хакимиәттәре башлыҡтары, район үҙәгенең учреждение һәм ойошмалары хеҙмәткәрҙәре ҡатнашты. Таш тирмәнең эске диаметры - 6, бейеклеге - 2, көмбәҙ формаһындағы ҡыйығының бейеклеге 2 метр. Тирмәнең стеналарын белгестәр күтәрҙе. Эстән өҫкө өлөшөн периметр буйынса Салауат Юлаевтың "Тирмәмдә" тигән шиғыры яҙылған таш менән биҙәргә уйлайбыҙ:

*Тирмәм тора көмөш кеүек*
*Йылға ярында.*
*Хуш еҫле сәскәләр үҫә*
*Тирә яғында.*
*Көтөүҙәр йәрәй. Мин үҙем*
*Ятам тирмәмдә.*
*Туғандарым, яҡындарым*
*Минең эргәмдә.*
*Шул саҡта тирмәм ишеген*
*Асырға ҡуштым.*
*Төн буйы тыңланым моңон*
*Һандуғас ҡоштоң.*
*Ниндәй яҡшы, ниндәй татлы*
*Булды бөгөн көн.*
*Керпек тә ҡаҡмай үткәрҙем*
*Ошо төндө мин.*

## Зөләйха шишмәһе

Яҡташыбыҙ Марат Вәкиловтың тәҡдиме буйынса, "Башҡортостан Республикаһы экологияһы һәм тәбиғи ресурсҭары" тип аталған дәүләт программаһы сиктәрендә Зөләйха шишмәләренең территорияһын төҙөкләндереүгә (Иҙрис һәм Юлай ауылдары) гариза бирҙек. Былтыр республиканың тәү сиратта төҙөкләндерелергә тейешле эсәр һыуға ҡытлыҡ кисергән ауылдар эргәһендәге 10 шишмә исемлегенә Зөләйха шишмәһе лә индерелде.

Зөләйха шишмәһен төҙөкләндереүгә 100 мең һум аҡса бүленде. Иҙрис ауылы халҡы көсө менән шишмә кәртәләнде, тирмә формаһында матур беседка эшләнде. Был эште ойоштороуҙа ауыл старостаһы Марс Баһауетдинов алдан йөрөнө, өмәләр ойошторҙо. Уларҙа ауылдың барлыҡ ир-аты ҡатнашты тиергә мөмкин. Иң беренсе өмәгә БСТ-нан "Эҙәрмән" программаһы төркөмө килеп, сюжет төшөрҙө. Артабан да шишмәнең тирә-яғын төҙөкләндереү, автомобилдәр өсөн туҡталҡалар, ял итеү урындары булдырыу, уларҙы өҫтәлдәр, эскәмйәләр менән йыһазландырыуҙы планлаштырабыҙ. Шишмә тураһында мәғлүмәт һәм Салауат Юлаевтың башҡорт һәм рус телдәрендә яҙылған шиғырынан баннер әҙерләйбеҙ.

Зөләйха шишмәһе "Салауат Юлаев эҙҙәре буйлап" тип аталған туристик маршрут эсенә инә. Иҙрис ауылындағы Салауат Юлаев мәмерйәһенә барыусы туристар шишмә эргәһендә туҡтап, уның теш ҡамаштырырҙай һыуын эсеп, һыуһынын ҡандырып, юлын артабан дауам итә. Беҙ уларға шундай легенда һөйләйбеҙ: "Салауатты ҡулға алғас, уның һөйәкле ҡатыны Зөләйха килеп илаған ошо урында шишмә бәреп сыҡҡан. Тәүҙә уның һыуы күҙ йәштәре кеүек тоҙло булған. Күп йылдар үткәндән һуң уның тоҙо бөтөп, һыу сөсөгә әйләнгән..." Юл буйында Әлкә дөйөм белем биреү мәктәбенең 11-се синыф уҡыусыһы, 2014 йылда "Йөҙәк ҡашы Зөләйха" район конкурсында Гран-при яулаған, "Салауат йыйыны"нда ошо уҡ исемдәге республика конкурсында 3-сө урын алған Илүзә Ҡәнипованың фотоһы менән баннер урынлаштырҙыҡ. Зөләйха шишмәһенең "Салауат Юлаев эҙҙәре буйлап" туристик маршрутының иң матур объекттарының береһе булырына шик юҡ.

Быйыл "Башҡортостан Республикаһы экологияһы һәм тәбиғи ресурсҭары" дәүләт программаһына ингән Йонос ауылындағы Юлай шишмәһен төҙөкләндереү эшенә тотонасаҡбыҙ.

**Зилә САДЫҠОВА,**
**Салауат Юлаев музейы директоры.**
**Салауат районы.**

***✓ Унының башы һәм муйыны һоро, һырты көрән, ә ҡанаттары һәм ҡойроғо аҡ таптар менән сыбарланған. Матурыраҡ булайым, типтер инде, ҡашын ҡыҙылға "буяп" алған. Ә инде уйын ваҡытында ата һуйыр бар донъяһын онота.***



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ЙӘЙ МИҘГЕЛЕНДӘ...
## ысыҡ кисегеҙ

■ Хәтер юғалтыу - ҡартайыу процесының тәбиғи күренеше, ул Альцгеймер ауырыуы билдәһе булмауы ла ихтимал. Әммә хәтер юғалтыу ирҙәрҙә күпкә иртәрәк - 40 йәштән һуң башлана. Бер төркөм ғалимдар 30 йәштән 95 йәшкә тиклемге 1246 кешенең баш мейеһе тәҙәлөшөн һәм әүҙемлеген тикшергән. 30 йәштән 90 йәшкә тиклем хәтерҙең дөйөм түбәнәйеүе асыҡланған. Баш мейеһенең хәтирәләрҙе һаҡлай торған өлөшө - гиппокамптың кәмеүе лә күҙәтелгән. Унең бәләкәсәйеүе баш мейеһе эшмәкәрлеген дә насарайта. Ирҙәр мейеһенең гиппокампы күләме ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡына ҡарағанда күпкә кәмерәк булыуын да раҫлаған ғалимдар. Әммә быны сәбәбе билдәле түгел, бәлки, ҡатын-ҡыҙҙарҙа булған эстроген гормоны нейрондарҙы зарарланыуҙан һаҡлайҙыр, тип фаразлай белгестәр.

■ Кеше һәр ваҡыт оҙаҡ йәшәргә, сәләмәт булырға хыяллана. Аҙ хәрәкәтләнеү, эмоциональ көсөргәнеш кеше организмының әүҙемлеген түбәнәйтә һәм йөрәк һәм ҡан тамырҙары, яман шеш, ревматизм, матдәләр алмашыныуы менән бәйле сирҙәр барлыҡҡа килә. Былар барыһы ла организмдың иртә ҡартайыуына килтерә. Күп ғалимдар кешенең сәләмәтлегенә физик күнекмәләрҙең файҙалы булыуын билдәләй. Физик әүҙемлек метаболизм процестарын көйләп кенә ҡалмай, йөрәк ауырыуҙарын да иҫкәртә. Бынан тыш, әүҙем тормош алып барған кешенең кәйефе лә күтәренке була, ул стрестарға ла бирешмәй. Ғалимдар бигерәк тә йәйәү йөрөргә кәңәш итә. Яйлап ҡына атлап йөрөһәң, йөрәк ауыртмай, тиҙәр улар. Йәйәү йөрөргә яраткан кеше артыҡ ауырлыҡ менән дә яфаланмаҫ, унең үҙәк нервы системаһы ла ныҡ булыр. Тәүҙә 350-500 метрҙы йәйәү үтеп ҡарағыҙ, аҙаҡтан иһә тиҙлекте лә, арауыҡты ла арттырырға мөмкин. Йәй көнө ысыҡ төшкән үләндә ялан аяҡ йөрөү файҙалы, был организмды нығыта.

■ Көнсығыш Финляндия университеты ғалимдары көрпәһенән таҙартылмаған ондан бешерелгән икмәктең файҙалы яҡтарын асыҡлаған. Ул ҡандағы шәкәрҙе түбәнәйтеп, икенсе типтағы диабет үҫеше хәүефен юҡҡа сығара. Ҡара икмәк инсулинға реакцияны ла яҡшырта, ә аҡ икмәктең ауырығандарға ла, сәләмәт кешеләргә файҙаһы бөтөнләй юҡ тиерлек. Көрпәле икмәк метаболизмға яҡшы йоғонто яһай, шуға ла ул диабеттан һаҡлаусы иң яҡшы сара тип табылған. Икмәктең был төрө ябығырға теләүселәргә лә ярҙам итә. Көнөнә бер нисә киҫәк икмәк ауырлыҡты нормала тотасаҡ, организмдағы майҙарҙан да ҡотҡарасаҡ.

■ Организмға А витамины етешмәһә - күреү һәләте түбәнәйә, В витамины етмәһә, йоҡоһоҙлоҡ йонсота. Арыу, иғтибар туплай алмау, юҡ ҡына сәбәптән дә ҡыҙып барыу, аппетит булмауы - былар барыһы ла авитаминоз тураһында һөйләй. Ә ниндәй витамин етешмәүе тураһында шундай билдәләр буйынса белергә була. А витаминына ҡытлыҡ кисерһәгеҙ, күҙҙәр насар күрә башлай, тире кибә. В витамины етешмәһә, йоҡлап булмай, кәйеф тә йыш үҙгәреп тора. С витамины организмдың дөйөм тонусы өсөн яуаплы. Тәндең бәрелгән урыны күгәреп барһа, теш ҡаҙналары ҡанаһа, яралар насар йүнәлһә, тимәк, һеҙгә С витамины етешмәй. Һөйәктәр һыҙлаһа, тештәр һәм тырнаҡтар торошо насарайһа, D витамины кәрәк. РР витамины етешмәгәндә тире насарая, кибә, тән тартыша.

*ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ*

# ҺУЙЫР УЙЫНЫ

**Һәлмәк кенә баҫып эшкә китеп барһам, бер ағай минең яҡҡа ҡарай елдереп килә ята. Бик шәп килә был, әллә берәй хәл булдымы икән, тип уйлап алдым шул саҡ. Шул арала теге ағайым минең эргәгә килеп тә етте. Килеп тә етте, бер тынала ошондай хәбәр һалды: "Ҡустым, һүҙ ҙә юҡ, гәзиткә матур яҙаһың. Ә бына минең һуйыр тураһында уҡығым килә. Булдыра алһаң, ошо ҡош тураһында яҙ әле".**



Ул әйткән һүҙҙәрҙең айыш-төйөшөнә төшөнмәй ҙә ҡалдым, шул арала ул шәп-шәп баҫып, икенсе яҡҡа китеп тә барҙы. Һаумы ла юҡ, һау бул да юҡ. Була бит шундай серле кешеләр - был ағай әллә ысынлап минең ижадҡа ғашиҡ, әллә шаяртыуы булды. Бына хәҙер барам әле бер аҙ аптырап.

Шул арала эшкә лә барып еттем. Әллә теге ағай белеп әйткән, әллә шулай тура килде - иртәгә һуйыр һанарға барабыҙ тинеләр. Моғайын, тура килгәндер. Ә шулай ҙа һуйыр уйынына барыу, унең уйнағанын тыңлап, хатта ҡарап ултырыуҙы күҙ алдына килтереү менән күңел бермә-бер күтәрелеп китте. Әйткәндәй, һеҙҙең һуйыр уйынында булғаныгыҙ бармы? Форсаты килеп сыҡһа, был күренеште күҙәтеүҙе ҡулдан ыскындырмаҫҡа тырышығыҙ. Һуйыр уйыны яҙғы урманды бөтөнләй үҙгәртеп ебәрә бит ул!

Өйгә ҡайта һалып, иртәгәлеккә кәрәкле әйберҙәрҙе әҙерләп ҡуйҙым. Алдан һөйләшеү буйынса, бөгөн кис урмандағы өйгә барып йоҡлайбыҙ. Ә инде ҡара таң менән һуйырҙар уйнасаҡ ерҙә булырға тейешбеҙ. Ата һуйыр таң атыуға ике сәғәт ҡалғас уйнай ҙа башлай.

Мин әле әйберҙәрҙе йыйыу менән булышам, ә бәләкәй улым аяҡ аҫтында буталып йөрөй. Буталып ҡына йөрөмәй, ә үҙенең бөтмәҫ-төкәнмәҫ һорауҙары менән ҡаңғырта. Ә үҙе шул арала мине уйынсыҡ машинаһы менән тапатырға маташа.

- Атай, ҡайҙа бараһығыҙ?
- Урманға барабыҙ, улым.
- Унда нимә эшләйһегеҙ?
- Һуйыр һанайбыҙ.

Шул арала бала машинаһы менән ниндәйҙер "рейс"ҡа барып та килә. Минең эргәгә килеп тә туҡтай, һорау алыу тағы башланып китә.

- Ә һуйыр нимә була, атай?
- Ул ҡош була, улым.
- Ҙурмы?
- Ҙур.
- Турғай һымаҡмы?
- Юҡ, ҡаҙ һымаҡ.

Бала бер килке тымып тора. Иплән кенә күҙ һалам, танауын соҡой икән.

- Ә уны нисек һанайһығыҙ?
- Нимәне, улым?
- Һуң, һуйырҙы инде.
- Ә-ә-ә, һуйырҙы әйтәһеңме. Уны, берәү, икәү, өсәү, дүртәү, тип һанайбыҙ.

Бала бер аҙға тағы тынып ҡала. Күҙ алдына килтерәләр инде..

- Ә һуйырҙар һин килгәс теҙелешеп ултырамы, шунан һин уларҙы һанайһыңмы?

Быны шулай, балалар уйламаған һорау биреп ҡаңғырта бит күп саҡ.

- Юҡ, улым, яҙ мәле еткәс, атай һуйырҙар уйнай, ә унең һайрауына әсәй һуйырҙар йыйыла. Ана шул мәлдә беҙ уларҙы һанайбыҙ ҙа инде.
- Атайҙары ғына уйнаймы?
- Эйе, атайҙары ғына уйнай.
- Ә әсәйҙәре нишләп уйнамай?
- Улары тыңлап ҡына ултыра. Бына, улым, беҙ, мәҫәлән, кәнсирткә барғаныбыҙ бар бит. Унда өҫтә, сәхнәлә, йырлайҙар, ә беҙ аҫта, ултырғыста, тыңлап ҡына ултырабыҙ. Аҙаҡ сәпәкәй итәбеҙ. Бөтәбеҙ йырлаһаҡ, кем сәпәкәй итер ине, ә?..
- Атайҙары кәнсирт ҡуя, ә әсәйҙәре сәпәкәй итәме, атай?
- Шулайыраҡ килеп сыға инде.
- Кәнсирт бөткәс, нимә эшләйҙәр?
- Матур йырлағаны менән әсәй һуйырҙар ныҡлап таныша.
- Атай, ә улар нисек йырлай?
- Улым, ата һуйыр йырламай, ә уйнай.

Бына ошо ерҙә бала көтөлмәгән һорау бирә.

- Атай, ә улар нимәлә уйнай?

Был һорауға ҡапыл ғына яуап биреп ҡара әле! Шул арала тыштан машинаның бипелдәгән тауышы ишетелде. Минең арттан килеп тә еткәндәр икән. Тиҙерәк йыйынып сыға һалырға кәрәк. Шуға яуапты ла тиҙ генә бирә һалам.

- Улым, улар ҡурайҙа уйнай.
- Ҡурайҙа...

Улым бер аҙға өнһөҙ ҡала. Күҙ алдына килтереп алалыр инде.

- Ә ул ҡурайҙы ҡайҙан алалар, атай?
- Атаһы эшләп бирә.
- Кәнсирт бөткәс, ҡурайын ташлап китәме?
- Юҡ, ҡурайын үҙе менән һәр ваҡыт йөрөтә.
- Арҡаһына тағыпмы?
- Кем ҡайһы еренә таға ала инде.
- Ә ул осҡанда ҡамасауламаймы?
- Юҡ, ҡамасауламай. Ә бына бейегәнендә, бәлки, бер аҙ ҡамасаулайҙыр.
- Улар бейей ҙә беләме ней, атай?
- Геү килеп бейейҙәр, улым.
- Ә уларҙы кем бейергә өйрәтә, атай?
- Тормош өйрәтә, улым, тормош...

Шул арала машина тағы бипелдәтеп ала. Мин тиҙ генә әйберҙәремде эләктерә һалып, ишек яғына ыңғайлайым...

Бына әле урманда һуйыр уйынын тыңлап ултырам. Бер мәл эргәләге ҡарағайға ата һуйыр килеп тә ултырҙы. Унең башы һәм муйыны һоро, һырты көрән, ә ҡанаттары һәм ҡойроғо аҡ таптар менән сыбарланған. Матурыраҡ булайым, типтер инде, ҡүҙе өҫтөндәге ҡашын ҡыҙылға "буяп" алған. Ә инде уйын ваҡытында ата һуйыр бар донъяһын онота. Тирә-йүнгә йүнләп иғтибар ҙа итмәй. Бары тик ниндәйҙер мәлдә генә уйнауынан туҡтап, тирә-яҡҡа күҙ һирпеп ала ла, урманды тағы сихри моңға тултыра. Ҡыҙып киткәндәре хатта ергә төшөп "бейей-бейей" уйнайҙар.

Уйын ваҡытында ата һуйыр суҡышы-ауыҙы менән тәүҙә шартылдау, аҙаҡ салғы янауға оҡшаш тауыштар сығара. Был ваҡытта ҡанаттарын һәм ҡойроғон бер аҙ йәйеп ебәрә, муйынын алға һуҙа. Ата һуйырҙың ошо уйнауы унең көс-ҡеүәтен күрһәтә лә инде.

Бына ошо сихри моңға инә һуйырҙар йыйыла. Ошондай "кәнсирттән" һуң яңы парҙар барлыҡҡа килә. Тәбиғәттә көн күргән был ҡоштарҙың тормошо шулай дауам итә...

**Әгләм ШӘРИПОВ.**

*ШАҢДАУ*

# ЙОЛА ЛА ҺАҠЛАЙ... МИЛЛӘТТЕ



**Гәзиттең быйылғы 5-се һанында Гөлназ Сафуанованың "Һалманы үҙең баҫ, ағас ҡалаҡ" бир!" тигән мәҡәләһен уҡығас, йәштәрҙең дә үҙ төбәгенә хас, сабый сағынан ауыҙ итеп үҫкән ризыҡтарына битараф булмауына ҡыуандым.**

Әбйәлил бишбармағына әллә күпме дан йырларға булыр ине, йәнгә лә, тәнгә лә сихәт кенә бит ул! Ашты табынға ҡуйыуҙың бар нескәлектәре бөгөн дә һаҡлана бында. Һыйҙы иң элек йорт хужаһы үҙе тәмләй, шунан ҡунаҡтар ашҡа үрелә. Был хужаларға ҡарата хөрмәт күрһәтеү күренеше. "Ризыҡ эйәһе менән татлы", тип бушҡа әйтмәйҙәр бит инде. Элегерәк табында айырым ит тураусы ла була торғайны. Ул тураған иттән ҡалған һөйәктәрҙе мәҡәл-әйтемдәр, мәрәкә һүҙҙәр менән, дәрәжәһенә ҡарап, һәр ҡунаҡҡа таратып бирер ине. Әбйәлил яҡтарында электән килгән ошо бишбармаҡ бешереү, унең менән һыйлау йолалары теүәл килеш һаҡланып ҡалыуы - үҙе уникаль күренеш башҡорт йәмғиәтендә.

**Айһылыу ХӘСӘНОВА.**
**Әбйәлил районы Рысҡужа ауылы.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**Мөхәммәт бәйғәмбәр сәхәбәләренең береһе рамаҙан айына мөнәсәбәттәре тураһында шулай тип һөйләгән: "Беҙ рамаҙан башланғансы ярты йыл буйы Аллаһы Тәғәләгә, ошо изге айҙы ҡаршы алырға насип ит, тип доға ҡыла торғайныҡ. Рамаҙан үтеп киткәндән һуң ярты йыл буйы Аллаһтан ошо айҙа ҡылған ғибәҙәттәрҙе, яҡшы ғәмәлдәрҙе ҡабул итеүен һораныҡ".**

# УРАҘА МӘКТӘБЕ ҮТКӘНДӘР...



## һәр һынауға әҙер була

Аллаһы Тәғәлә нәфсене яралтҡандан һуң уны тәрбиәләү һәм рәхмәтле иттереү маҡсатында төрлө һынауҙарға дусар итә. Хоҙай нәфсенән: "Һин кем һәм мин кем?" - тип һорай. Нәфсе тәкәбберлеген еңә алмайынса: "Һин - һин, ә мин - мин", - тип яуап бирә, үҙен Аллаһы Тәғәлә менән бер тиң ҡуйырға тырыша. Шунан Аллаһы Тәғәлә уны асыҡтыра. Асыҡҡас ҡына нәфсе үҙенең кем икәнлеген танырға мәжбүр була: "Һин бар ғаләмдәр Хакимы, мин һинең ҡолоң", - тип яуаплай.

Кешелә ике башланғыс йәшәй. Беренсеһе изгелеккә, яҡшылыҡҡа өндәгән фәрештәләр башланғысы булһа, икенсеһе түбән хистәргә тартҡан хайуани башланғыс. Кешегә ошо ике башланғыс, ихтыяр, бер ни тиклем һайлау мөмкинлеге бирелеүе уны йә фәрештәләрҙән юғары изге зат итә, йә хайуандарҙан меҫкенерәк итеп, түбәнгә төшөрә. Нәфсегә һәм шәһүәткә ҡаршы торған, көн дауамында аҙыҡтан баш тартҡан, түбән теләктәрҙе ауыҙлыҡлай алған, ғәйбәттән телен һаҡлаған, ғәҙелһеҙлектән йыраҡ торған кеше фәрештә асылын ала.

Ураҙа тотоусының һәр сәғәте, һәр минуты, һәр секунды оло ҡиммәткә эйә. Сөнки ул Аллаһы Тәғәләне, Уның янына ҡайтасағын хәтергә төшөрә. Донъя ләззәттәренең ҡасан да булһа бөтөүен аңлай. Мәңгелек ҡиммәттәргә ынтыла башлай. Тәү ҡарауға, иртә таңдан ҡара кискә тиклем ашамаған, эсмәгән кеше ыҙалағаны кеүек. Ысынында иһә, ураҙаның алдағы мәңгелек тормошта ҙур сауаптар килтерәсәге, Хаҡ Тәғәлә ризалығына өлгәшеүгә сәбәпсе буласағы тураһындағы изге уйҙар уның ғазаптарын еңелгә ҡалдыра. Ураҙа тотоусы көнө буйы үҙенең Хакимы тураһында уйлай. Уйҙары Аллаһы Тәғәлә тураһында булғанға күрә, уның бар тормошо хаҡ юлда төҙөлә башлай. Ураҙалы кеше ифтар ваҡытында ике ҙур ләззәт ала. Беренсеһе ауыҙ асҡандағы аҙыҡ менән килһә, икенсеһе мәңгелеккә ураҙа тотоусы мөьминдәр өсөн генә әҙерләгән Аллаһы Тәғәләнең бүләге. Мөхәммәт бәйғәмбәр, ураҙа тотоусы өсөн ике шатлыҡлы мәл бар, тигән. Улар - ауыҙ асыу һәм Аллаһы Тәғәлә менән осрашыу мәле.

Аллаһы Тәғәлә ерҙе төрлө-төрлө муллыҡтар менән тултырған һәм уларҙы ерҙәге урынбаҫары - кеше ҡарамағына тапшырған. Көн һайын беҙгә янынан-яны муллыҡтар ебәрелеп тора. Ләкин беҙ йыш ҡына ошо һаныҙ байлыҡты ҡәҙерһеҙләп, беҙгә бирелгән ниғмәттәрҙең дә хужаһы бар икәнлеген бөтөнләй иҫкә алмай башлайбыҙ. Күптәр аслыҡ, мохтажлыҡ кисермәгәнгә күрә, Аллаһы Тәғәлә биргән ниғмәттәрҙе лайыҡлы рәүештә баһалай алмай. Ә ураҙа тотҡан кеше ауыҙ асыу мәленә ҡатҡан икмәктең дә Аллаһы Тәғәләнең оло ниғмәте икәнен аңлаясаҡ. Рамаҙан ваҡытында һәр кемгә Аллаһы Тәғәләгә ихлас рәхмәтен еткереү мөмкинлеге бирелә.

Бөтә ғүмерен ҡиммәтле һәм нәфис ниғмәттәр араһында үткәргән, асығыу һәм һыуға сарсау тигән тойғоларҙы белмәгән бай кешегә ураҙа фәҡирлек менән мохтажлыҡ "ләззәттәрен" татырға мөмкинлек бирә. Ошондай һынауҙарҙы үткән етеш тормоштағы кеше мохтаждарҙың хәлен аңларға өйрәнә, уңайы сыҡҡан һайын уларға ярҙам ҡулы һуҙырға тырыша. Бай кешенең күңелен йомартлыҡ, мәрхәмәтлек тултырған һайын, үҙенән фәҡирерәк йәшәүселәргә ҡарата шәфҡәтлек тойғоһо арта. Ярлылар иһә уға ла мөхәббәт һәм ихлас хөрмәт менән ҡарай башлай. Был төрлө халыҡ ҡатламдары араһында синыфара күрә алмаусанлыҡты юҡҡа сығара, йәмғиәттә тыныслыҡ һәм татыулыҡ урынлаштыра.

Ураҙа ярҙамында кеше социаль тормошон байыта, яңы бәйләнештәр урынлаштыра. Был бәйләнештәр донъяуи бәйләнештәргә ҡарағанда таҙараҡ һәм нығыраҡ була. Бергә ураҙа тотҡан, ифтар, сәхәрҙәрҙә ҡатнашҡан, тәрәүих намаҙҙарын уҡыған, Ҡәҙер кисәһен һәм Ураҙа байрамын үткәргән мосолмандар араһында бер-берененә ҡарата ысын һәм таҙа мөхәббәт, хөрмәт, ярҙам тойғолары барлыҡҡа килә. Улар бәйғәмбәребеҙҙең "Бер-беренегә ҡарата һөйөүҙә, мәрхәмәтлектә һәм миһырбанлыҡта мөьминдәр бер тәнгә бәрәбәр. Берәй ағзаһы сиргә юлыҡһа, бөтә тән уның ауыртыуын тоя һәм уртаҡлаша", тигән хәҙисендәге берҙәмлеккә эйә була.

Ерҙәге етешлек, хозур тормош һәм именлек мәңге дауам итмәй. Көтөлмәгән сәбәптәр арҡаһында байлыҡ тиҙ арала ярлылыҡҡа, сәләмәтлек ауырыуға әйләнеүе ихтимал. Ошондай ҡаты һынауҙарҙы аҙағына тиклем лайыҡлы үтер өсөн кеше йәне менән дә, тәне менән дә уларға әҙер булырға тейеш. Ураҙа шундай һынауҙарға ҡаршы әхлаҡи яҡтан да, физик яҡтан да әҙерлек ул. Сөнки ул кешене оҙаҡ ваҡытҡа көндәлек хәжәттәренән тыйылып торорға өйрәтә. Бынан тыш, ураҙа камил кешегә хас принципиаллек һәм үҙ-үҙенде ҡулда тота белеү кеүек характер һыҙаттары ла тәрбиәләй.

Ураҙа мәктәбен үткән кеше ҡыйынлыҡтарҙы, рисыҡланмауҙы түҙемлек менән үткәреп ебәрергә өйрәнә. Бер ниндәй донъя хәжәте лә уны үҙ ҡоло итә алмай, сөнки ул кемгә таянырға кәрәклеге тураһында яҡшы белә. Аллаһы Тәғәләне, уның бойороуҙарын, шул иҫәптән ураҙаны, инҡар иткән кеше иһә мохтажлыҡ тигән ауыр һынау алдында һынасаҡ. Хаҡ Хакимдың ниғмәттәр баҡсаһын ҡалдырып, меҫкендәрҙең ишектәрен ҡағып, хәйерселеккә биреләсәк. Бындай әҙәм мең алтын һарайы булғанда ла меҫкен хәйерсе булып ҡаласаҡ.

**"Башҡортса дини календарь", 2015 йыл.**

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# ИНЖИР ҠАНДЫ ШЫЙЫҒАЙТА



**Инжир составында булған эфирлы майҙар ҡан составын һәм уның ҡуйылыуын нормаға килтерә. Шуға күрә, ҡанды шыйығайтыу ниәтендә аспирин эсергә кәрәкмәй, ай дауамында көнөнә 1 инжир емеше ашау ҙа етә. Бер ай туҡтап торғандан һуң, дауаланыуҙы ҡабатларға кәрәк.**

Бынан тыш, инжир баш мейеһе өсөн бик файҙалы, уны интеллектуаль һәм ижади эш менән шөғөлләнеүселәргә ашарға кәңәш итеlә. Температура юғары күтәрелгән осраҡта, тамаҡ шешкәндә, бронхит, ауыҙ ҡыуышлығы инфекциялары менән ауырығанда 1 ҡалаҡ ваҡланған инжирға 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 10 минут талғын утта ҡайнатып, көнөнә 4 тапҡыр эсергә була.

Арығанлыҡ, көсһеҙлөк тойғанда, нервылар ҡаҡшағанда ла инжир ярҙамға килер. Дүрт-биш инжир емешенә бер стакан йылы һөт ҡойоп төнәтергә, изергә һәм ҡатышманы ике-дүрт өлөшкә бүлеп, көн дауамында ашарға. Цистит, пиелонефрит, бөйөл юлына таш ултырғанда 3-5 инжир емешенә 200 мл ҡайнар һыу ҡойоп, талғын утта ҡайнатып алғас, яҡшылап йомшартып, көн дауамында үҙен генә ашарға кәрәк.

Дөйөм һаулыҡты нығытыу өсөн инжирҙан турама эшләп ашарға була, был йәрәкә лә бик файҙалы. Уны эшләү өсөн 300 грамм инжир, 150 грамм ҡара емеш, 2,5 ҡалаҡ бадам (миндаль) сәтләүеге, 1 стакан ҡатыҡ, әфлисун ҡабығы кәрәк булыр. Ҡара емеш менән инжирҙы йыуып, һыуҙа ебетеп, ваҡлап турарға. Баҙам сәтләүеген ҡайнар һыу менән бешереп, ҡабығын һыҙырып, ваҡларға. Ингредиенттарҙы бутап, әфлисун ҡабығы һибеп, өҫтөнә ҡатыҡ ҡойорға. Шәкәр ҡушыу кәңәш ителмәй.

УҢЫШ ҠАҘАН



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Эгоизмдың бәҫе

### Уҡымышлы эгоизм зарурлығы

Эгоист булыу шәп түгелме ни? Ғәмәлдә, күптәрҙә үҙең өсөн генә нимәлер эшләү уйы ниндәйҙер ғәйеп тойғоһон уяталыр. Әммә эгоизм - әхлаҡи өҫтөнлөгөгөҙ ул. Кемдер һеҙҙе борсомаһын өсөн телефонығыҙҙы һүндереп ҡуймайһығыҙмы ни: туғанығыҙ күршеләренә зарланмаһын, дуҫығыҙ күсенергә ярҙам итеүегеҙҙе һорамаһын, танышығыҙ ҡайҙалыр алып барыуығыҙҙы үтенмәһен, етәксегеҙ телевизорҙан барған матчтың эсенә инеп китергә ҡамасауламаһын, һ.б. Ошо күҙлектән ҡарағанда, эгоист булыу һәйбәт тә инде, тик ниңә ул беҙҙе оялыштан ҡыҙарырға мәжбүр итә һуң?

Мин "эгоизм" һүҙен характерҙың ыңғай сифаттарын һүрәтләр өсөн ҡулланам. Һүҙлектәрҙә ул гәҙиттә "үҙеңдең ихтыяждарына ғына иғтибар биреү, башҡаларға иғтибар итмәү" тип билдәләнә. Был үҙегеҙҙең тәү сиратта торған ҡиммәт икәнлегегеҙҙе һәм башҡаларҙың фекеренә иғтибар бирмәүегеҙҙе аңлата; күрәһегеҙме, был билдәләмәлә бер ниндәй ыңғай ҙа, кире лә мәғәнә юҡ. "Башҡаларға иғтибар бирмәү" уларға зыян итәһегеҙ тигәнде аңлатмай. Был бары тик тормошҡа яҡшы яраҡлашыуығыҙ һәм, тәү сиратта, үҙегеҙҙең ихтыяжығыҙҙы ҡәнәғәтләндереү йүнәлешендәге аҡылығыҙҙы ғына күрһәтә.

Әлбиттә, йәмғиәттең күпселеге йәки төркөм быға ышаныуығыҙҙы теләмәй. Һеҙгә, әхлаҡи бурысығыҙ - күпселектең ихтыяжын үҙегеҙҙекенән өҫтөнөрәк ҡуйыу һәм үҙегеҙҙе юғары мәнфәғәт өсөн ҡорбан итергә тейешһегеҙ, тип тылҡый.

Был идея үҙбаһағыҙ һәм тормошоғоҙ өсөн бик хәүефле. Башҡалар хаҡына үҙегеҙҙең бәхетегеҙҙән баш тартыу һеҙҙең меҫкен һәм хатта үҙегеҙҙең иғтибарығыҙға ла лайыҡ булмауығыҙҙы раҫлай. Башҡалар хаҡына үҙегеҙҙең бәхетегеҙҙе ҡорбан итеү гуманлылыҡҡа ҡаршы килә һәм аҡылығыҙҙың зәғиф икәнлеген күрһәтә.

Йәшәү ныҡлығығыҙ һәм бәхеткә ынтылышығыҙ тормошоғоҙҙо үҙ средстволарығыҙ, үҙ стандарттарығыҙ һәм үҙегеҙҙең ҡәнәғәтлегегеҙ буйынса ҡороу ҡиммәттәре системаһының нигеҙендә ятырға тейеш. Ҡалған нәмәләр һеҙҙең өсөн зыянлы, ә бер кеше өсөн зыянлы булған нәмә ғәмәлдә тотош йәмғиәткә зыян килтерә.

Тик йәмғиәт быны аңларға һәләтле тип уйлай күрмәгеҙ - һәләтле түгел. Һөҙөн һәр саҡ үҙ фекерендә ҡалып, һеҙҙе индивидуумдың ихтыяжын дөйөм ихтыяж хаҡына ҡорбан итергә кәрәк, һеҙҙең изге бурысығыҙ - башҡалар тураһында хәстәрлек күреү, тип тылҡыясаҡ. Был да изге ниәт кеүек, шулай бит? Тик, әйҙәгеҙ, уға ентекләберәк ҡарайыҡ. Бөгөн дәүләттең социаль системаһы эшһеҙҙәргә һ.б. ярҙам итергә әҙер. Уларҙы ашаталар, кейендерәләр, йәшәү урыны бирәләр, вакансиялар тәҡдим итәләр, әңгәмәләшеү үткәрәләр, яңы һөнәргә уҡыталар. Хөкүмәт шундай тиҫтәләгән программа әҙерләгән һәм ул төрлө хәл-торошто иҫәпкә ала, уларҙы финансларға ла хәленән килә, сөнки аҡсаны һеҙҙең эш хаҡынан һалым рәүешендә ала. Бөгөнгө һалым һалыу системаһы шулай эшләй, ул продуктлылыҡты язалай, продуктһыҙлыҡты хуплай.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**



## 22 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.20 "Время покажет" (16+).
16.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Старшая дочь". Мелодраматический сериал. 9-я и 10-я серии (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.15 "Непокоренные" (16+).
02.15 "Время покажет" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Время покажет" (16+).
03.10 "Наедине со всеми" (16+).
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Рассудят люди". Ток-шоу (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Все только начинается". 1-3-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
23.50 "Курсанты". 1-2-я серии. Военно-драматический сериал (12+).
01.50 "Американская трагедия".
03.10 "Закон и порядок-20" (16+).
04.05 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар(6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар(6+)
11.50 "Кәмит". Юмор (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
15.00 "Һуңғы өмөт". Концерт (6+)
19.00 "Байыҡ-2015". 1 тур (6+)
20.00 "Гәлсәр һандуғас". "Станция". Концерт
22.00 "Кисултырып". "Йәшәү, һөйөү, еңеү". Концерт (12+)

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан.**
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Новости недели (на баш. яз.).**
**10.30 "Борсаҡ" (0+).**
**10.45 "Городок АЮЯ" (0+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Бедная Настя" (12+).**
**12.30 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.45, 14.15 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30 , 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.00 Новости недели.**
**15.00 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.15 "Ғәләмәт донъя" (0+).**
**15.30 "Гора новостей" (0+).**
**15.45 "Юные виртуозы Уфы" (0+).**
**16.00 "Золотой фонд башкирского ТВ" (6+).**
**16.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "КЛИО" (0+).**
**17.30 Новости культуры (0+).**
**17.45 "К вершинам гор" (12+).**
**18.15 "Большой чемодан" (6+).**
**19.00 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**19.15 "Телецентр".**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости спорта.**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Враги". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 23 ИЮНЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Старшая дочь". Сериал (12+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.20 "Время покажет" (16+).
16.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Старшая дочь". 11-я и 12-я, заключительная, серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант". (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Структура момента" (16+).
01.25 "Наедине со всеми" (16+).
02.20 "Время покажет" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Время покажет".
03.20 "Модный приговор".
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Рассудят люди" (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Все только начинается". 4-6-я серии (12+).
23.50 "Курсанты". 3-4-я серии (12+).
01.50 "Американская трагедия".
03.10 "Закон и порядок-20" (16+).
04.05 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар(6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар(6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
22.00 "Кисултырып". "Уйна, гармун". Концерт (12+)

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Миллион лет до нашей эры (0+).**
**10.30 "Зеркальце" (0+).**
**10.45 "Царь горы" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 18.00 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Весело живем" (12+).**
**15.00 "Семәр" (0+).**
**15.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.30 "Гора новостей" (0+).**
**15.45 "Фанташ" (0+).**
**16.00 "Башҡорттар" (12+).**
**16.45 "Дорога к храму" (0+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Уфим башкирский язык" (0+).**
**18.15 "Большой чемодан" (6+).**
**19.00 "Кавалеры Морской звезды". Сериал (12+).**
**20.00 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня.**
**21.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Запретная любовь". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 24 ИЮНЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Старшая дочь". Сериал (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Курортный роман". 1-я и 2-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "Политика" (16+).
01.25 "Наедине со всеми" (16+).
02.20 "Время покажет" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Время покажет" (16+).
03.15 "Модный приговор" (16+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Рассудят люди". Ток-шоу (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Все только начинается". 7-я и 8-я серии (12+).
22.55 "Специальный корреспондент" (16+).
00.35 "Курсанты". 5-6-я серии (12+).
02.30 "Американская трагедия".
04.00 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар(6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар(6+)
11.50 "Кәмит". Юмор (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
19.00 "Башҡорт йыры". Хит-парад (12+)
22.00 "Кис ултырып". "Кош юлы". Рок-фестиваль (12+)

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Миллион лет до нашей эры" (0+).**
**10.30 "Книга сказок" (0+).**
**10.45 "Борсаҡ" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Башҡорт йыры" (12+).**
**14.15 "Весело живем" (12+).**
**15.00 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.15 "Шәп арба" (0+).**
**15.30 "Гора новостей" (0+).**
**15.45 "Физра. Спортблог спецкора" (0+).**
**16.00 "Тәмле" (12+).**
**16.45 "Здоровое решение" (12+).**
**17.15 "Позывной "Барс" (6+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Учу башкирский язык" (0+).**
**18.00 "История признания" (6+).**
**18.15 "Большой чемодан" (6+).**
**19.00 "Кавалеры Морской звезды". Сериал (12+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.) (12+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Пробуждение". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 25 ИЮНЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами) (16+).
12.20 "Курортный роман". Комедийный сериал. 1-я и 2-я серии (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Курортный роман". 3-я и 4-я серии (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "На ночь глядя" (16+).
01.20 "Время покажет" (16+).
02.15 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Наедине со всеми" (16+).
03.15 "Модный приговор".
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00, 14.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Рассудят люди" (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Все только начинается". 9-я и 10-я серии (12+).
22.55 "Курсанты". Военно-драматический сериал. 7-я и 8-я серии (12+).
02.40 "Американская трагедия". Сериал.
04.15 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар(6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар(6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
19.00 "Байыҡ-2015". 1 тур (12+)
22.00. "Кис ултырып". Абдулла Солтанов. Концерт (12+)

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Миллион лет до нашей эры" (0+).**
**10.30 "Дети-герои" (0+).**
**10.45 "Цирк в 13 метров" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 18.00 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Весело живем" (12+).**
**15.00 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**15.15 "Семәр" (0+).**
**15.30 "Гора новостей" (0+).**
**15.45 "Книга сказок" (0+).**
**16.00 "Автограф" (6+).**
**16.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Учу башкирский язык" (0+).**
**18.15 "Большой чемодан" (6+).**
**19.00 "Кавалеры морской звезды". Сериал (12+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (0+).**
**21.00 "Наука 102" (6+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Разыскивается герой". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 26 ИЮНЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Курортный роман". Сериал (12+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Три аккорда" (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.25 "Правдивая ложь". Боевик (16+).
03.05 "Модный приговор".
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.10, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Хрустальный соловей".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Последний янычар". Мелодраматический сериал (12+).
16.00 "Рассудят люди" (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир".
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Юморина". Главный юмористический фестиваль года.
23.00 "Жила-была любовь". Мелодрама (12+).
01.00 "Живой звук".
02.50 Торжественное открытие 37-го Московского международного кинофестиваля.
04.10 "Горячая десятка" (12+).
05.20 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.50 "Кәмит". Юмор (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (0+)
20.00 "Ҡотлауҙар" (6+)
22.00 "Кис ултырып". Рәил Өмөтбаев, Бибисара Азаматова. Концерт (12+)

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Миллион лет до нашей эры" (0+).**
**10.30 "Городок АЮЯ" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (0+).**
**11.00 "Замандаш" (6+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 14.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Весело живем" (12+).**
**15.00 "Зеркальце" (0+).**
**15.15 "Каникулы Нестрогого режима" (0+).**
**15.30 "Байтус" (0+).**
**15.45 "Сулпылар" (0+).**
**16.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**16.45 "Народы Башкортостана" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Учу башкирский язык" (0+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**18.30 "Большой чемодан" (16+).**
**19.00 "Кавалеры морской звезды". Сериал (12+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня (на башк. яз.).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Аль-Фатиха" (6+).**
**23.00 "Вечный зов". Худ. фильм (16+).**

## 27 ИЮНЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
04.50, 06.10 "План на игру". Худ. фильм (12+).
06.00 Новости.
07.05 "Зимняя вишня". Худ. фильм.
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Инна Чурикова. "Не принцесса! Королевна!!!". Док. фильм (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
13.10 "Московская сага". Драматический сериал (12+).
17.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Угадай мелодию".
19.00 "ДОстояние РЕспублики: Игорь Николаев".
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
22.55 "Танцуй!" Объявление победителя.
01.35 "Омен". Фильм ужасов (18+).
03.40 "Женщина сверху". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
05.55 "Очень верная жена". Худ. фильм (12+).
07.30 "Сельское утро".
08.00 "Вести".
08.20 "Вести-Башкортостан".
08.30 "Укротители звука" (12+).
09.25 "Субботник".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.30 "Кулинарная звезда" (12+).
12.35, 14.40 "Карусель". Мелодрама (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
15.15 "Субботний вечер".
17.05 "Улица Веселая". Юмористическая развлекательная программа (12+).
18.00 "Я буду рядом". Мелодрама (12+).
20.00 "Вести в субботу".
20.45 "Деревенщина". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.40 "Везучая". Худ. фильм (12+).
03.40 "Неоконченный урок". Худ. фильм (16+).
04.30 "Рецепт Победы. Медицина в годы Великой Отечественной войны" (12+).

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
18.00 "Ете ҡыҙ". Фильм (6+)
19.00 "Башҡорт йыры". Хит-парад (12+)
22.00 "Кис ултырып". "Ҡурай дуҫтарын йыя"(Turkvision) (12+)

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан.**
**07.05, 22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.15 "Энн из поместья Зеленые Крыши" (6+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.30, 21.30 Новости.**
**12.45 "Наука 102" (12+).**
**13.15 "Встречи. Башкортостан - Баден" Вюртемберг (Германия) (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Мы из прошлого" (12+).**
**16.00 "Баик-2015" (12+).**
**16.45 "Между небом и землей" (12+).**
**18.00 "Весело живем" (12+).**
**18.15 "Хазина" (6+).**
**18.45 "Листок". Худ. фильм (12+).**
**19.00 "Башҡорттар" (12+).**
**19.30 "Дополнительное время". Худ. фильм (12+).**
**21.00 "Башҡорт йыры" (12+).**
**22.00 Народы Башкортостана (12+).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**23.45 "Вечный зов". Худ. фильм (12+).**

## 28 ИЮНЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.40, 06.10 "В наше время" (12+).
06.00 Новости.
06.40 "Дети Дн Кихота". Худ. фильм (6+).
08.10 "Служу Отчизне!"
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Парк". Новое летнее телевидение.
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Фазенда".
12.50 "Московская сага". Сериал (12+).
16.40 "Теория заговора". Документальный проект.
17.45 "Голосящий КиВиН". Музыкальный фестиваль (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Что? Где? Когда?"
23.40 "Шопоголик". Романтическая комедия (12+).
01.35 "Проклятый путь". Худ. фильм (16+).
03.45 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).

### РОССИЯ 1
05.45 "Три дня на размышление". Худ. фильм.
08.35, 03.50 "Планета собак".
09.10 "Смехопанорама Евгения Петросяна".
09.40 "Утренняя почта".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Родители". Сериал (12+).
12.10 "Подруги". Мелодрама (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
16.10 "Путь к себе". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.35 Церемония вручения национальной премии "Радиомания-2015".
01.50 "Тихий омут". Худ. фильм (16+).
04.20 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.50 "Кәмит". Юмор (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.35 "Премьера". Яңы клиптар (6+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
20.00 "Ҡотлауҙар" (6+)
22.00 "Кис ултырып". "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө. Концерт (12+)

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан (12+).**
**07.05 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 "Энн из поместья "Зеленые Крыши" (6+).**
**10.00 "Физра. Спортблог спецкора" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Бауырһаҡ" (0+).**
**10.45 "Байтус" (0+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.) (0+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Чудеса" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Позывной "Барс" (12+).**
**16.45 "Не улетайте, журавли" (12+).**
**18.15 "Бизнес-обзор" (12+).**
**18.30 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**18.45 "История признания" (6+).**
**19.00 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**19.15 "Помпеи". Худ. фильм (12+).**
**21.00 "Любимое дело" (12+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Баик" представляет…" (12+).**
**23.30 "Вечер.com" (12+).**
**00.15 "Вечный зов". Худ. фильм (12+).**

✓ ***Форум башҡорт йәштәренең рухи үҫеше, йәш быуындың өлкәндәр менән бәйләнешен нығытыу, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе һаҡлау өсөн шарттар булдырыу маҡсатында уҙғарылды.***



СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

# ТАМЫРҘАРҘЫҢ СИРАТТАҒЫ ЕҢЕҮЕ



**Мәскәүҙә "Включайся!" балалар телевидениеһы фестивалендә "Тамыр" телеканалының эше дүрт диплом менән баһаланды. Был хаҡта Башҡортостан юлдаш телевидениеһының матбуғат секретары Альбина Ғатауллина хәбәр итте.**

"Егорҙың тикшереүе. Һыу" тапшырыуы - "Яңылыҡтар донъяһы - балалар күҙлегенән" номинацияһында иң яҡшы яңылыҡтар программаһы, Ләйсән Мәзитованың "Әҙәбиәт. Зәйнәб Биишева" исемле эше әҙәбиәт тураһында иң яҡшы фильм тип танылды. Йәш уйлап табыусылар хаҡындағы "Изобретариум" тапшырыуы "Шөғөлдәр донъяһы" номинацияһында өлкәндәрҙең дә, балаларҙың да жюрийы ҡарары буйынса бер юлы ике наградаға лайыҡ булды.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, тамырҙар ошо фестивалдә беренсе тапҡыр ғына еңеү яуламай. Былтыр улар биш диплом алып ҡайтты. Быйылғы фестивалдә Түбәнге Новгород, Ижевск, Ярославль, Таганрог, Орск, Өфө, Воронеж, Пермь, Екатеринбург, Ҡазан, Санкт-Петербург, Мәскәү һәм Рәсәйҙең, Ҡазағстандың, Белоруссия, Украинаның йәш хәбәрселәре ҡатнашты. Профессиональ һәм балалар жюрийы 230 эш араһынан һигеҙ номинацияла еңеүселәрҙе билдәләне. Шуны әйтеп үтергә кәрәк: бөтә Рәсәй балалар жюрийында "Тау-тау хәбәр" тапшырыуын алып барыусы Сафия Ғәйсина эшләне.

Сараны ойоштороусылар - "Карусель" телеканалы ҡатнашлығында, Матбуғат һәм киң коммуникациялар буйынса федераль агентлыҡ һәм Мәскәү хакимиәте булышлығында Телерадиотапшырыуҙар милли ассоциацияһы.

# БЫУЫНДАР БӘЙЛӘНЕШЕ ӨЛГӨҺӨ

**Башҡортостанда беренсе башҡорт этнография форумы уҙҙы. Баймаҡ районы республиканың төрлө мөйөштәренән һәм күрше төбәктәрҙән ҡунаҡтар ҡабул итте.**

Сараны Баймаҡ районы хакимиәте булышлығында, "Ирәндек" этнокомплексы менән берлектә Башҡортостан Республикаһының Йәш яҡташтар ассоциацияһы ойошторҙо. Йәштәр өс көн буйына эксперттарҙың лекцияларын тыңланы, түңәрәк ҡорҙарҙа ҡатнашты, сәйәсмәндәр, эшҡыуарҙар һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре менән осрашыуҙар ойошторолдо. Этнофорумда ҡатнашыусылар менән аралашыу өсөн ғалимдар Салауат Хәмиҙуллин, Закирйән Әминев, Азат Бердин, Юлдаш Йосопов килде, улар йәштәргә республиканың, башҡорт ырыуҙарының тарихын бәйән итте. Башҡорт яҙыусыһы һәм йәмәғәт эшмәкәре Гүзәл Ситдиҡова халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре, Башҡорт Википедияһының үҫеше хаҡында бәйән итте. Башҡортостан юлдаш телевидениеһының баш мөхәррире Гүзәл Хәсәнова киң мәғлүмәт сараларында имиджды формалаштырыу тураһында лекция менән сығыш яһаны, философия фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт университеты доценты Гүзәл Вилданова донъяға ҡараш мәсьәләләренә ҡағылды, "Рәсәй терәге" Башҡортостан төбәк булексәһенең башҡарма директоры Тимур Лоҡманов һөҙөмтәле идара итеү һәм бизнес тураһында һөйләне.

Лилиә Барлыбаева етәкселегендәге "Happy Super Mom" клубы вәкилдәре (Сибай) форумда ҡатнашыусы ҡатын-ҡыҙҙар менән башҡорттарҙың ғаилә традициялары, гүзәллек, әсәлек бәхете һәм ойоштороу тәжрибәһе хаҡында әңгәмә ҡорҙо. Ир-егеттәр иһә "Төньяҡ амурҙары" хәрби-тарихи клубы вәкилдәре менән аралашты, улар үҙ сиратында башҡорт яугирҙарының ҡаһарманлығы тураһында һөйләне.

Этнофорумда уҡтан атыу, тирмә ҡороу, милли кейем тегеү буйынса оҫталыҡ дәрестәре, бизнес-тренингтар ойошторолдо. Теләгән һәр кем футбол, волейбол уйнаны һәм Ирәндек һыртында атта йөрөнө.

"Форум башҡорт йәштәренең рухи үҫеше, йәш быуындың өлкәндәр менән бәйләнешен нығытыу, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе һаҡлау өсөн шарттар булдырыу маҡсатында уҙғарылды. Минеңсә, быңдай этнофорум - йәштәргә белем һәм тәжрибә тапшырыуҙың, илһөйәрлек тойғоһон уятыуҙың һөҙөмтәле ысулы", - тип тәьсораттары менән уртаҡлашты форумдың директоры Роберт Дәүләтшин.

# "ҠОШ ЮЛЫ" ТАЛАНТТАР АСА

**Ейәнсура районында сираттағы "Ҡош юлы" Асыҡ башҡорт бард фестивале уҙғарылды. Республиканың төрлө төбәктәренән һәм күрше өлкәләрҙән башҡорт йәштәрен йыйған сара быйыл Бөйөк Еңеүгә 70 йыл тулыуға һәм шағир Ғилман Ишкининдың яҡты иҫтәлегенә арналды.**



"Кош юлы" IV Асыҡ бард фестивале йәш композиторҙар, шағирҙар, йырсыларҙың ижади әүҙемлеген һәм оҫталығын арттырыу маҡсатында үткәрелә. Унда 16 йәше тулған һәр кем ҡатнаша ала. Быйылғы конкурстың икенсе турына сәхнәнән тороп үҙе ижад иткән йырҙы башҡарыу хоҡуғына бөтәһе 25 ҡатнашыусы лайыҡ булды. Уларҙың егерме дүртен компетент жюри ағзалары һайлаһа, егерме бишенсе гитара оҫтаһы тамашасыларҙың тауыш биреүенә ҡарап билдәләнде. Ойоштороусылар әйтеүенсә, фестивалде йыл һайын үткәргән осраҡта, артабан ҡатнашыусылар һаны кәмер, тигән ҡурҡыуҙар бөтөнләй урынһыҙ булып сыҡҡан. "Кош юлы" йәштәргә дәрт-дарман өҫтәүсе, ҡанатландырыусы рух сығанағына әйләнгән.

"Кош юлы" IV Асыҡ бард фестиваленең еңеүсеһе тип Тимур Ямалов танылды, уға Алтын гитара һыны тапшырылды. Шулай уҡ Көмөш гитара һындары фестивалдең "Вокал" номинацияһында еңеүсе Артур Кәбировҡа, "Гитара оҫтаһы" - Револь Ғималовҡа, "Рухлы йыр" - Минзәлә Яхинаға, "Тамашасы һөйөүе"н яулаған Рафаэль Ғәйнуллинға бирелде. Улар йылдан-йыл оҫталыҡтарын камиллаштыра барыусылар һәм был бардтарға етеүселәр әлегә юҡ.

Гитарала уйнап йырлаусыларҙан тыш, был фестиваль сиктәрендә йәш шағирҙар ҙа үҙ-ара көс һынаша, ижадташтары менән аралаша һәм шиғырҙарын халыҡҡа уҡып ишеттерә ала. Йәш шағирҙар семинарында быйыл Рәфкәт Ноғоманов, Назгөл Ғәлиева, Гөлназ Исҡәндәрова, Зөһрә Сафина, Розалия Зарипова, Гөлфинә Ҡарасурина, Миләүшә Сибәғәтуллина һәм Марат Дауытовтар сығыш яһаны. Моңло гитара сыңын тыңлап, шиғриәт донъяһына сәйәхәт ҡылыуҙан тыш, фестивалде күҙәтергә килеүселәр өсөн волейбол уйындары буйынса ярыштар ойошторолдо, "Кош юлы"на тағы бер үҙенсәлек өҫтәп, "Йәйғор ергә ҡолағанда" тип исемләнгән төстәр һабантуйы үткәрелде. Үләндәрҙән эшләнгән төрлө төҫтәге буяуҙарҙы бер-береһенә һибеүгә ҡоролған матур байрамды йәштәр бик ихлас ҡабул итте.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1436 һижри йыл.*

| Июнь (Шәғбан - Рамаҙан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 22 (6) дүшәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 23 (7) шишәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 24 (8) шаршамбы | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 25 (9) кесе йома | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 26 (10) йома | 3:12 | 4:42 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 27 (11) шәмбе | 3:13 | 4:43 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 28 (12) йәкшәмбе | 3:14 | 4:44 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ТӘҘРӘ ТӨБӨМДӘ...



# АҠСА ГӨЛӨ

**Аҡса гөлө (ҡытайҙар уны маймыл ағасы тип тә йөрөтә) иң популяр бүлмә үҫемлектәренең береһе. Ҡытайҙа хатта шундай һынамыш та йөрөй: "Әгәр ҙә етеш тормошта йәшәгең килһә, маймыл ағасы төбөнә тәңкә һал, шул осраҡта өйгә һәр ваҡыт аҡса килер".**

Күптәрҙең тәҙрә төбөндә үҫкән аҡса гөлө артыҡ ҡарау талап итмәй. Был гөл ҡояш төшөп тороуын ярата, әммә йәйге осорға уны ҡараңғыраҡ урынға ҡуйыу хәйерле. Һыуҙы ла күп ҡойорға кәрәкмәй, әҫе көндәрҙә дүрт көнгә бер тапҡыр, ҡышҡыһын аҙнаһына берҙе һибергә. Бүлмәлә үҫкән аҡса гөлө һирәк булһа ла аҡ ҡына, йондоҙҙарға оҡшаш сәскә ата.

Аҡса гөлө йортҡа бәрәкәт килтереүҙән тыш, төрлө сирҙәрҙән дауалай. Уның япраҡтары ҡысынһыуҙы баҫыу, микробтарҙы үлтереү, яраларҙы йүнәлтеү ниәтендә ҡулланалар. Был йәһәттән аҡса гөлөн юл япрағына тиңләргә була.

Ангина, миндаль биҙҙәрҙең шеше, фарингит менән ауырығанда көнөнә өс тапҡыр аҡса гөлөнөң бер генә япрағын сәйнәргә кәрәк.

Быуын шеше менән яфаланғанда аҡса гөлөнөң һуты менән быуындарҙы ыуырға була.

Нефрит, пиелонефрит ауырыуҙарын дауалау өсөн бер стакан ҡайнар һыуға бер балғалаҡ гөл япраҡтарын ваҡлап һалып, 10 минут әкрен утта ҡайнатып, бер сәғәт төнәтергә. Шунан һөҙөп, ҡайнаған һыу өҫтәп ҡойорға (башта булған күләмгә тиклем). Төнәтмәне көнөнә өс тапҡыр ашарҙан егерме минут алда берәр ҡалаҡ эсергә.

Тән янған осраҡта яра өҫтөнә гөлдөң япрағын ҡырҡып бәйләргә, кипкән һайын алмаштырып торорға.

Һағыҙаҡ, бал ҡорто саҡҡанда йә серәкәй тешләгәндә аҡса гөлөнөң һуты менән һыҙлаған һәм ҡысыған урынды еүешләтергә кәрәк. Бөтмәгән осраҡта ҡабаттан һөртөргә.

Һеңер тартылғанда, аяҡ-ҡулығыҙҙы бәреп ауыртҡырғанда сепрәктә гөл япраҡтарының һуты менән еүешләп, имгәнгән урынға ҡаплап, өҫтөнән полиэтилен ябып, бинт менән бәйләп ҡуйырға. Өс сәғәт тирһе тоторға, көнөнә өс тапҡыр алмаштырып торорға.

Тырнаҡ тирегә инеп үҫһә, аҡса гөлө япрағын уртаға ҡырҡып, ауыртҡан урынды ҡаплап, полиэтилен ябып, пластырь менән йәбештереп ҡуйырға. Япраҡ кипкән һайын алмаштырып торорға.

Йәмәғәт ойошмаларының халыҡ-ара берлеге "Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгрессы)" Башҡарма комитеты Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры урынбаҫары, Хөкүмәт аппараты етәксеһе И. А. Тажетдиновтың һөйөклө атаһы

**Азамат Әгзәм улының**

вафаты сәбәпле, уның һәм туғандарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

* * *

"Киске Өфө" гәзите редакцияһы коллективы баҫмабыҙҙың яҡын дуҫы, әүҙем уҡыусыһы һәм авторы

**Азамат Әгзәм улы Тажетдиновтың**

вафаты сәбәпле, уның балаларының, яҡындарының тәрән ҡайғыһын уртаҡлаша.

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмдең.**

*Улар үҙ фекерен әйтер алдынан ҡат-ҡат уйлаған. Барыһы ла йылмайып йөрөгән, сөнки улар бер-береһенә туҡтауһыҙ маҡтау һүҙҙәре яуҙырған. Был ауыл халҡы ошондай мөнәсәбәттәрҙән бик тә ҡәнәғәт булып йәшәгән.*

ӘЙТЕШ

# ЯҠШЫҒА ВАҠЫТ ЕТТЕ...



**Гәзитебеҙҙең 14-се һанынан алып сәсәндәр майҙанында Айыҡтужа менән Өшөрә, ә 18-се һандан Йәнһылыу менән Көфө сәсән шиғри әйтеш ҡорҙо. Был һандан алып шиғри әйтештә Яғылса менән Супай сәсәндәр дауам итә.**

**Яғылсаның Супайға әйткәне:**

Ай юғары, мин түбән,
Йырлап ишемде көтәм.
Бер кем мине саҡырмай,
Әллә билет һатылмай.
Оя ҡорор ҡауҙымын,
Иш тапмайым, яңғыҙмын.
Айыҡтужа ла ҡасты,
Әллә холҡомдан ялҡты.
Супай, йә һин яуап бир,
Әгәр булһаң мыҡты ир.
Башыңда булһа көпәс,
Ҡыҫҡыр: "Мин,- тиеп,- әтәс!"
Эҙләйбеҙ гелән яман,
Бер тигәндә, ике... ете.
Эҙләһәң, кер табыла,
Яҡшыға ваҡыт етте.
Һорау бирәм: ни яҡты,
Был донъяла ни яҡшы?

**Супайҙың Яғылсаға әйткәне:**

Яҡшымылыр - әйтә алмам -
Йырлап саҡырыу көтөү,
Айҙың юғарылығына
Түбәндән өмөт итеү;
Яҡшылыр ҙа булыу ҡауҙы,
Хатта ояһын ҡорған,
Ҡайҙан бала тапһын өйҙә
Иш табалмай ҡаңғырған?
Бүләк көтмәй, үҙең һайлау
Яҡшы, ти, беҙҙең заман.
Хыялдағы ысын булмай,
Бер яҡшыға - бер яман,
Тигән дә һуң боронғолар!
Тимәк, шәп булһаң үҙең,
Ишең итеп күҙлә, әйҙә,
Яман яҡтарын ирҙең!
Үҙе йығылған иламаҫ -
Күрһәң дә насар яғын,
Бер кемгә үпкәләмәҫһең-
Үҙең тапҡан яманың!
Тейерҙәрен генә әйттем,
Ашыңа ҡара-ҡаршы:
Хәрәкәттә - бәрәкәт, ти,
Был донъяла шул яҡшы!

**Яғылсаның Супайға әйткәне:**

Супай түгел, һупайһыңдыр,
Ябалағы Уралдың.
Көндөҙ боҫоп, төнөн сыҡҡан
Аусыһымы урмандың?
Һупайлыла йәшәйһеңме,
Өфөнөң ҙур биҫтәһе.
Тышҡа сыҡһаң, шунда мине
Осратырһың кистәрен.
Ҡайҙа ҡарап йырлаһам да
Йырҙың юҡ ул йыртығы.
Йомортҡаның йөйөн эҙләү -
Ир ҡартлығы, муртлығы.
Яҙғаның теүәл килмәне,
Бары дүрт куплет кенә.
Аусыһыңмы, беләйемсе,
Ат минә дуплет менән.

**Супайҙың Яғылсаға әйткәне:**

Аусы булмай кем булырһың,
Урман балаһы булғас?
Хәйер, гәйебем юҡ бында,
Атамды шунда ҡыуғас...
Йомортҡанан да йөй табыр
Ирҙең ҡарты, аҫылы, -
Ҡояштың да бар бит табы,
Бер шартлап, бер баҫылып,
Ана шулар боҙа ла һуң
Еребеҙҙе һәм беҙҙе!
Магнитуда тип уларға
Ғалимдар исем бирҙе.
Тағын күпкә ситкә киттек...
Ниҙә ине һүҙ башы?
Һорау ине был донъяла
Ни яҡты ла, ни яҡшы?
Таплы булһа ла, Ҡояшы,
Йөйлө булһа ла - күкәй,
Миненсә, туған, донъяла
Ошо икәүгә етмәй!

**Яғылсаның Супайға әйткәне:**

Минең дә тамыр урмандан,
Ул яҡта тыуһам да.
Инйәр буйындағы бөткән
Ауылдан булһам да.
Яуабыңдан белдем - йәшәйһең,
Шул "икәүҙә" ҡарап,
Нәфселәреңде тыймаһаң,
Булырһың әле ҡарап.
Был донъяла шул яҡшы -
Уйың булмаһын шаҡшы.
Йәшәйештең яҡтыһы,
Булһын иман саҡҡыһы.
Нәфселәнеп артығын,
Булма әҙәм аҡтығы.
Ҡояш табы - үҙеңә,
Һинеке - ул үҙеңә.
Йәшәмә үҙең өсөн,
Халҡым, тиеп, һал көсөң.
Булһаң һин ир-уҙаман,
Файҙаң тейер бер заман.

**Супайҙың Яғылсаға әйткәне:**

Тейер-теймәҫ файҙа өмөт итеп,
Шул замандар бер етер тип көтөп,
Йәшәйештең ниндәй яҡтыһы?
Шайтан ғына өмөтһөҙ ҙә, былай,
Шайтан тулы илдә нәфсе тыймай
Ир халҡының иң-иң шаҡшыһы.
Бер кем белмәҫ уйың ниндәйлеген,
Ҡәғбәләрҙең ҡайҙа, кемдәлеген,
Таң атһа - шул өмөт саҡҡыһы!

**Яғылсаның Супайға әйткәне.**

Һаҙағайҙың да бар яҡтыһы,
Төндә балҡып киткән саҡҡыһы.
Ул ялҡындың бармы йылыһы?
Күп лыҡыһаң, насар, тиеп яҡшыны,
Маҡтап торһаң, шәпһең,
тиеп шаҡшыны,
Һандуғас та шул һүҙҙәргә ышана,
Иҫ китмәле ҡарға, тиеп тамшана.
Өмөтһөҙ тип кем әйткәндер
шайтанды,
Өмөт менән һалдыра ул ыштанды.
Өмөт һалып күңелгә ул алдырта,
Үҙ бәләһен башҡаларға һалдырта.

**Супайҙың Яғылсаға әйткәне:**

Бәхәсебеҙ бер аҙ китте ситкәрәк,
Йүнәлеште төҙәләү кәрәк йәплерәк:
Ни ине һуң әңгәмәнең үҙегендә -
Шул юҫыҡта инәйек беҙ әскәрәк.
Сығып баҫҡас гәм халыҡтың алдына,
Борсолдороп киткеләй шул аҙ ғына...
Был хата ла төҙәтеүгә күп һорамаҫ,
Дүрт тояҡлы ат та ҡайсаҡ абына.
Ни яҡты ла, ни яҡшы тип башланың,
Йәй яҡтының күплеген
мин фашланым.
Илем шаһит: ҡыҙыу бәхәс барында
Уңға-һулға тайпылманым, ҡасманым.
Яҡшылыҡ та күп тә эргә-тирәлә,
Асыҡ булғас хатта илдең сиге лә,
Һәм, гөмүмән, селтәр тиған илаҡ аша
Бар донъяға үҙ өйөндәй инелә...

Тик, ҡаралап үҙебеҙҙең тарихты,
Сит тормоштар шәплегенә ҡаныҡтыҡ.
Күршеләрҙең тауығы ла ҡаҙҙай тиғән
Ябай ғына хәҡиҡәтте онотттоҡ.
Шулай булғас, ҡайҙа яҡты, ни яҡшы,
Ситтә, тигәс, йомарт хатта ҡояшы? -
Беҙ үҙебеҙ, үҙебеҙҙе яман ҡуйып,
Ҡырға борҙоҡ
йәш быуындың ҡарашын.
Улар хәҙер, ожмах, ти, сит илдәрҙә,
Әхирәттә түгел тамуҡ - беҙҙәрҙә!
Унда яҡты, унда яҡшы тип күрһәтә
Телевизор менән шул уҡ селтәр ҙә.
Быңа ниҙә яҡшылыҡтың кирелә,
Быңа ҡайҙа яҡтылыҡтың ҡараһы!
Үҙ илендә бәйгәмбәрҙәр булмағанды,
Сит яҡтарҙа уны ҡайҙан табаһың?

Бер яҡшыға - бер яман, ти хаҡ әйтем,
Бер яманға бер яҡшы тимәй һис кем.
Киреһенсә, үҙең булһаң яман әгәр,
Кем йомарты һинә яҡшылыҡ итһен?
Яҡтылыҡ та, яҡшылыҡ та - үҙеңдән,
Ошо ерҙә ожмах итәм, тигәндән!
Тик тарихты ямалауҙан инде уҙып,
Бөгөнгөнө хурлай кеше илендә!
Әйтереӊ бар: шулмы инде яҡшылыҡ -
Матурлыҡты ситтән эҙләй башланыҡ?
"Арьякта бит бер әнәгә -
бер һыйыр" тип,
Юлға сыҡҡан иҫәүгә оҡшаныҡ.
Ошо ерҙә өҙөр инем һүҙемде
/Былай ҙа күп әр-зарланыу түгелдә/.
Илен үҙе яман күреп, ят - шәп, тигәс,
Үҙеңдең дә кемлегеңдә бел инде...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бәйгелә әйтеш ҡорорға теләүсе яңы авторҙарҙы көтәбеҙ. Улар ҡарамағында - СМС өсөн +7-937-835-34-74 телефоны, "Киске Өфө"нөң электрон почтаһы kiskeufa@ufacom.ru. Бәйге барышын "Бәйләнештә" сайтының "Башҡорт ҡатын-ҡыҙ бите"ндә күҙәтеп барыу мөмкинлеге лә бирелә.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҪЫЛЫНҺАҢ...

## ағастың аҫылына аҫылын

Өндәшмәү - алтын икән, тип, алтын һүҙен йәшермә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Күршеләш кенә ике ауыл йәшәгән. Улар бер-береһенән әллә ни айырылмаған да, ә шулай ҙа беренсе ауылды икенсеһенән айырып торған бер билдә булған. Беренсе ауылда үтә мәҙәни, кеше күңелен ҡыймайым тип, һүҙҙәрен үлсәп кенә һөйләүсе, икенсе ауылда, киреһенсә, тураһын әйтәм, хаҡлыҡты яҡлайым, тип, ауыҙына ни тура килә, шуны ярып һалып һөйләүсе кешеләр көн күргән.**

**Беренсе ауылдағы кешеләрҙең йәшәү принцибы ошо булған: "Башҡаларҙың һиңә ҡарата ниндәй мөғәмәлә булыуын теләйһең - үҙең дә уларға шундай мөғәмәләлә бул!" Улар, башҡалар тураһында хәстәрлек күреү, уға борсолоу тыуҙырмау бик еңел, тип иҫәпләгән. Шуға ла улар үҙ фекерен әйтер алдынан ҡат-ҡат уйлаған. Был ауылда барыһы ла йылмайып йөрөгән, сөнки улар бер-береһенә туҡтауһыҙ маҡтау һүҙҙәре яуҙырған. Был ауыл халҡы ошондай мөнәсәбәттәрҙән бик тә ҡәнәғәт булып йәшәгән.**

**Икенсе ауылдағы халыҡ, нисек кенә ауыр булмаһын, бер-береңә дөрөҫтө тура ярып әйтеү яҡшыраҡ, тип аңлаған. Шуға ла улар теләһә ниндәй мәғлүмәтте һалҡын ҡанлылыҡ менән ҡабул иткән, юҡ-барға үпкәләп бармаған, сит кешенең әйткәненән нисек бар, шулай ҡабул иткән.**

**Беренсе ауылға икенсе ауылдан берәйһе килһә, бындағылар уға көскә түҙеп торған. Йомошон йомошлап, уны тиҙерәк ауылына оҙатыу яғын ҡарағандар, сөнки уның туралығы, тупһыҙлығы барыһын да борсолорға мәжбүр иткән. Әгәр ҙә инде беренсе ауыл кешеһе икенсе ауылға барһа, уға ышанмауһанлыҡ белдереп, бында ниндәй ниәт менән килгәнен асыҡларға тырышып, бик һаҡ ҡарағандар. Тура һүҙ һөйләмәгән кеше - шикле кеше, тигән ҡараш көслө булған был ауыл кешеләрендә.**

**Шулай итеп, икенсе ауылдағы халыҡ, барыһы ла асыҡ, кемдең ни эшләгәнен белеп-күреп, иҫкәртеп торғас, ниндәйҙер бәлә-ҡазаларҙыҡ ғына йәшәгән. Ә беренсеһендә иһә һәр ваҡыт ниндәйҙер бәләләр сығып ҡына торған: йә магазинды талайҙар, йә кемдеңдер йорто яна, йә кемдәләр туҡмап китәләр - сәбәбе билдәле инде: кеше күңелен уйлап, был бәләләрҙең сәбәбен юллап йөрөүсе, гәйеплене асыҡларға тырышыусы булмаған.**

**Беренсе ауыл кешеләре шулай йәшәүҙе дауам иткән, һәр быуынға ата-олата額ының сабыр холҡо тапшырылған. Шул уҡ тәртип боҙоуҙар - магазинды талауҙар, янғын, кемгәләр туҡмаҡ эләктереүҙәр ҙә дауам иткән. Ә икенсе ауыл кешеләре, бер-береһенә эт менән бесәй мөнәсәбәтендә булыу арҡаһында, гаилә лә ҡора алмаған, балалар ҙа тыумаған. Халыҡ ҡартайған һәм ауыл йәшәүҙән туҡтаған. Бындағы һуңғы кешене ерләргә килгәндәр уның өйө стенаһында аҡбур менән яҙылған шундай яҙыуҙы күргәндәр: "Хәҡиҡәт әсе, шуға ла уның ғүмере юҡ..."**


“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
18 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5010
Заказ 2789